*✓ Улың менән биш йәшенә саҡлы батша һымаҡ, ун биш йәшкә саҡлы - хеҙмәтсе һымаҡ, ун биш йәштән һуң дуҫ һымаҡ күреп аралаш.*

*(Боронғо һинд аҡылы).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29 ДЕКАБРЬ - 4 ҒИНУАР (АҠЪЮЛАЙ - ҺЫУЫҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№52 (522)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Ҡыңғырауҙың эсе буш



3

Ситтә йәшәп тә...



башҡортлоҡто һаҡлап була

6

Күрәҙәсе түгелбеҙ...



8-9 ә шулай ҙа беләбеҙ

Буранбайҙың...



тағы бер моңло балаһы

11

14 ТВ-программа


## ЙЫЛАН ЙЫЛЫНА

*Зинһар, тимен, ҡара йылан,*
*Ағыуың сәсә күрмә.*
*Бәлә-ҡаза тулы тоҡто*
*Уйламай аса күрмә.*

*Һин бит ифрат аҡыллыһың,*
*Кешеләй йүләр булма.*
*Аҡлыҡ-хаҡлыҡ урынына*
*Нахаҡтан түләр булма.*

*Йылан йылы яратыусан,*
*Өшөмәһен кеше лә.*
*Күңеле тулһын шатлыҡҡа,*
*Йырлап торһон эше лә.*

*Әгәр самаларын белһәң,*
*Ағыу үҙе дарыу ул.*
*Мин ышанам, Йылан йылы*
*Изге, йомарт, арыу ул.*

Тимер НИӘТШИН.

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# ДӨРӨҪ ҺҮҘ ҺӨЙЛӘП...

### дөрөҫ уй уйлап йәшәйек

"Ахырызаман тураһындағы хәбәр тараҡкан кешегә рәхмәт әйтеп бөтә алмайым. Күптәр күңеленә шик-шөбһә индерҙе ул хәбәр. Иң мөһиме, йәшәүҙең, тормоштоң, яҡындарыңдың, хәләл көсөң менән йыйылған мал-мөлкәтеңдең - булғандың ҡәҙерен белергә, нәфсеңде ауыҙлыҡларға өйрәтте. Мин үҙем ошо мәлдә бар кешеләрҙе ғәфү иттем, быға тиклем ҙур етешһеҙлек, ғәҙелһеҙлек тип иҫәпләнгән күренештәргә икенсе күҙлектән баҡтым, үҙемдең бәләкәй генә матди донъямды иң ҡәҙерлеһе итеп ҡабул иттем. Күрәһең, йәшәү ҡәҙерен белеү өсөн, шашынып, уҙынып китмәҫ өсөн ошондай тетрәнеүҙәр кәрәктер кешегә. Тик ул тетрәнеүҙәр ана шулай имеш-мимеш хәбәрҙәр рәүешендә генә булһын киләсәктә лә..." тине бер танышым 21 декабрҙән һуң. Уның һүҙҙәре иң яҡшы Яңы йыл теләге булып та, шул уҡ ваҡытта тормошобоҙҙа булып ятҡан һәр ваҡиғаны, ишеткән һәр хәбәрҙе дөрөҫ ҡабул итергә, дөрөҫ һығымталар яһарға кәрәк, тигән иҫкәртеү булып та яңғыраны.

(Дауамы 2-се биттә).

# Яңы йыл менән!



Өфө Ҡыш бабайҙары.

***✓ - Кемгә нимә етмәй, ул шул бушлыҡты тулыландырырға тырыша, - тип яуаплаған уға фәрештә. Ошо фәһемле тарихта динле булыу менән иманлы булыуҙың араһында ҙур айырма барлығы күренеп тора.***

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҠЫҢҒЫРАУҘЫҢ ЭСЕ БУШ

**Элегерәк Яңы йыл етә башлаһа, өс ат мисәүләп егелгән санаға ултырып, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу өйҙән-өйгә, ауылдан-ауылға ҡарттарға һәм бала-сағаға ҡүстәнәс өләшеп йөрөй торғайны. Заманы менән бергә был йола ла ваҡыт санаһынан төшөп ҡала бара. Ауыл хакимиәттәре эше яҡшы ҡуйылған урындарҙа ғына һаҡлана был йола. Әммә ажғырып торған аттар елеп килгәнен белдереп, бар халыҡты урамдарға сығырға мәжбүр итеүсе дуғаларҙағы ҡыңғырау сыңы күңел төбөндә сың-сың килеп ишетелеп тик тора. Ҡыңғырау тигәндән, унан саҡырым-саҡырым алыҫтарға китерлек тауыш сығыуы эсенең буш булыуынан килә тип кем уйлаһын инде. "Ҡыңғырауҙың эсе буш" тип әйтелә халыҡ мәҡәлендә. Уның кинәйәһе хаҡында уйланһаң, мәғәнәһе ҡыңғырау сыңынан да алыҫҡараҡ китерлек, Ер шарын урап сығырлыҡ, быуаттарға етерлек. Ошо әйтем хаҡында киңерәк итеп фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**



Ҡасандыр ике күрше йәшәгән. Уларҙың хәлле йәшәгәне Ҡөрьәнде ятҡа белеп, Ҡөрьән-Хафиз дәрәжәһенә өлгәшкән. Ул мәсеттән сыҡмаған, көнө-төнө намаҙ уҡыған, дин талап иткән бер ғәмәлде лә ҡалдырмай, теүәл үтәп барған. Диндә яҡшы белгәс, уны бер дини мәжлестәрҙән дә ҡалдырмағандар, урыны һәр саҡ табын түрендә, тамағы затлы ниғмәттә булған. Уның күршеһе, йортонда балалары күп булғанлыҡтан, йыл һәм тәүлек әйләнәһенә эшенән бушамаған, онотҡанда бер генә тапҡыр булһа ла мәсеткә барып намаҙ уҡырға ла ваҡыт тапмаған.

- Ҡайһылай бәхетле минең күршем. Донъяһы етеш, көнө-төнө намаҙлыҡ өҫтөндә ултырып, Аллаһы Тәғәлә хозурында булыуҙан да ҙурыраҡ бәхет бармы икән был донъяла йәшәгән кеше өсөн. Мин был турала тик хыяллана ғына алам, - тип уйлаған эш менән мәшғүл булыусы кеше үҙенең диндар күршеһен осраҡҡан һайын.

-Ҡайһылай бәхетһеҙ кеше, көнө-төнө эш тә эш. Мәсеткә барырға аҙ ғына ваҡыт табырға була бит, - тип уйлаған диндар үҙенең һәр ваҡыт эшкә ашыҡҡан күршеһен осратҡанда.

Күпмелер ваҡыт үткәс, күршеләр гүр эйәһе булған һәм яндарына һорау алыусы фәрештәләр килгән. Улар күршеләрҙән бәхетле булыу-булмауҙары хаҡында һорашҡан.

- Эйе, мин ғүмерем буйына изге доғалар менән йәшәп, бик тә бәхетле булдым. Доғалар уҡырға күпме ваҡыт кәрәк булһа, шунса ваҡытым булды. Бар тирә-яҡ минең аҙан, доға тауыштары менән тулы булды, кешеләр араһында ла абруйым юғары булды, - тигән диндар бик ҡәнәғәт ҡиәфәттә.

- Татырға насип булманы инде өләшәмә төшкән көмөшөмдө, бәхет мине урап үтте. Ғүмерем буйына көнө-төнө эш өҫтөндә ҡайнаным. Әммә һис тә мандыманым. Балаларым күп булғас, уларҙы ашатырға-эсерергә, кейендерергә кәрәк ине. Үкенескә күрә, намаҙ уҡырға, ғилем эстәргә теләгем ҙур булһа ла, быға минең ваҡытым етмәне, - тигән ғүмере буйына эш менән мәшғүл булыусы күршеһе.

Күршеләрҙе иң ныҡ аптыратҡаны шул булған: фәрештәләр уларҙың бәхет дәүмәлен бизмәнгә һалып ҡараған һәм ике яҡ та тигеҙ тартҡан. Был хәлде бер фәрештә түбәндәгесә аңлатып биргән. Иғтибарын тәүҙә диндарға йүнәлткән:

- Һин матди байлыҡҡа эйә булһаң да, рухи байлыҡ ҡытлығы кисереп йәшәгәнһең. Шул бушлыҡты тултырыу маҡсатында көнө-төнө намаҙ уҡығанһың, ғилем эстәгәнһең. Һин үҙеңдең байлығың уртаһында буп-буш күңелең менән фәкир кеүек ултырғанһың. Фәҡәт тик донъя малына бәйле нәфсең үлгәс кенә һин рухи байлыҡҡа эйә буласаҡһың. Матди байлыҡты һиңә Аллаһы Тәғәлә күңелеңдәге рухи фәҡирлекте тултырырға күберәк ваҡытың ҡалһын өсөн биргән...

Икенсе күршегә ҡарап, фәрештә былай тигән:

- Ә һин үҙ ғүмереңдә ярлылыҡтың, хеҙмәт ауырлығының ғазаптарын ныҡ татығанһың. Шуға күрә ғүмереңде бәхетһеҙ үткәрҙем тип иҫәпләйһең. Әммә һин яныһыңда, сөнки рухи халәт һәм бәхет матди байлыҡ менән үлсәнмәй. Һинең ғүмереңдең һәр миҙгеле рухи кәс, ғәм, сәм, доға уҡырға ынтылыш, хыялдар менән тулы булғанға, һин ғүмереңде бәхетле үткәрҙем тип иҫәпләй алаһың...

- Бер тапҡыр ҙа доға уҡымаған һәм үҙен бәхетһеҙ тойған кеше менән үҙ ғүмерен намаҙлыҡ өҫтөндә үткәргән кешенең бәхет дәүмәле тигеҙ булып сығамы инде? - тип үҙ дәғүәһен белдерергә ашыҡҡан диндар, фәрештәләрҙең һүҙе менән риза булмайынса.

- Һеҙҙең дәғүәгеҙ урынһыҙ, сөнки Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында һеҙҙең бәхет дәүмәле үҙегеҙҙе бәхетле итеп тойоу йә тоймауға бәйле түгел, - тигән диндарға фәрештә.

-Барыбер риза түгелмен быға. Мин ғүмерем буйы Аллаһты маҡтап доға уҡыным, күпме дини ғилем эстәнем, мин уҡыған доға-аяттарҙың иҫәбе-һаны юҡ, ә ул ғүмере буйы донъялыҡҡа бәйле тормош, эш менән булды,- тип һаман да сигенергә теләмәгән диндар.

- Кемгә нимә етмәй, ул шул бушлыҡты тулыландырырға тырыша, - тип яуаплаған уға фәрештә. Был һүҙҙәр диндарҙың ярһыуын шунда уҡ юҡҡа сығарған...

Ошо фәһемле тарихта динле булыу менән иманлы булыуҙың араһында ҙур айырма барлығы күренеп тора. Үҙ ғүмерендә бер генә тапҡыр булһа ла намаҙ уҡымаған кеше ғүмере буйына намаҙлыҡтан тормаған кешегә ҡарағанда иманлыраҡ булып сығыуы бар икән хатта. Һәр хәлдә, был тарихтан күренеүенсә, уларҙың ҡылған ғәмәлдәренә бирелгән баһала бизмәндәрҙең ике яғы ла тип-тигеҙ. Мәскәүҙә йәшәүсе милләттәшебеҙ, дин белгесе, ғалим Илшат Насыров та бер үзбәк ғалимының намаҙлыҡтан тормаған Урта Азия вәкиленә ҡарағанда, дин тотмаған башҡорттоң күпкә мосолман булыуы хаҡында әйткәнен миҫал итеп килтергәйне. Дин тотоу ғына иманлы, Аллалы булыуҙы аңлатмай икән шул.

Совет дәүерендә кешеләр һәм төрлө милләт вәкилдәре бер-береһенә ҡарата ихтирамлы, эскерһеҙ мөнәсәбәттә булды. "Кеше кешегә дуҫ һәм иптәш" тигән һүҙҙәр ҡоро лозунг ҡына булманы. Шул уҡ ваҡытта донъялар үҙгәреп китеп, элекке Советтар Союзында йәшәгән милләттәр үҙ диненә ҡайта башлағайны, дуҫлыҡ һәм иптәшлек мөнәсәбәттәре лә юғала башланы. Бынан ниндәй һығымта яһарға була, тип уйлайһығыҙ? Эйе, тимәк, совет осоронда кешеләрҙең мәңәр йылдар буйына тоғролоҡ һаҡлаған дини иман, әхлаҡ принциптары һуғышсан атеизм шарттарында ла дуҫлыҡ, иптәшлек сифаттарына йәшеренеп йәшәгән. Тимәк, ул саҡта кешеләр үҙ асылы менән иманлы булғас, барыбер ҙә Аллалы, динле булып йәшәгән. Күптәрҙең үҙ диненә килгән хәҙерге заманды иманға ҡайтыу тип атап булһа, кешеләр һәм ҡәүемдәр араһында арта барған дошманлыҡты нисек аңлатырға һуң? Әлбиттә, сабыр, иманлы, әхлаҡлы булырға саҡырған дин менән был күренештең араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ. Икенсенән, беҙ күп кенә кешеләрҙең ошо үҙгәрештәр заманында ысын мәғәнәһендә дингә килеп, Аллаһтың барлығын йөрәге менән тойоп, диндең фарыз ғәмәлдәрен үтәп, үҙе, ғаиләһе, милләте, иле өсөн ҡулынан килгәндең барыһын эшләп йәшәгәнен дә беләбеҙ.

Бында инде дәғүәбеҙ икенсе төркөмдәгеләргә ҡағыла. Ә хаҡ мосолман менән монафиҡты нисек айырырға һуң? Ошонда инде халҡыбыҙҙың "Ҡыңғырауҙың эсе буш" тигән әйтеме иҫкә килеп төшә. Ә шулай ҙа... Юғарыла яҙылғандарҙы уҡығас, был әйтемгә аңлатманы һәр кем үҙе бирһен һәм фекерҙәрен беҙгә яҙып ебәрһен.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Президенты Рөстәм Хәмитов мәҙәниәт һәм сәнғәтте үҫтереү, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған һәм етем балаларҙың торлаҡ хоҡуҡтарын яҡлау мәсьәләләре буйынса Башҡортостан Хөкүмәте ултырышын үткәрҙе. Шулай уҡ "2013-2017 йылдарға Башҡортостан Республикаһында мәғарифты үҫтереү" оҙайлы сроклы маҡсатлы программаһы тикшерелде. Йыл һайын мәҙәниәтте үҫтереүгә республика бюджетынан ике миллиард һумға тиклем аҡса бүленә. Быйыл яҡынса 50 мәҙәниәт учреждениеһында ремонт үткәрелде. Дүрт йыл эсендә мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә республика Президенты гранттарын 120 ижади башланғыс алды, гранттарҙың дөйөм күләме 16 миллион һум тәшкил итте.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Рәсәй Федерацияһының Федераль Йыйылышы ҡарамағындағы Закон сығарыусылар советының Милли именлекте һәм коррупцияға ҡаршы көрәште закондар менән тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса комиссияһын етәкләйәсәк. Комиссия Закон сығарыусылар советы ҡарамағындағы консультатив орган булып тора. Уның төп бурыстары - милли именлекте һәм коррупцияға ҡаршы көрәште закондар менән тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса тәҡдимдәр әҙерләү, шулай уҡ федераль закон сығарыусылар, Федераль Йыйылыш палаталары менән Рәсәй Федерацияһы субъекттарының закон сығарыу органдары араһында килешеп эш итеүҙе тәьмин итеү.

✓М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында, ҡышҡы сессия һөҙөмтәләренә ҡарамай, юғары уҡыу йортоноң бюджет бүлегендә белем алған дүрт меңгә яҡын студент 1385-әр һум күләмендә матди ярҙам алды, тип хәбәр иттеләр уҡыу йортоноң матбуғат үҙәгенән. Матди яҡтан ҡытлыҡ кисергән студенттар (яҡынса 910 кеше) - быға өҫтәп йәнә ике мең һум күләмендә, етем студенттарҙың һәр береһе - 17 мең һум күләмендә, активистар яҡынса биш мең һум күләмендә түләү алды. Ректорат юғары уҡыу йортон үҫтереүгә өлөш индергән студенттарына һәм уҡытыусыларына бындай ярҙамды йыл һайын күрһәтә.

**"Башинформ"дан.**

ИҠТИСАД ХӘЛДӘРЕ

# ХАҠТАР ТАҒЫ АРТЫРМЫ?

**Йыл аҙағына яҡынлашты. Ғәҙәттә, был ваҡытта барыһы ла киләһе йылға пландар ҡора, һығымталар эшләй. Иҡтисад өлкәһе лә был ҡағиҙәнән ситләшмәй. Йылан йылында беҙгә нимә көтөргә? Белгестәр һүҙенә ҡолаҡ һалайыҡ.**

2013 йылға Рәсәй иҡтисады, 2012 йыл менән сағыштырғанда, сағыштырмаса ауыр хәлдә инә, ти белгестәр. Рәсәй Иҡтисад министрлығының һуңғы баһаламаһына ярашлы, илдең Эске тулайым продукты күләме (ВВП) киләһе йылда 3,5 процентҡа артасаҡ (2012 йылда был һан 4,3 процентҡа тиң булды). Ә макроэкономик анализ һәм ҡыҫҡа ваҡытлы прогноздар үҙәгенең "Макроэкономика һәм финанстар" йүнәлеше етәксеһе Дмитрий Белоусов фекеренсә, илдең иҡтисады һәйбәт булһын өсөн Эске тулайым продукт күләме 5,5 процентҡа тиклем етергә тейеш. Инфляция өлкәһендә лә белгестәр ҡыуанырлыҡ күҙәтеүҙәр яһамай, йәғни улар хаҡтарҙың тиҙ артасағын күҙаллай. Ағымдағы йылда Рәсәйҙә инфляция 6,5 процент тәшкил иткән. Ә 2011 йылда иһә был күрһәткес 6,1 процент булып, һуңғы 20 йыл эсендәге иң яҡшы күрһәткестәрҙән һаналды.

Бойондороҡһоҙ эксперттар фекеренсә, сәнәғәт өлкәһендә стагнация күҙәтелеүе мөмкин. Иҡтисадта стагнация термины ниндәйҙер өлкәләре етештереүҙә һәм һатыуҙа булған тотҡарлыҡтарҙы аңлата. Был тотҡарлыҡтар, үҙ сиратында, эшһеҙлектең артыуына, эш хаҡының кәмеүенә һәм халыҡтың йәшәү кимәленең түбәнәйеүенә килтерә. Быйыл ил сәнәғәтен түбән тәгәрәүҙән бер-нисә өлкә - нефть эшкәртеү, металлургия һәм аҙыҡ-түлек етештереү сәнәғәттәре генә тотоп ҡалды. Ә бына ағас эшкәртеү һәм машиналар төҙөү өлкәһендә етештереүсәнлек ҡырҡа кәмегән. Шулай уҡ файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу, химик сәнәғәт һәм төҙөлөш материалдары етештереү өлкәһен дә яҡшы эшләгәндәр исемлегенә индереп булмай.

Иҡтисадсылар фекеренсә, кредит өлкәһендәге хәлдәр ҙә ил иҡтисадын яҡшыға алып бармай. Күрсәткән һуң иҡтисад ныҡлап аяҡҡа баҫмаған, халыҡтың килеме ышаныслы рәүештә үҫмәй, ләкин шуға ҡарамайынса банктар физик шәхестәргә кредит таратыуын дауам итә. Әгәр ҙә яҡын арала банктар һәм халыҡ үҙе бының хата аҙым икәнлеген аңламаһа, беҙҙә "бурыстар күпсөгө" көтә, ти улар.

Шулай ҙа барыһы ла насар булмаясаҡ. Мәҫәлән, Иҡтисади эксперт төркөмә етәксеһе Евсей Гурвич "киләһе йылда Рәсәй иҡтисады үҫеше күҙәтеләсәк", тигән ышаныста. Быға тәү сиратта Рәсәйҙән ситкә сығарылған капиталдың кәмеүе лә булышлыҡ итәсәк, ти ул. Шулай уҡ Рәсәйҙең фәнни-техник өлкәһендә лә йылдам алға китеш күҙәтеләсәк, һәм беҙҙең ил фән тиҙ үҫкән илдәр рәтендә буласаҡ, ти эксперттар. Рәсәй, шулай уҡ, космос өлкәһендә лә үҙенә лидерлыҡты ҡайтарасаҡ һәм был уға донъя аренаһында өҫтөнлөклө урын биләргә ярҙам итәсәк. Быларҙың барыһы ла ил иҡтисады үҫешендә тик ыңғай роль генә уйнаясаҡ, тигән фекерҙә белгестәр.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЕЛ АРБАҒА УЛТЫРЫП...

## тамаша ҡарарға килегеҙ!





**Әгәр Ел арбағыҙ йәки осоусы балаҫығыҙ булһа, нимә эшләр инегеҙ? Кемдер Канар утрауҙарына йәки Мысырға китергә хыялланалыр, бәғзеләрҙең икенсе төрлө планы ла барҙыр, бәлки. Ә мин бына шул әкиәттәге "техника"ға ултырыр ҙа, баш ҡалабыҙҙа үтәсәк Яңы йыл тамашаларын һәм мажараларын күҙәтер инем. Юҡһа, улар шул тиклем күп, ҡайһыһына барырға, ҡайһыһын ҡарарға ла белеп булмай. Ысын, бына, билләһи! Хатта ярҙамға Ваҡыт машинаһын да саҡырыр инем әле, сөнки баш ҡала ғына түгел, республика өсөн байрам 21 декабрҙә үк башланды инде.**

Кемдер ахырызаман көткәндә, балалар өсөн Президент шыршыһы "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында тап 21 декабрҙә үтте. Уға бөтәһе 93 уҡыусы саҡырылғайны. Ошо уҡ бинала 22 декабрҙә иртән баш ҡаланың һәләтле балалары өсөн сағыу тамаша ойошторолһа, төштән һуң етем балалар, атаәсә тәрбиәһенән мәхрүм ҡалған, балалар йорттарында һәм икенсе ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе балалар өсөн шыршы байрамы уҙғарылды. Унда бырлыһы 960 бала ҡатнашты. 23 декабрҙә иһә "Нефтсе" мәҙәниәт һарайындағы тамаша күп балалы, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә, приюттарҙа тәрбиәләнеүсе 500 балаға әкиәт донъяһына сәйәхәт ҡылдырып, шатлыҡ өләште.

24 декабрҙә Ленин майҙанында урынлашҡан баш ҡаланың баш шыршыһы тантаналы рәүештә уттарын ҡабыҙҙы. Шыршыла уттар ҡабыныу, әлбиттә, Өфөбеҙҙә балалар өсөн генә түгел, ә өлкәндәр өсөн дә Яңы йыл байрамы башланыуы тураһында хәбәр итте.

26 декабрҙә баш ҡала халҡы үҙенсәлекле тамаша шаһиты булды - "Өфө-Арена" алдындағы майҙанда Ҡыш бабайҙар парады старт алды. 700 самаһы төрлө кейемдәге, төрлө буйҙағы, төрлө телдә һөйләшкән һаҡалтайолатайҙар Ленин урамынан "Агиҙел" ҡунаҡханаһына тиклем үтте. Был көн баш ҡаланың 11 уҡыусыһы өсөн икенсе тантана менән иҫтә ҡаласаҡ. Улар Мәскәүҙә Кремль шыршыһында ҡатнашты.

Бынан тыш, баш ҡаланың ете районының төп майҙандарында боҙ ҡаласыҡтары үҙенә саҡыра, театрҙарҙа төрлө тамашалар ойоштоpола, мәҙәниәт һәм ял парктарында ла байрам саралары гөрләй.

Шулай ҙа иң тулҡынландырғыс мәл 31 декабрҙә буласаҡ. Киске сәғәт 9-ҙа Ленин майҙанында башланасаҡ Яңы йыл концертына сәғәт төнгө 2-лә фейерверк нөктә ҡуясаҡ. Әйткәндәй, ҡала округы хакимиәте был көндө өфөләргә өҫләтә шатлыҡ өләшмәксе - байрам төнөндә Конгресс-холл һәм "Мотор эшләүселәр" мәҙәниәт һарайы эргәһендәге майҙандарҙа ла төнгө күктә фейерверк нурҙары йәйғор төҫтәренә мансыясаҡ.

...Хәҙер аңланылыҙмы инде, ни өсөн әкиәттәрҙә генә файҙаланылған супер-"техника"ға эйә булыу теләге менән янғанды? Тамашаларҙан ситтә тороп ҡалғы килмәй!

Сәриә ҒАРИПОВА.

ХОККЕЙ

# ДОНЪЯ ЧЕМПИОНАТЫ...

## Өфөбөҙгә килде

**Ошо көндәрҙә "Өфө-Арена"ла Йәштәр командалары араһында Шайбалы хоккей буйынса донъя чемпионаты (ICE hockey U20 Word championship) башланды.**

Алты меңдән ашыу көйәрмәндә хоккей буйынса донъя беренселеген һынландырыусы талисман - Тимка ҡушаматлы һоро айыу сәләмләне. Конькиҙарҙа күҙ әйәрмәҫ хәрәкәттәр яһаусы йәш фигуралы шыуыусылар барыһының да башын әйләндерҙе, улар артынса чемпионатта ҡатнашыусы ун команда дәүләт байраҡтарын Өфө боҙо өҫтөндә елберҙәтте. Төрлө төҫтәрҙә балҡыған "Өфө-Арена" боҙонда яҡтыртҡыс ҡорамалдар республикабыҙҙың төрлө символдарын, иҫтәлекле урындарын сағылдырҙы, дәртле ҡурай моңона башҡорт милли кейемендәге балалар һырғалаҡ шыуып, өйөрөлөп, бейеп күрһәтте.

Чемпионатты асыу тантанаһында Рәсәйҙең Хоккей федерацияһы президенты Владислав Третьяк, Халыҡ-ара хоккей федерацияһы ағзаһы Френк Гонсалес, Рәсәйҙең спорт, туризм һәм йәштәр сәйәсәте министры урынбаҫары Юрий Нагорных, Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Александр Иванюта, Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиев ҡатнашты. Френк Гонсалес уйындарҙы асыҡ тип иғлан иткәндән һуң, Рәсәй командаһының тәүге сығышы, Братиславанан килгән Словакия йыйылма командаһына ҡаршы уйыны, башланып та китте.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала Советында республика баш ҡалаһының лайыҡлы кешеләрен тәбрикләү тантанаһы үтте. Табиптар, уҡытыусылар, ғалимдар, композиторҙар, полиция хеҙмәткәрҙәре, сәнәғәт предприятиелары вәкилдәренән 19 кеше ҡаланың юғары наградаһы - ҡала округының Почет грамотаһына, йәнә 30 кеше ҡала Советының Почет грамотаһына лайыҡ булды.

✓Алдағы йылдарҙа Өфөлә йәнә өс ер аҫты үткәүелен төҙөү планлаштырыла. Улар "Мир" фирмаһы", "Рәми Ғарипов исемендәге гимназия" һәм "Актерҙар йорто" туҡталыштары янында урынлашасаҡ. Әлеге ваҡытта "Үҫмерҙәр китапханаһы" һәм "Дан бульвары" туҡталыштары янында ер аҫты үткәүелдәре төҙөлөшө әүҙем бара. Төҙөлөш 2013 йылдың сентябрендә тамамланасаҡ. 2025 йылға республиканың баш ҡалаһында йәмғеһе 35 ер аҫты үткәүеле буласаҡ.

✓Өфөлә БР буйынса Эске эштәр министрлығының ОМОН (махсус тәғәйенләнештәге мобиль отряд) хеҙмәткәрҙәре өсөн төҙөлгән фатир тибындағы ятаҡ асыу тантанаһы үтте. 17 ҡатлы йорт Революцион һәм Владивосток урамдары киҫешкән урында төҙөлгән. Был тулыһынса республика полицияһы хеҙмәткәрҙәре өсөн тәғәйенләнгән беренсе йорт. Ун биш ҡатта 75 фатир урынлашҡан. Беренсе ҡатта балалар клубы, медицина пункты һәм башҡа хеҙмәтләндереү пункттары эшләйәсәк. Йорт төҙөүгә федераль бюджет - 134 миллион һум, республика бюджеты 32 миллион һум аҡса бүлгән. Бина ярты йыл эсендә төҙөлгән.

✓Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендә, "Простор" сауҙа-күңел асыу комплексы бинаһы артында, һырғалаҡ асылды. Шыуыу өсөн ике майҙансыҡ эргәһендә заманса пластик хоккей ҡумтаһы ҡуйыласаҡ. Һырғалаҡтың дөйөм майҙаны 7100 квадрат метр тәшкил итә. Һырғалаҡ көн һайын 12 сәғәттән 23-кә тиклем эшләй. VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарын үткәреү айҡанлы Өфөнөң спорт комитеты 14 йәшкә тиклемге балаларҙы көн һайын 12-15 сәғәттәрҙә һырғалаҡта бушлай шыуырға саҡыра. Өлкәндәр өсөн һырғалаҡҡа инеү - 80 һум, 14 йәшкә тиклемге балалар өсөн 50 һум тора, 5 йәшкә тиклемге балалар өсөн инеү бушлай.

*ЭЙ, ТУҒАН ТЕЛ!*

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияһының сираттағы һәм шул уҡ ваҡытта йылды йомғаҡлау ултырышында ҡапыл ғына Н. Некрасовтың "Шағир һәм гражданин" әҫәре хәтергә килеп, уның юлдарын бер аҙ үҙемсә бороп күңелемә һалып ҡуйҙым. Сара буйынса яҙыласаҡ мәғлүмәткә әҙер "баш" бит ул! Тимәк, ниндәйҙер бер мәл күңел ҡылдарын сирткән, төпкө аңға тап шул юлдарҙы хәтерҙән соҡоп сығарырға мәжбүр иткән.**



# БАШҠОРТ БУЛМАҺАҢ ДА..

## граждан булырға бурыслыһың!

Дөрөҫөн әйткәндә, ниндәй генә ултырыш булмаһын - ул ваҡыт әрәм ителгән, ялҡытҡыс бер сара кеүек ҡабул ителә. Кемдер унда "йоҡо туйҙыра", кемдер ваҡытының бушҡа үтеүенә уфтана, кемдер, киреһенсә, күпмегәлер булһа ла эш урынынан сығып китеп, һауа алыштырып йөрөп килеүенә ҡыуана. Сығыш яһаусылар трибуна артынан төшкәс тә елкәләренән ауыр йөктө алып ташлағандай еңел һулай. Ҡыҙыҡ өсөн генә сағыштырып ҡарағанда, был сығыштар инде нисәмә йылдар бер үк шаблонға ҡоролған, бары тик ундағы һандар ғына үҙгәреп тороуы ихтимал: йыл дауамында урындағы комиссиялар күпме ултырыш үткәргән, ҡайҙа хаталар асыҡланып, улар төҙәтелгәнме, юҡмы, мәктәптәрҙә күпме бала үҙенең туған телен өйрәнә, уларҙы нисә уҡытыусы уҡыта, уларҙың күпмеһе юғары белемле, балаларҙа милли рух һәм ватансылыҡ тойғоларын тәрбиәләү маҡсатында ниндәй саралар уҙарыла, дәүләт телдәрен көндәлек тормошта ҡулланыу ниндәй кимәлдә тормошҡа ашырыла һ.б. Ә был юлы ишетелгән яңылыҡ бер тәрләләк томаның ярып килеп ингән яҡты нур кеүек булды һәм йоҡомһорап барған аңды төрткөләп тигәндәй уятып, Некрасовты иҫләргә мәжбүр итте. Ғәмәлдә иһә, артыҡ бер нәмә лә әйтелмәне лә кеүек, бары тик баш ҡаланың Октябрь районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Гүзәл Фәйзуллина үҙенең сығышында быйыл беренсе тапҡыр 24 муниципаль хеҙмәткәрҙең хакимиәттә ойошторолған башҡорт теле курстарында уҡыуы хаҡында бәйән итте. Уларҙы Башҡортостан Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре барып уҡытҡан. "Башҡорт теле дәүләт теле булып торғас, исмаһам, беҙгә мөрәжәғәт иткән башҡорттар һәм татарҙар менән һаулыҡ һорашып, уларҙың ниндәй үтенес менән килгәнен асыҡлау бик мөһим", - ти Гүзәл Әскәт ҡыҙы.

Октябрь районы хакимиәтенә "Афарин!" тиергә генә ҡала. Ниһайәт, етәкселәр эште талап итеүҙән түгел, ә үҙҙәре өлгө күрһәтеүҙән башларға булды. Сөнки улар - Башҡортостан граждандары һәм шағир һүҙҙәренә әйләргәндә: "Башҡорт булыуың мотлаҡ түгел, ә граждан булырға бурыслыһың!"

Шулай уҡ Өфө ҡала хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика идаралығы начальнигы урынбаҫары Рәил Мөхәмәтовтың сығышы ла иғтибарҙы йәлеп итте. Идаралыҡ быйыл социологик һорау алыуҙар үткәргән һәм уның һөҙөмтәләре ҡыҙыҡлы: яуап биргән 1 мең кешенең 16,3 проценты - башҡорт, 48,6 проценты - рус, 29,5 проценты - татар, 5,6 проценты башҡа милләт вәкилдәре. Шуларҙың 60 процентына ниндәй милләттән булыуы бик мөһим (башҡорттарҙа был күрһәткес 72,9 процент). Был инде милли рухтың, ватансылыҡ тойғоһоноң юғары булыуын раҫлай. Яуап биреүселәр фекеренсә, уларҙы үҙ милләте вәкилдәре менән тәү сиратта тел, мәҙәниәт һәм тыуған ер берләштерә, бәйләй (башҡорттар - 74,8, рустар - 60,3, татарҙар 67,3 процент). Республика мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуға респонденттарҙың 44 проценты - ыңғай, 24 проценты - нейтраль, 25 проценты кире ҡараштa. Шулай уҡ яуап биреүселәр (башҡорттар - 16,3, рустар - 10,7, татарҙар 14,4 процент) туған телендәге матбуғат баҫмалары һәм теле-радио тапшырыуҙар етмәй, тигән фекерҙә.

Әйткәндәй, баш ҡала округы хакимиәтенең сайты ауырлыҡ менән булһа ла "башҡортса һөйләшергә тырыша". Был йүнәлештә эште әүҙемләштереү кәрәклеге һиҙыҡ өҫтөнә алынды ултырышта. Ни тиһәң дә, балыҡ башынан серегән кеүек, өлгөнө лә баш күрһәтергә тейеш - башҡорт булмаған хәлдә лә, етәкселәр тыуған республикаһының, тыуған дәүләтенең граждәны булырға бурыслы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

Рәсәйлеләр төүҙән үк уйын дилбегәһен үҙ ҡулына алды, майҙан хужалары булараҡ, ҡунаҡтарҙы "икмәк-тоҙ" менән ҡаршылауҙы кәрәк тип тапманы шикелле. Хәйер, уйындың аҙаҡҡы ярты минутында шулай ҙа дилбегәне бер аҙ бушатып та ташланылар, әммә... Әйҙәгеҙ, уйын барышына ҡыҫҡа ғына байҡау яһайыҡ, булмаһа. Тәүге осорҙоң беренсе яртыһында ике яҡ та бер ҡарарға килә алмағандай тойолдо. Шулай ҙа, тәүге осор тамамланырға биш минут ҡалғас, һөжүмсе Никита Кучеров Адам Надь ҡапҡаһына тәүге шайба оҙатып, иҫәпте асыуға өлгәште. Икенсе осорҙоң уртаһында Александр Хохлачев, Наил Яруллин пасын файҙаланды һәм иҫәпте икегә еткерҙе. Әммә икенсе осорҙоң һуңғы биш минутында ҡунаҡтар һөжүмсеһе Матуш Матис Александр Василевский ҡапҡаһына тәүге гол индерҙе. Өсөнсө осорҙа ҡунаҡтар әүҙем һөжүмгә күсте һәм осор тамамланырға 30 секунд ҡалған саҡта иҫәпте тигеҙләүгә өлгәште. Уйынға тип билдәләнгән төп ваҡыт тамамланғас, өҫтәмә биш минут иғлан ителде. Был биш минут тамамланыуға, Рәсәй командаһы капитаны Наил Яруллин һуңғы шайбаны сәпкә тейгеҙҙе һәм майҙан хужалары алға сығарҙы. Шулай итеп, Рәсәй һәм Словакия йыйылма командалары араһындағы алыш 3:2 иҫәбенә тамамланды.

Көйәрмәндәр араһында Канадалан килгән ғаиләләр ҙә күренгеләп ҡалды. Уларҙа был спорт төрөнә мөнәсәбәт бик етди икәнен беләбеҙ. Һуңғы йылдарҙа беҙҙә лә хоккейға иғтибар нығ артты. Быға "Салауат Юлаев" хоккей клубының еңеүҙәре лә булышлыҡ итте. Һәр хәлдә, донъя чемпионатына килеүселәрҙең күптәренең юлаевсылар формаһына оҡшаш кейем кейеп килеүе быға асыҡ дәлил ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйыл тәүге тапҡыр осрашыуҙарына ҡарамаҫтан, былтырғы чемпионат еңеүсеһе Швеция Чехияны 4:1 иҫәбе менән менән ҡыйратһа, Канада Германияны 9:3 иҫәбе менән тар-мар итте. Уйындар дауам итә.**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

*ӘЙҘӘ, ҠЫЙЫУ БУЛАЙЫҠ!*

# АСЫЛЫМ - БАҪАЛҠЫЛЫҠ,

## әммә ышаныслы атлап барам

**Ҡыйыулыҡ - кешегә хас ихтыяр һәм әхлаҡи һыҙаттар араһында иң яҡшы сифат, тиҙәр. Тап ҡыйыу булған өсөн кеше үҙенең, яҡындарының, башҡарған эшенең, иленең мәнфәғәттәрен яҡлай алалыр.**

Мин ғаиләлә биш егет араһында үҫтем, шуға ла үҙемдә кеше араһында иркен тоям. Бәлки, был ҡыйыулыҡ тип тә аталмайҙыр, әммә миндә үҙ-үҙемә ышаныс бар, шуға ла мин теләһә ниндәй эшкә ҡурмайынса тотона алам. Бәләкәй саҡта бөтөнләй ҡурсаҡ уйнамағанмын, минең өсөн иң ҙур бүләк - уйынсыҡ машина булған. Әммә шул уҡ ваҡытта сәсем гел оҙон булған, күлдәк кейергә, сәсемә таҫма тағырға яратҡанмын, йәғни, миндә ҡатын-ҡыҙға хас сифаттар өҫтөнлөк итә, тип әйтә алам. Әсәйемә, атайым менән уларҙың мөнәсәбәтенә ҡарап, башҡорт ҡатын-ҡыҙы баҫалҡы булырға тейешлегенә лә төшөнә инем. Баҫалҡы булыу, әлбиттә, яҡшы, ҡатын-ҡыҙ нәзәкәтле, ипле булырға тейеш, үҙем дә кәрәк булғанда һаҙлы ла була беләм, баҫалҡылыҡ та бар миндә. Тик бөгөн һаҙланып ултырып ҡына күп нәмәгә өлгәшеп булмай. Эйе, һәр ҡатын-ҡыҙ кеүек, минең өсөн дә ғаиләм мөһим урынды алып тора, әммә, минеңсә, хәҙерге заман гүзәл заты ҡатын һәм әсәй булыу менән сикләнеп ҡалырға тейеш түгел.

Утка ла, һыуға ла инергә әҙер кешене ҡыйыу тип әйтеп булалыр, Аллаға шөкөр, мин бындай ваҡиғаларға осрағаным һәм был осраҡта үҙемде нисек тоторомдо һынап ҡарағаным юҡ. Әммә тормош буйлап ышаныслы атлау, үҙ-үҙеңә ышаныу - ҡыйыулыҡтың төп сағылышы. Эшем балалар менән бәйле булғанлыҡтан, мин хәҙер ҡыйыулыҡ кеүек сифаттарҙың ғаиләлә тәрбиәләнә икәненә инанғанмын. "Тамыр"ға килгән балаларҙы һайлап алғанда туған телендә таҙа һөйләшеүенән тыш, ҡыйыулығына ла иғтибар итәһең. Әгәр ҙә бала бөтөн ергә тығылып, бөтөн нәмә менән ҡыҙыҡһынып, һорауҙарын бирә икән, тимәк, ул бала эшләй аласаҡ. Мине лә атайым менән әсәйем тегендә бармайһың, быны эшләмәйһең, тип бер ҡасан да тыйманы. Бары тик эшләгән эшеңдән, ҡылығыңдың һөҙөмтәһе өсөн бәләкәйҙән яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләргә генә кәрәк.

Ғөмүмән, тормоштоң һинең алдыңа сығарған мөмкинлектәрен ҡурҡмайынса ҡабул иткән һайын, алдыңда тағы ла ҙурыраҡ офоҡтар асыла. Шуға ла, әйҙәгеҙ, ҡыйыу булайыҡ һәм балаларыбыҙҙы ла ҡыйыу итеп тәрбиәләйек.

**Ләйсән МӘЗИТОВА,**
**"Тамыр" телеканалы режиссеры.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Каолин



Аҡ балсыҡ - кварц, окисланған алюминий һәм һыуҙан торған тау тоҡомо. Медицина күҙлегенән ҡарағанда, ул күп халыҡтарҙа ҡайһы бер ауыруҙарҙы дауалау өсөн ҡулланыла. Мәҫәлән, йөрәк тапҡырына һалынған аҡ балсыҡ "коймағы" йөрәк тибешен яйға һала һәм дөрөҫ ҡан йөрөшөн яҡшырта, ҡатыҡҡа болғатылған аҡ балсыҡты маңлайға компресс итеп һалһаң, йоҡоһоҙлоҡтан йонсомаясаҡһығыҙ. Һеңер тартылғанда шешкән урынға аш һеркәһендә иҙелгән һары балсыҡ һалыу яҙҙам итә. Каолин - аҡ балсыҡты ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары (колит, энтерит һ.б) ваҡытында 20-100 грамм күләмендә ашарға ла ярай, тире ауырыуҙары, тире янған осраҡтарҙа мазь, паста итеп ҡулланыла. Дауаланыу өсөн таҙа, ҡомо булмаған, ҡүкһел төҫтәге, йомшаҡ һәм тотоп ҡарағанда майлы балсыҡ кәрәк. Балсыҡ шулай уҡ артрит, радикулит, плексит, невралгия ваҡытында ла ярҙам итә.

## Йүткереү

Оҙаҡ дауамлы йүткереү, плеврит ваҡытында түбәндәгесә дауаланалар: йодҡа тығылған мамыҡ менән тәндең ауыртҡан урынында бер йүнәлештә буйлы һыҙыҡтар яһарға. Улар кипкәс, арҡыры һыҙыҡтар һыҙырға.

## Дауалаусы шыйыҡса

2,5 грамм ментол+1,5 грамм анестезин+1,5 грамм новокаин+100 грамм спирт. Ауыртҡан урындарҙы ошо шыйыҡса менән ышҡырға. Етмәһә, ул юғары артериаль ҡан баҫымын дауалауҙа иҫ киткес яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Бының өсөн уны төңгәләкҡә муйынға һөртергә кәрәк.

## Катаракта

Катарактаны дауалауҙа ҡарһаҡ (очанка) үләне һуты иң яҡшы сара булып тора. Һутты көнөнә 2 тапҡыр ауырыу күҙгә 2-3 тамсы тамыҙырға. Бер нисә көндән катаракта юҡҡа сығасаҡ.

**Рецепттарҙы ҡулланыр алдынан табип менән кәңәшләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын мотлаҡ тикшерергә кәрәк.**

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

**✓ Исмәғиловтар хәҙер инде үҙ илебеҙгә - Башҡортостаныбыҙға ҡайта башланы. Әлбиттә, улар яңы, бай башҡорттар, әммә береһе лә, уларҙың балалары ла милли йөҙөн юғалтмаған. Был бит үҙе батырлыҡ, юғары мәҙәнилек өлгөһө.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

### Ун алтынсы, ун етенсе йомғаҡлау дәрестәре: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Уҡыусыларҙың ижади эштәре. Был предмет буйынса дәреслектәр дүртенсе кластың өсөнсө һәм дүртенсе, бишенсе кластың беренсе һәм икенсе сиректәрендә уҡытылырға иҫәп тотоп яҙылған. Әммә был бик күп уңайһыҙлыҡтар тыуҙырыр ине. Аҙаҡ бер генә класта уҡытыу маҡсатҡа яраҡлы тип хәл ителде. Ә дәреслек йөкмәткеһе шул көйө ҡалды. Шуға күрә уҡыу йылы уртаһында ике дәрес үтелгәндәрҙе ҡабатлауға бүленгән. Был дәрестәрҙә уҡыусылар менән ирекле әңгәмә алып барырға, аңлаған-аңламағандарын һорашырға, яңылышлыҡтарын төҙәтергә кәрәк. Әммә дин әһелдәре менән дәрестәрҙә осраштырыуҙан, дингә өндәүҙән һаҡ булығыҙ. Кешелек донъяһы һәр ваҡыт яҡшылыҡҡа ынтылған, үҙенән һуң киләһе быуынды һәр тарафтан изгелекле итеп тәрбиәләргә тырышҡан. Диндәр ошо маҡсатты күҙҙә тота, тик төрлөһө төрлө йолалар аша башҡарыла. Бер дин дә яуызлыҡҡа өндәмәй. Һәр уҡыусы ошо хәҡиҡәтте аңларға тейеш.

### Ун алтынсы, ун етенсе йомғаҡлау дәрестәре: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Уҡыусыларҙың ижади эштәре. Әйтеп китеүебеҙсә, был предметты уҡытыу дүртенсе кластың йыл аҙағына һәм бишенсе кластың тәүге ике сирегенә тип иҫәпләнгән. Уҡытыу тәртибе үҙгәртелһә лә дәреслек йөкмәткеһе шул уҡ ҡалды. Хәҙер иһә 16-17-се дәрестәр ике сирек аҙағына тура килә. Шуның өсөн уларҙы үтелгән материалды ҡабатлау өсөн тәғәйенләү дөрөҫ булыр. Әлбиттә, һүҙлек менән эшләргә кәрәк. Уҡытыусыға һәр һүҙгә ҡарата бик һаҡ булырға һәм аңлатма биргән саҡта үҙенә лә һүҙлектәрҙән файҙаланырға кәрәк.

### Ун алтынсы, ун етенсе йомғаҡлау дәрестәре: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Үткән дәрестәргә бәйләп, уҡыусыларҙың үҙҙәренән яҡшылыҡ менән яманлыҡ тураһында һөйләтергә, тормоштан миҫалдар килтерергә, кешегә эшләнгән яҡшылыҡтың да, яманлыҡтың да үҙенә кире ҡайтырын аңлатырға кәрәк. Кешегә соҡор ҡаҙма, үҙең төшөрһөң. Һауаға ҡарап төкөрмә, үҙеңә төшөр. Бер алдар - гел алдар. Изге эштең иртәһе яҡшы. Сүлдең ҡамышы булмаҫ - ямандың намыҫы булмаҫ, тигән кеүек мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен тикшереп, уҡыусыларҙың үҙҙәренән мәҡәлдәр яҙҙырыу маҡсатҡа ярашлы булыр. Башҡорт халыҡ ижадынан ниндәй эпостарҙа һәм әкиәттәрҙә яҡшылыҡ менән яуызлыҡ көрәше сағылдырыла? Иҫкә төшөрөп, әкиәт йөкмәткеһе менән таныштырып, төп идеяһын билдәләү яҡшы булыр. Мәҡәлдәрҙең береһен исем итеп алып ҡыҫҡа инша яҙҙырығыҙ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ҠУЛДАН КИЛӘ БИТ!

# СИТТӘ ЙӘШӘП ТӘ...

## башҡортлоҡто һаҡлап була

**Һуңғы егерме йыл эсендәге үтә лә ҙур тиҙлек менән ябырылған үҙгәрештәр халҡыбыҙҙы бер аҙ албырғата биреп тә ҡуйғайны. Әммә был хәл оҙаҡҡа һуҙылманы. Бик күптәр яңы шарттарға ҡулайлашып, бирешмәй йәшәү сараһын тапты. Бынан ун биш, ун һигеҙ йылдар элек берәм-һәрәм генә булған эшҡыуарҙар хәҙер инде донъяны баҫып алды, тиһәк тә хата булмаҫ.**



Быны беҙ Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылы миҫалында ла асыҡ күрәбеҙ. Һүҙемде ауылдың иң тәүге эшҡыуарҙары Иршат Байрамғолов һәм Әкрәм Туйсиндар тураһында бәйән итеүҙән башламаҡсымын.

Ул саҡтағы ғәҙәт буйынса, улар эштәрен алыпһатарлыҡтан башлап ебәрҙе: халыҡтан ит йыялар ҙа, Магнитҡа алып барып тапшырып, аҡса алып ҡайталар. Уларҙың хеҙмәте Сыңғыҙға ғына түгел, тирә-яҡтағы башҡа ауылдар халҡына ла баһалап бөткөһөҙ табыш сығанағына әйләнде. Сөнки, беләһегеҙ, ауыл халҡы итте етештереүен етештерә, әммә уны аҡсаға әйләндерә белмәй. Ә был егеттәр ошо эште намыҫлы башҡарҙы, халыҡ мәнфәғәтен алғы планға ҡуйып, һәр саҡ ғәҙел һәм ваҡытында иҫәпләшеп торҙо.

Сыңғыҙҙарҙың бер үҙенсәлекле холҡо бар: кемдер берәү яңы эш башлаһа, ҡалғандары уны "һә" тигәнсе үк отоп ала. Ауылда тәүге техника күренә башлау менән, халыҡ дәррәү рәүештә трактор һәм йөк машиналары һатып ала башланы. Хәҙер ауылдың йөҙ илле йортон алтмышлаған техника хеҙмәтләндерә. Был бик ҙур ҡаҙаныш, минеңсә. Колхоз гөрләп сәскә атҡан саҡта ла ауылда шунсама техника юҡ ине. Шуға ла Сыңғыҙ халҡы бесәнһеҙ ҙә, утынһыҙ ҙа түгел.

Беҙҙең милләт вәкилдәренә sауҙа эше ят шөғөл, тигән ҡараш йәшәй. Минеңсә, был яңылыш фекер. Баймаҡ районы баҙарҙарында йәнең теләгәндең барыһын да һаталар: кәзә һәм бейә һөттәренән ҡымыҙ, ит, май, ҡорот, эремсек, ҡыҙыл эремсек, ҡаймаҡ, йәшелсә, емешеләк, бал һ.б. менән сауҙа итәләр. Бәшмәк һатыу ҙа табыш килтерә. Һатып алыусылар беҙҙең милләт вәкилдәре һатҡан аҙыҡ-түлектең таҙалығына ышана, шикләнмәй. Бындай ихтирамды юғалтмаҫҡа кәрәк, әлбиттә.

Ауылдарҙа шәхси магазиндар эшләп тороуы ла тормош-көнкүреште йәнле итә. Мәҫәлән, шул уҡ Сыңғыҙҙа "Нәфисә" магазинынан кеше өҙөлмәй, сөнки унда хаҡтар "күҙҙе уйып алмай", иҫерткес эсемлектәр ҙә һатылмай. Ауыл йәштәре ике ҡатлы күркәм йорттар төҙөп инә башланы.

Ауылда өс пилорама эшләй, унда Сыңғыҙ халҡына ғына түгел, тирә-яҡ ауылдарға ла кәрәкле төҙөлөш материалдары әҙерләп бирәләр. Был эшкә егелгән уңған егеттәрҙең исем-шәрифтәрен атап китеү дөрөҫ булыр: ағалы-ҡустылы Рәфҡәт һәм Нияз Уразбаевтар, Булат Рәжәп улы, Ғәлимйән Зариф улы Усмановтар. Улар күпме кешене эшле, тимәк, ашлы ла итеп торалар. Уларҙың эшенә уңыш теләп, шуны ла әйтер инем: урман менән дә, һәр ҡарағай, һәр ҡайын, һәр ҡыуаҡ менән дә аяулы мөнәсәбәттә булырға кәрәк. Ул ҡайын-ҡарағайҙар бит үҙебеҙҙеке һәм киләсәктә йәшәйәсәк балаларыбыҙҙыҡы.

Нияз Уразбаев быға тиклем ауылда булмаған шәхси ферма төҙөнө. Оҙаҡламай уның фермаһына егерме биш баш тоҡомло һыйыр малы килеп туласаҡ. Билдәле, яңы шөғөлдөң ауырлыҡтары ла булыр, әммә Нияз үҙе оптимистик ҡараштa. Ауыл халҡы ла уны хуплап, эше уң булырына ышанып, дәрт биреп тора.

"Атанан күргән уҡ юнған" тигәндәй, Туйсин Әкрәмдең улы Фәйез ең һыҙғанып фермерлыҡ эшенә тотондо. Ул ҡартатаһы мәрхүм Ғүмәр хажи Үтәбаев ҡасандыр башҡаларға өлгө күрһәтер өсөн башлап ебәргән игенселек эшен тулыһынса үҙ ҡулына алды һәм, әйтергә кәрәк, был эште уңышлы ғына дауам итә. Фәйездең был өлкәлә ҡартатаһы хыялдарын тормошҡа ашырып, эре шәхси хужалыҡтың етәксеһе булып китеренә шик юҡ: сөнки ул бик белемле, тырыш, көслө шәхес. Ғаилә ағзалары ла уның иң яҡын ярҙамсыһы, кәңәшсеһе.

Ауыл егеттәренең бер өлөшө сит яҡтарға китеп аҡса эшләүҙе хуп күрә. Күңелдә шундай борсоулы уйҙар ҙа хасил була: ситтә эшләгән егеттәр үҙҙәренең милли үҙенсәлеген, башҡортлоғон юғалтмаҫмы? Ят фиғелдәр үҙләштереп ҡайтмаҫмы? Сит милләт кешеләре менән аралашып, ғаилә ҡороп тороп ҡалмаҫмы? Минеңсә, кешенең ситтәр йоғонтоһона бирелеү-бирелмәүе уның бала саҡтан алған ата-әсә тәрбиәһенә, мәктәптә һалынған милли аңына һәм үҙ халҡына, тыуған еренә булған изге тойғоларына бәйләнгән.

Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылынан Маһира һәм Ибраһим Исмәғиловтар һигеҙ балаға ғүмер биреп, эшһөйәр, намыҫлы итеп тәрбиәләп үҫтереп, оло тормошҡа аяҡ баҫтырҙы. Был һоҡланғыс парҙың бергә йәшәүенә тиҙҙән етмеш йыл туласаҡ. Улар ошо дәүерҙең яртыһын тиерлек һигеҙ баланың бишәүһен Сургут яҡтарынан ҡаршы алыуҙар, оҙатып ҡалыуҙар шауҡымында үткәрһә лә, үҙҙәрен һәр саҡ бәхетле, тыныс тойоп йәшәне. Сөнки балалары ситтә эшләһә лә, һис тә һынатманы, сит йоғонтоға бирелмәне. Иң тәүҙә өлкән улдары Марат йәш кенә көйөнсә кәләше менән бергәләп Лянтор ҡалаһына эшкә урынлаша. Аҙаҡ улар өлгөһөндә башҡа кесерәк туғандары ла шул уҡ ҡалала эш башлай. Исмәғиловтар үҙҙәренең эшсәнлеге, тырышлығы, тәрбиәлелеге менән ҡалала абруй ҡаҙана. Улар унда хеҙмәт менән генә сикләнмәй, ә башҡа милләттәштәре менән аралашып, уларҙың да үҙҙәре кеүек милли рухлы булып йәшәүен хәстәрләй. Оҫта көрәшсе, бейеүсе, ҡурайсы булып танылған Иршат Исмәғилов был йәһәттән бигерәк тә күп көс һала: Лянторҙа ҡурай ансамбле ойоштора, бейеү ансамбле ҡалала ғына түгел, өлкәлә билдәлелек яулай. Улар ойошторған башҡорт ҡоролтайҙары, һабантуйҙар милләтебеҙҙең барлығын танытып ҡына ҡалмай, ә абруй ҡаҙандыра. Шуға ла Иршат Исмәғилов өлкә губернаторының сәнғәт, спорт буйынса ярҙамсыһына, дуҫына әйләнә. Ул үҙе генә түгел, бик күп көрәшселәрҙе майҙанға сығара. Иршат Ибраһим улы Лянтор ҡалаһының бер урамына Салауат Юлаев исемен бирҙереүгә лә өлгәшә.

**УЙЛАП ҠАРАҺАҢ...**

**Сыңғыҙ ауылында үҙ эшен башлаған егеттәрҙең, Лянторҙағы Исмәғиловтарҙың ата-әсәләре ҙур белемгә лә эйә түгел, әммә ғаилә тормошо, бала тәрбиәләүҙәге тәжрибәһе буйынса уларға әллә ниндәй ҙур ғилми дәрәжәләр бирһәң дә аҙ кеүек. Исмәғиловтар хәҙер инде үҙ илебеҙгә - Башҡортостаныбыҙға ҡайта башланы. Әлбиттә, улар яңы, бай башҡорттар, әммә береһе лә, уларҙың балалары ла милли йөҙөн юғалтмаған. Был бит үҙе батырлыҡ, юғары мәҙәнилек өлгөһө. Ә инде үҙ Башҡортостаныбыҙҙа йәшәп тә, кемдер милли йөҙөн һаҡлай алмай икән, быны инде уларҙың ата-әсәһенең аңһыҙлығы, мәктәптәрҙең милли тойғо тәрбиәләүҙәге етешһеҙлеге тип баһаларға кәрәк.**

**Рәүеф БИКТАШЕВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

*ТӘБИҒӘТ БАЛАҺЫ*

**Әҙәм балаһы элек-электән тәбиғәт менән килешеп, бер тулҡында йәшәргә тырышҡан. Тулҡындарҙы уртаҡ көйгә көйләгәндә тәбиғәттәге бер үҙгәреш тә, күренеш тә күҙ уңынан ысҡынмаған. Был күҙәтеүҙәрҙән сығып, яҡын араларға һауа торошо билдәләнгән, тәбиғәттә килеп сығасаҡ көтөлмәгән хәлдәр күҙалланған, ауыл хужалығындағы мәсьәләләр хәл ителгән. Тәбиғәт менән аралашыу дәүерендә йыйылған тәжрибә кәрәкле һығымталар яһау өсөн үтә лә мөһим булған. Үкенескә күрә, тәбиғәт менән бер бөтөн булып йәшәүҙе аңлаусылар арабыҙҙа һирәгәйгәндән-һирәгәйә бара. Бөгөнгө мәҡәләбеҙ геройы иһә тәбиғәт менән уртаҡ тел табып йәшәгән кешеләрҙең береһе, Учалы районының Ҡобағош ауылында йәшәүсе Әхмәт ағай Фазлетдинов. Оҙаҡ йылдар ауыл хужалығында эшләп, 40 йыл самаһы тәбиғәт күренештәрен даими күҙәтеп, сағыштырыуҙарын хәтерендә ҡалдырып, байтаҡ тәжрибә тупларға өлгөргән ул. Әхмәт ағайҙың фараздарын, һынауҙарын ауылдаштары ла тормошонда ышанып файҙалана. Бесәнгә төшөргә уйлаһа ла, картуф сәсеп, ҡаҙып алырға булһа ла, хатта һарыҡ йөнөн ҡырҡырға ваҡыт етһә лә иң тәүҙә, Әхмәт ағай ҡыбырлаймы, тип ҡыҙыҡһыналар. Һүҙ - Әхмәт ағайға.**

# ҺЫҠЫ ҠАР ЯУҘЫМЫ...

## тымау тейҙерә кеше



- Йоҡонан тороп тышҡа сыҡҡас та, тәү сиратта, тирә-яҡҡа күҙ һалам, төрлө ҡош тауыштарына, ҡайҙан ел иҫеүенә, күк йөҙөнә иғтибарымды йүнәлтәм, - тип һөйләп китте ағай.- Йылдар буйы бер үк нәмәне күҙәтә торғас, үҙемдең һынамыштарым, тәжрибәм барлыҡҡа килгән. Тәбиғәтте аңлай белеү бигерәк тә ауылда йәшәүселәр өсөн мөһим. Сәскән, ултыртҡаныңдан мул уңыш алам, ел-ямғырына тейҙермәй бесән эшләйем, тиһәң, бына шул күҙәтеүҙәргә таянаһың да инде.

Ҡышҡа ҡарап, йәйҙе билдәләйһең, йәйге көндәрҙән сығып ҡышты самалайһың. Иҫке стиль менән 14 декабрҙә генә ҡыш башлана. Шуға күрә декабрҙә лә ямғырҙар яуып тороуы әллә ни хәүефле түгел, сөнки көҙ барыбер ҙә үҙенекен эшләй, барыһы ла уның ҡулында. Бөтә һынамыш, ырымдар ҙа иҫке стилдән сығып фаразлана, яңыһына тура килмәй. Күҙәтеүҙәр буйынса, быйыл ҡар ваҡытында яуҙы һәм туңып өлгөрмәгән ер үҙ йылыһына иретеп, кәрәгенсә дым һеңдереп өлгөрҙө. Ҡара һыуыҡтар тормағанлыҡтан, ер декабрь башында 3-4 см ғына туңғайны, шуға күрә һуңлап яуған ямғырҙарҙың да файҙаһы ҙур булды. Яуған дым йәй буйы ҡорғаҡһып ятҡан ерҙе етерлек туйындырҙы. Был ужым өсөн дә файҙалы булды, сөнки ямғыр ҙа, ҡар ҙа ер туңмаҫ борон яуып өлгөрҙө.

Быйылғы йыл ҡоро булһа ла, көҙ яуған ямғырҙар зыянды тулыһынса ҡапланы. Ер дымға туйынды, шунлыҡтан икенсе йыл өсөн артыҡ ҡурҡыныс түгел. Декабрь башынан алып ағастарға бәҫ ятыуы ла яҡшы күренеш. Бәҫте халыҡ телендә ҡоржаҡ тип тә атайҙар. Ҡоржаҡ күп булыуы бал ҡорттары өсөн дә уңышлы, тимәк, киләһе йыл бал йыйыу өсөн үләндәрҙең һуты мул буласаҡ. Ғөмүмән, бәҫтең ауыл хужалығы өсөн файҙаһы ҙур. Ҡоржаҡ ваҡытында үлән сығыуына, емеш-еләктең уңыуына булышлыҡ итә.

Тәбиғәттең һәр күренеше үҙенсәлекле, уны аңлай, дөрөҫ һығымталар яһай белергә генә кәрәк. Ҡыш һайын яуған ғәҙәти ҡарҙарҙың да төрлөһө була: һыҡы ҡар, елбәгәй ҡар, йомшаҡ ҡар. Һыҡы ҡар атлағанда шығырламай, санаға, аяҡ кейеменә йәбешеп ята, атлағанда ҡом яуғандай ауыр. Былдай ҡар яуған ваҡыт кеше һаулығына ла насар тәьҫир итә, тымау тейҙереүселәр, һыуыҡ үткәреүселәр күбәйә. Элек һыҡы ҡар яуған ваҡытта юлға сыҡмағандар.

Иләп яуған ҡар иһә кеше һаулығы өсөн һәйбәт. Тын алыуы яҡшыра, һыуыҡ тейҙереү ҡурҡынысы ла янамай. Ямғырҙарҙың да кинәт кенә килеп сығып, иләп яуғаны иң яҡшыһы. Былдай ямғырҙы ләйсән ямғыры тип тә йөрөтәләр. Ләйсән ямғыры аҫтында яланаяҡ, яланбаш йөрөү файҙалы. Баш ауырыуы менән яфаланыусылар сиренән ҡотолор. Йәйгорлап яуған ямғырҙа иһә емеш-еләк уңа. Ә бына ел-дауыллап яуған ямғырҙың ҡурҡыныстан, зыяндан башҡа бер файҙаһы ла юҡ. Был ваҡытта емештәр ҙә һеркәләнмәй. Ел төньяҡтан иҫһә, емеш-еләк өсөн зарарлы була. Иң һәйбәте ғөлфөстрим ел, йәғни көньяҡтан иҫкән, ямғырлы ел. Был ваҡытта һауа торошо ла йомшаҡ, еләҫ була.

Күк күкрәүҙәрен дә айырып билдәләп була. Ныҡ дауыллап, шатырлағаны ла, тыныс ҡына дөбөрләгән күк күкрәүе лә яҡшы түгел. Ә бына көньяҡтан күк күкрәһә, файҙаһы күберәк. Хәҙер йылдар насарайҙы, шуға ла күк күкрәмәй, ә күбеһенсә шатырлай.

Кешенең һаҡһыҙ ҡыҫылыуы менән тәбиғәт күренештәре лә үҙгәреп бөттө. Ҡасандыр гөрләп торған ауыл хужалығының тарҡалыуы, тәбиғәт шарттарының насарайыуы һөҙөмтәһендә йыл һайын бер ваҡытта ҡайтҡан сыйырсыҡтар ҙа, ҡара ҡарғалар ҙа тыуған еренән биҙҙе. Элек яҙ етеү менән туп-туп булып килгән ҡоштарҙың ҡыуанысллы сырҡылдашыуын иҫләргә генә ҡалды, сөнки уларҙың да хәҙер бик һирәге генә тыуған төйәгенә кире әйләнеп ҡайта. Йоморҡа һалып бала сығарыу өсөн ҡоштарға үтә тыныс шарттар кәрәк. Үкенескә ҡаршы, һуңғы йылдарҙа урман ҡырҡыусыларҙың күбәйеүе сәбәпле, тәбиғәттәге тыныс мөхит боҙолдо. Үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртыусылар ҡоштарҙы ҡурҡыта, ояларын туҙҙырып, төйәгенән биҙҙерә. Ҡоштар дәррәү булып иртә ҡайтһа, йыл да һәйбәт килә.

Тәбиғәттә монар тигән күренеш тә бар, уны әлегә тиклем бер ғалим да ныҡлап өйрәнеп бөтмәгән. Ауыл хужалығы өсөн бик насар нәмә ул монар. Картуфты, игенде монар һуҡһа, уңыш булмаясаҡ. 1972 йылда бойҙай ҡотороп уңғайны, ләкин бер аҙна самаһы торған монар арҡаһында матур, тос булып ултырған башаҡтар ҡарайып, ҡатып юҡҡа сыҡты. Монар төшкән иң ҡурҡыныс айҙар - июль, август. Ул көндөң иң оҙайған мәлenә тура килә. Быйылғы монарҙың картуфҡа ҙур зыяны тейҙе. Июлдең егермеһенән августың башына тиклем күкшелләнеп торған монарҙы күптәр ҡоролоҡ тип уйлап, хаталанды. Монар ҡыраужан да ҡурҡынысыраҡ тәбиғәт күренеше, был ваҡытта һауа ла томра була, тын алыуы ауырлаша, ел дә иҫмәй. Көслөрәк ел сыҡһа, монар таралып юҡҡа сыға. Ҡышҡы монар ҙа томан төшкәндәй ғәҙәттәгесә күкшелләнеп тора, ел булмай. Ул иҫкесә ғинуар башынан башланып, февраль баштарында ғына бөтә. Ҡышҡы монарҙы ҡышҡы селлә тип тә әйтәләр. Нәҡ ошо ваҡытта һыуыҡ тейҙереп сирләүселәр күбәйә.

Кеше, тәбиғәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө тиһәләр ҙә, йыш ҡына осраҡта күптәр үҙҙәре лә һиҙмәҫтән уға ҙур зыян килтерә, уртаҡ бәйләнештәрҙе боҙа. Һәр миҙгелдең үҙенсәлегенән сығып, күҙәтеүҙәр алып барырға, тәбиғәт менән килешеп йәшәргә өйрәнергә тейешбеҙ...

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА**
**яҙып алды.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

**Себер даруғаһы олоҫтары**

**6.** Әй - Әй буйында һәм Урал аръяғында төрлө урындарҙа күлдәр буйында; Айыу тауы буйлап, тауҙар һәм ҡырҙар; Урал аръяғында - киң далалар; Өфө ягынан Уралға тиклем кәрәкле булған арба юлы бар, ә Себер яғынан Урал аръяғы буйлап юл асыҡ.

**7.** Мәкәтин - Урал аръяғы күлдәре буйында; ҙур ҡырҙар, урмандар.

**8.** Бала-Ҡатай - Уралдың ике яғы буйлап, йылғалар һәм күлдәр буйында; Уралдан Өфө яғына тауҙар, урмандар, яландар, ә Урал аръяғында ҙур дала, урман; Өфө яғынан Уралға тиклем юл бар.

**9.** Салйоғот (Челжетуцкая) - Урал аръяғында йылғалар һәм күлдәр буйында Ухтузск заводтарына яҡын, баҡыр заводы тирәһендә; ҡырҙар һәм урмандар; Өфө яғынан кәрәкле юл бар.

**10.** Бәкәтин - Урал аръяғында, күлдәр буйында.

**11.** Һеңрән - Урал аръяғында күлдәр буйлап; ҙур яландар.

**12.** Ҡыуаҡан - Әй һәм Йөрүҙән (Ерезинские) түбәләстәрендә һәм Һатҡы йылғаһы буйлап, Урал аръяғында күлдәр буйында; тауҙар, урмандар, ҡырҙар һәм ҙур тауҙар; Өфөнән тауҙар, урмандар, һаҙлыҡтар аша арба юлы юҡ.

**13.** Ҡара-Табын - Ағиҙел һәм Йайыҡ түбәләрендә, ә тап ҡайһы тирәлә икәнлеге Нуғай даруғаһының Ҡара-Табын олоҫон һүрәтләгәндә яҙылған, йорттар бер тирәлә урынлашҡан; Ағиҙел буйлап юл бар, Өфөнән был олоҫҡа тиклем арба менән барып булмай.

**14.** Боҫҡор (Бучкур)- Урал аръяғында, күлдәр буйында; ҙур дала, урман.

**15.** Табын - Ҡара-Табын олоҫо урынлашҡан ерҙәрҙә.

**16.** Уилар - Ҡариҙел һәм Байҡы йылғалары буйында; урман-ҡырҙар бар.

**17.** Һыҙғы - Урал аръяғында, Мейәс йылғаһы һәм күлдәр буйында; ҙур яландар, Ҡариҙел йылғаһы буйлап тауҙар һәм урмандар араһында пристань бар, Өфө өйәҙенең башҡа дин кешеләре һәм Көнгөр өйәҙенең обывателдәре ишкәкле һәм елкәнле ағас караптарға иген тейәп, Өфө ҡалаһына алып килгән; ҡышҡыһын Өфөгә был араны егеүле аттарҙа 5 көндә үтһәләр, йәйгеһен арба юлынан үткәндәр.

**Ҡаҙан олоҫо даруғаһы**

**1.** Һарыш-Ҡыпсаҡ - Ыҡ һәм Сөн буйында; ҙур яландар, имән урманы, ҡара урмандар аҙ.
**2.** Тамъян - Ыҡ буйында.
**3.** Иректе - Ыҡ буйында.
**4.** Түңгәүер - Ыҡ буйында.
**5.** Бөрйән - Ыҡ буйында.
**6.** Ҡыпсаҡ - Ыҡ һәм Сөн буйында.
**7.** Аская - Ыҡ буйында.
**8.** Күрпәс-Табын - Ыҡ буйында.
**9.** Һеңрән - Ыҡ буйында.
**10.** Табын - Ыҡ буйында, Ҡаҙан даруғаһының үрҙә атап үтелгән олоҫтарында төрлө даруға һәм олоҫ башҡорттары йәшәй.
**11.** Ҡаршин - Ҡармасан буйында; яландар, имән урмандары.
**12.** Дыуанай - Сәрмәсән буйында; яланҡырҙар, имән урмандары.
**13.** Шемшедин - Евбаза буйында; урман-ҡырҙар.
**14.** Эске Йылан - Ағиҙел һәм Баҙы йылғалары буйында; урман-яландар.

**(Дауамы бар).**

**Иҫке йылды оҙатып, яңыһын ҡаршылағанда беҙ йылға бағлаған өмөттәрҙең аҡланыу-аҡланмауы хаҡында ла телгә алабыҙ. Шуға күрә лә йылдың был миҙгелендә беҙ киләсәгебеҙҙе төрлөсә күҙаллауҙарҙан, юрауҙарҙан азат була алмайбыҙ. Уларҙың күрәҙәселек менән һис тә уртаҡлығы булмауын да әйтеп китеү урынлы булыр. Һеҙҙең иғтибарға тәҡдим ителгән әңгәмә лә был йокмәткенән азат түгел. "Ситтән тороп диалог" рубрикаһында был юлы Мәләүез районы һәм ҡалаһының "Көнгәк" гәзите баш мөхәррире Сәйфулла ӘМИРОВ, Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында йәшәүсе халыҡ табибы Марат ИШМӨХӘМӘТОВ менән ошо уҡ райондың Байназар ауылы мәктәбе уҡытыусыһы Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА ҡатнаша.**

# КҮРӘҘӘСЕ

## ә шулай ҙа

**▸ Күрәҙәсе булмағанда ла алда беҙҙе ниндәй тормош көткәнен күҙаллап буламы?**

**С. Әмиров:** Эйе, күҙаллап була. Бының өсөн ҙур тормош юлы үткән кешенең тәжрибәһе ярҙам итә ала. Шуға күрә йыш ҡына өлкәндәргә кәңәш һорап мөрәжәғәт итәбеҙ, уларҙың үткән юлына байҡау яһап биргән яуабы йыш ҡына киләсәктә буласаҡ хәл-ваҡиғаларға тура килә. Шуға күрә бында күрәҙәселек тураһында түгел, бәлки, тәжрибә хаҡында һүҙ алып барыу урынлыраҡ булыр ине. Юрау-һынамыштарҙы, ырым-ышаныуҙарҙы ла шулай уҡ тәжрибә һөҙөмтәһе тип әйтергә була. Әйтәйек, яҙҙың тәүге көнөндә турғай эсерлек һыу булһа, йәйҙең ҡоро килеүен әйтер өсөн ошондай бер нисә яҙ башын күҙәтеү ҙә етә һ.б. Тәжрибәнән тыш, интуиция төшөнсәһе лә бар. Интуиция тәжрибәгә ҡарағанда тәрәнерәк мәғәнәгә эйә, уны ябайлаштырып, үҙ һүҙебеҙ менән әйтһәк, интуиция - ул кешенең күп йыллыҡ тәжрибәһе һөҙөмтәһенең кеше булмышында автоматлашҡан формаһы.

**М. Ишмөхәмәтов:** Кеше аҙмы-күпмелер алдан күрә белеү һәләте, интуиция менән тыуа. Артабан ул йәшәй килә, алған белеменә, тәжрибәһенә таянып, үтә мин-минләнеп, тәкәбберләнеп китеп, был һиҙгерлеген юғалта.

Киләсәктәге тормошто күҙаллап буламы һуң? Яҡшы һорау. Әйҙәгеҙ, йәштәребеҙгә күҙ һалайыҡ. Кеменә генә ҡарама, ҡолаҡтарында - кәрәҙле телефон. Ул балалар юғары йышлыҡта эшләгән телефон энергияһы аша нурланыу ала икәнен уйлап та бирмәй. Элек медицинала был энергия менән УВЧ аппараты аша ауыраған урынды йылытырҙар ине. Әҙәмдәрҙең күбеһе хәҙер киңәйтелгән телекоммуникациялар алдында: интернет, телевизорҙарға өңшәйгән. Йәш быуынға инде хәҙер "йәшниктәр" тәрбиә бирә. Унда сағылған енәйәти тормош негатив йәш быуын аңына төрлө ситуациялар булыу мөмкинлеген һәм уларға киләсәктә әҙер булыу моделен һеңдерә. Бындай тәрбиәүи моделдең сифаты ата-әсә, уҡытыусы ролен үҙ өҫтөнә алған сайт хужаһына, телеканалдар хужаларына, психоинженерҙарға бәйле. Мода экранда барған тормошҡа, экрандан килгән тәҡдимгә ҡарап үҙгәрә, хатта йорттар, йыһаздар, машиналар шул экрандарҙа сағылған тормошҡа ҡарап үҙгәреш кисерә. Үҫә барған банктарға бурыстар экрандарҙа барған виртуаль тормош менән бәйләнде. Кешеләрҙә аҙ хәрәкәткә, шәрбәт ризыҡҡа, рухи ярлылыҡҡа бәйле ауырыуҙар күпләп күренә башланы. Тағы ла шуныһы ҡыҙғаныс: йәштәрҙең күпселеге үҙ телдәрендә һөйләшергә ояла, улар музыка киңлеген үҙҙәренсә, мәҙәниәттең яңы йүнәлеше итеп ҡора. Йәштәр концерттарға, театрҙарға аҙ йөрөй, ҡасандыр беҙҙе тәрбиәләгән классик әҫәрҙәр уҡып бармай. Хәҙер ошоларҙан сығып, киләсәгебеҙҙе күҙаллап ҡарайыҡ инде.

**К. Ҡотлобаева:** Бала сағымдан бер хәтирә уйылып ҡалған: офоҡҡа теклəп уйға сумғанмын да, һушым китеп, унан да ары ни барын күргем килә. Кеше тәбиғәте шулайҙыр инде. Яҙмышының да барлыҡ сиктәрен алдан байҡағыһы, белгеһе килә. Әммә Хоҙай кешене яралтҡанда уның ҡыҙыҡһыныу дәирәһенә сама ҡуйған. Хатта әүлиә һәм бәйғәмбәрҙәргә лә сик билдәләнгән. Күрәҙәсегә йөрөү уны Аллаһҡа тиңдәш ҡуйыу менән тиңләнеп, тыйылған ғәмәлдәрҙең береһе. Ә инде рөхсәт ителгәндәрен дә Хоҙай алдына тыҡ итеп килтереп ҡуймай. Үҙең иждиһат итергә, өйрәнергә, көс һалырға, өлгәшергә тейешһең. Бының өсөн Ул һиҙеү ағзаларын яралтҡан, интуиция тигән һиҙемләүҙе лә ҡушып ебәргән. Тәбиғәт балаһы-кеше уны биш бармағы кеүек белергә тейеш булған. Тереклек итеү, көнитмеш, эҙтабарлыҡ таһыл талап итһә, малсылыҡ менән игенселек, өҫтәп көн торошон, йыл килешен алдан фаразлай белеүҙе; күсеп йөрөүҙәр, бөтмәҫ ҡарымта, барымта йондоҙҙар буйынса юҫыҡлана белеүҙе талап иткән. Кеше яҙмышы ғына түгел, ил яҙмышы ҡыл осонда ҡалған мәлдәр әҙ булмаған. Әлмисаҡтан бөгөнгәсә үҙен, ерен һаҡлап килә алған икән башҡорт, был киләсәкте, тормошто күҙаллауҙа бай мираҫ туплай алыуынан. Беҙ генә заман ҡаҙаныштары артынан сабышта шул мираҫты түгеп, тапап, күмеп бөткәнбеҙ. Илде сит-яттарға ихтыяр иткәнебеҙ етмәгән, заман ахырын көтөп ултырабыҙ. Булыр ул, йәшәй белмәһәгеҙ, тип, Хоҙай тартып алһа. Тик әлегә ошо "күрәҙәселәрҙең" артында һуғыш көҫәүселәр тормай микән? Болғансыҡ һыуҙа байырға теләүселәр...

**▸ Кешенең яҙмышын уның йөҙөнә, ҡылыҡтарына, холҡона ҡарап күҙаллап буламы? Кеше үҙенең ҡылыҡтарын үҙгәртеп, йә ниндәйҙер яҡшы кәңәште тотоп, йә яҡшы китап уҡып, яҙмышын, тормошон үҙгәртә аламы?**

**М. Ишмөхәмәтов:** Кешенең ҡылығы, яҙмышы, эске тормошо уның йөҙөнә яҙылған. Хатта күҙҙәр ҙә кеше тураһында күп мәғлүмәт һөйләй. "Күҙҙәр улар мейе торошон сағылдыра", тигән ҡасандыр билдәле Канада офтальмологы. Кешенән килгән тауыш, еҫ, һырҙарға, хәрәкәткә ҡарап Ҡытай табиптары уның һаулығын һәм артабанғы яҙмышын билдәләй ала. Ҡул эсендәге һырҙарға һәм башҡа билдәләргә ҡарап, күп кешеләр төпкө аң кимәлендә, интуитив кимәлдә үҙҙәренә ышанысле дуҫтар, партнерҙар билдәләй. Үҙ яҙмышына, үҙ һаулығына фаталь ҡарашлы кешеләрҙе лә ҡылыҡтары, тышҡы ҡиәфәттәре үк күрһәтеп тора. Билдәле, кеше яҙмышы, кеше тормошо күп полярлы һәм контраслы. Беҙ аяныслы эскесе яҙмышына ҡарап, иҫерткес шыйыҡлыҡтарҙы эсеү кеше ғүмеренә үтә лә ҡурҡыныс икәнен билдәләйбеҙ, ауыр яҙмышлы кешеләргә ҡарап, үҙебеҙҙе аярға өйрәнәбеҙ, ауырыуҙарҙың яҙмышына ҡарап, һау булырға тырышабыҙ. Ғөмүмән, үҙ хаталарыбыҙға ғына түгел, кеше хаталарына ла ҡарап йәшәргә өйрәнәбеҙ. Аҡыл, белем эйәләренә һыйынып, иманға килтерер, тормош хәүефһеҙлеген тәьмин итерҙәй мәғлүмәт туплайбыҙ. Аристотель: "Ирекле булғың килһә, ҡануниәттең ҡоло бул", тигән. Былар барыһы артабанғы яҙмыш матрицаһы макетын төҫмөрләр өсөн кәрәк, руссалап тороп әйткәндә: "Хотя бы делать свою судьбу предсказуемой..."

**С. Әмиров:** Йөҙ менән ҡылыҡҡа ҡарап күҙаллау бәхәс тыуҙырһа ла, холҡона иғтибар итеп, был әҙәмде киләсәктә ниндәй яҙмыш көтөүен самалап әйтергә була. Мәҫәлән, ҡыҙыу кешене, һәр осраҡта тауыш күтәрергә әҙер торған бәндәне бер ваҡытта ла ихтирам итмәйәсәктәр. Кеше киләсәктә тыуыр проблемаларына үҙе сәбәпсе. Кәңәште әҙәм балаһы яҡшы яҡҡа үҙгәрһен өсөн бирәләр ҙә инде. Был хәҡиҡәт - атай-олатайҙарҙан килгән йола. Шуға күрә лә "Кәңәшле ил тарҡалмаҫ" тиҙәр. Яҡшы китап шуға ла яҡшы китап тип атала, сөнки кешеһенә ҡарап, ниндәйҙер кимәлдә уның тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртә. Китап асылы нәҡ шунан ғибәрәт тә инде.

**К. Ҡотлобаева:** Тормоштоң һынауҙар тулы боролош мәлдәре күп була. Шундай саҡтарымдың береһендә һиҙмәҫтән бөгөлөп төшкәнмен. Яурында көс еткеһеҙ йөкмө ни, урталай һығылам. Барам, барам да кәүҙәмде саҡ турайтып алам. Бәхетемә, ҡыҙым Михаил Литвактың "Как узнать и изменить свою судьбу" тигән китабын ҡулыма тотторҙо. Был китаптың күрәҙәселек менән бер генә лә уртаҡлығы юҡ. Асылы: яҙмышыңдағы аҡты ла, ҡараны ла аҡ ҡағыҙҙан үҙең яҙаһың, тиеп һәм уны яҡшы яҡҡа үҙгәртергә бер ҡасан да һуң түгеллеген төшөндөрә. Шулай итеп, ярты йыл тигәндә "аяҡҡа баҫтым", йәшәү көсөм ҡайтты. Тормошомдоң мәғәнәле биттәре асылды.

Ҡасандыр беҙ әкиәткә һанаған нәмәләр ысынбарлыҡ бит ул. Ҡайһы юл менән китергә өйрәтеүсе "әкиәт бабайы" ла осрап ҡына тора, үҙебеҙҙең генә күрмәй үтеүебеҙ бар. Хикмәтле хикәйәттәрҙә әйтелә бит, һәр кемгә Хоҙай өс бәхетле осраҡты юлға сығара, тип. Шөкөр, ундай осраҡтарын тап килтереп кенә торҙо. Мирзакәрим Норбеков, Владимир Мэгре, Майя Гогулян, Дейл Карнеги китаптары, дини календарҙар, "Киске Өфө" гәзите, "Шоңҡар" журналы, туғандарым, остаздарым, дуҫтарым, яҡындарым, хеҙмәттәштәрем, уҡытыусыларым, уҡыусыларым, етәкселәрем, таныш һәм таныш булмаған кешеләр сетерекле хәлдәрҙә йолоусы фәрештәм, ҡалҡаным, йондоҙом, айым, ҡояшым булдылар. Хәүеф-хәтәрҙән, ҡыя аҙымдан, яҙа ҡылыҡ-фиғелдән, хаталы ғәмәлдәрҙән арынырға, яҡшыны алға ҡуйырға, күңел торошон ыңғайға көйләргә, йәшәргә өйрәттеләр һәм өйрәтәләр. Өр-яңынан тыуыуға бәрәбәр аҡыл алдым. Алған һабаҡтарымда кешелек белмәгән бер яңылыҡ та юҡ: бары үҙең өсөн яуаплылыҡ. Ҡоштар ҙа бит бар көсөн һалып бала сығара, ҡурсалай, үҫтерә, мәле еткәс, осорға, үҙаллы йәшәргә өйрәтә. Йылы ояны, әҙерҙе тәм итеп ҡарышҡандарын тибеп төшөрә. Шул ябай ғына хәҡиҡәтте ниңә һуң онотттоҡ?

Оләсәйҙәр мәктәбе теләк, алғыш, һынамыш, иҫкәрмәләргә бай ине, зиһенлегә, сәңгелдәктән ләхеткәсә етерлек ине. Иҫкә төшөрәйек:

- ҡайҙа барһаң да ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмаҫ;
- оло әйткәнен тыңламаған - оролған да бәрелгән;
- ҡыҙыл тел әйткән һайын әйт тә әйт, тир;
- асыр ишегенде ныҡ япма;
- ҡасып китһәң дә сәсеп кит;
- кәкерене ҡәбер төҙәтә;
- тураһын әйткән туғанына ярамаған;
- дуҫың илатып белдерер, дошманың көлдөрөп бөлдөрер;
- итен күр ҙә һурпаһынан төңөл;
- булыр бала бишектән;
- ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр;
- алтылағы алтмышта;
- ат аҙғыны тайға эйәрер;
- ҡартайған көнөмдә тәүфиҡтан айырма;
- яҡшынан яман тыуһа - йүне булмаҫ, ямандан яҡшы тыуһа - тиңе булмаҫ һ.б.

**▸ Үҙ бәхетенә ҡарышҡан кешенең ҡылығын нисек аңларға була? Кеше хаҡы төштөмө, әллә бәхет хаҡы ҡиммәтләндеме?**

**М. Ишмөхәмәтов:** Үҙ бәхетенә ҡарышҡандар тураһында

*Йөҙ менән ҡылыҡҡа ҡарап күҙаллау бәхәс тыуҙырһа ла, холҡона иғтибар итеп, был әҙәмде киләсәктә ниндәй яҙмыш көтөүен самалап әйтергә була. Мәҫәлән, ҡыҙыу кешене, һәр осраҡта тауыш күтәрергә әҙер торған бәндәне бер ваҡытта ла ихтирам итмәйәсәктәр. Кеше киләсәктә тыуыр проблемаларына үҙе сәбәпсе. Кәңәште әҙәм балаһы яҡшы яҡҡа үҙгәрһен өсөн бирәләр ҙә инде. Был хәҡиҡәт - атай-олатайҙарҙан килгән йола. Шуға күрә лә "Кәңәшле ил тарҡалмаҫ" тиҙәр. Яҡшы китап шуға ла яҡшы китап тип атала, сөнки кешеһенә ҡарап, ниндәйҙер кимәлдә уның тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртә. Китап асылы нәҡ шунан ғибәрәт тә инде.*

***✓ Милли юлбашсыбыҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең эшмәкәрлегенә хайран ҡалырлыҡ - ул батша самодержавиеһынан ҡотолған Рәсәй халҡының киләсәктә үҫеш моделенең берҙән-бер һәм дөрөҫ юлын тәҡдим итә.***

шундай шиғыр юлдары менән әйтергә булалыр:

*Уларҙың гендары шулай,*
*Йондоҙнамәләре - ҡулай,*
*Ел-ямғыр теймәйҙер буғай,*
*Мин-минлек көслө былай -*
*Ҡалһын инде шулай ярай.*

Кеше ғүмере хаҡын кеше тәүҙә үҙе, унан ҡануниәт һәм йәмғиәт билдәләй. Һәр кем үҙ бәхетен, үҙ баһаһын үҙе сүкей, үҙ бәхетһеҙлегендә тик үҙе генә ғәйепле. Бәхеткә килгәндә, ул шартлы нәмә. Минең "Нимә ул бәхет?" тигән һорауыма йөҙ кеше йөҙ төрлө яуап ҡайтарҙы. Бер танышым бар, ул 15 миллионға ҙур коттедж төҙөттө, ике юғары белеме бар, 75 мең һум хеҙмәт хаҡы ала, ҙур ғына хужалыҡты етәкләй, буғай, һылыу ҡатыны, ике балаһы бар. Әммә ул үҙен бәхетле һанамай икән. Мин унан: "Һин инде бәхетлеме хәҙер?" - тигәс, ул миңә: "Бер бик шәп, ышаныслы, телен тыя белгән һылыу, амбицияһыҙ ғына һөйәркә табырға ине",- тине. Уның өсөн бәхет төшөнсәһе һөйәркәгә килеп терәлгән булып сыҡты. Әгәр ҙә шундай һөйәркә таба алмаһа, һалпы яҡҡа һаламы "йүнәтеп" ебәрә ине. Үсегеп тә булмай, хаталанғанынды таныу була. Икенсе яҡтан, күңелдә өмөт ҡала, был минең турала түгелдер ул, тигән. Әммә эсеңдә нимәләр ҡайнай, үҙтәрбиә бара, холоҡ-ҡылыҡ көйләү һабағын үҙләштерәһең. Күңелдә фәһемле төйнәк йомғаҡлана.

Үҙеңә теләмәгәнде кешегә ҡылма, тигән хәҙис бар. Зыян ҡылыу, кеше хаҡына инеү (бигерәк тә етем хаҡы, бала хаҡы) оло гонаһтарҙан һанала.

ың хеҙмәт икәнлеген белмәгән балаларҙы үҙебеҙ үҫтерәбеҙ! Бәхет өсөн генә тыуғанбыҙ, тигән хис менән, әҙергә бәҙер итеп.

**▶ Хәҙерге ваҡытта сәйәси тормош ҡатмарлана бара, бар донъя ниндәйҙер ҙур глобаль үҙгәреш алдында торған кеүек. Һеҙ ул үҙгәрештәрҙе беҙҙең республика, беҙҙең милләт нисек үтә алыр, тип ышанаһағыҙ?**

Һис кисектергеһеҙ һәм тиҙ аңлап бөткөһөҙ ҙур үҙгәрештәр көтә беҙҙе. Беҙҙе баҫып алырға түгел, беҙ баҫып алынғанбыҙ инде. Әммә милләтебеҙҙе, үҙ телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, үҙенсәлегебеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу был осорҙа еңелдән булмаясаҡ. Беҙҙең быуын илен дә, телен дә юғалтмаҫ ул, әммә ассимиляция һәм мультикультурализм дауылында тыуған киләсәк быуында барыһы өҙөлөп ҡалыр, тип хафаланам.



та башланы. Республикабыҙ халҡының, милләттәштәребеҙҙең күпселегеге быны аңлай, ошо хаҡта йәштәрҙең тарихыбыҙ, атай-олатайҙарыбыҙҙың үткәне менән ҡыҙыҡһыныуы, дингә ҡайтыуы асыҡ һөйләй.

**▶ Бер кеше милләтенең, дәүләтенең, иленең яҙмышын ыңғай яҡҡа үҙгәртә аламы?**

**М. Ишмөхәмәтов:** Үҙ милләтенең, иленең яҙмышын тик даһи ғына ыңғай яҡҡа үҙгәртер ине, тик ҡайҙа ул? Даһи етәксе янында даһи ярҙамсылар ғына булырға тейеш. Йыйын бур, йыйын ярамһаҡланыусы кәңәшселәр даһиҙы үҙҙәре яғына барыбер ауҙарасаҡ, был - аксиома. Тик күп осраҡта илдәр менән даһиҙар түгел, ә байлыҡ ятраҡан, аҡсаға мөкиббән киткән ваҡ әҙәмдәр генә идара итә шул.

**К. Ҡотлобаева**: Әлбиттә. Тарих төпкөлөнөң ҡайһы ерен байҡаһаҡ та, миҫалдар бихисап: ыңғайға үҙгәртеүселәре лә, емереүселәре лә бар. Ҡитғалар буйлап ҡан ҡойошҡан Искәндәр Зөлҡәрнәй, Сыңғыҙ хан, Наполеон, Гитлер, Сталин; ҡаты ҡулы менән Европаға "тәҙрә" уйған, Рәсәйҙе империя юлына сығарған Петр; бер ҡулы менән ауылды крепостной ҡоллоҡтан сығарып, икенсеһе менән муйынын борған Хрущев; бар донъяға тәҙрә асып, үҙгәртеп ҡороу шаңдағынан картала шах менән мат фигураларын зыр әйләндерткән Горбачев; бары 23 йылда ғәрәптәрҙән тыш күпме аҙғынлыҡҡа төшкән халыҡты рух бейеклегенә күтәрә алған Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ. Башҡортом тарихында ла бар ундай даһи юлбашсылар: Салауат Юлаев, Зәйнулла Рәсүлев, Әхмәтзәки Вәлиди, Мортаза Рахимов һәм башҡа бик күптәр.

**С. Әмиров:** Ысынлап та, бынан бер быуатҡа яҡын ваҡытта йәшәгән милли юлбашсыбыҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең эшмәкәрлегенә хайран ҡалырлыҡ - ул батша самодержавиеһынан ҡотолған Рәсәй халҡының киләсәктә үҫеш моделенең берҙән-бер һәм дөрөҫ юлын тәҡдим итә. Был бөгөн дә ҡайһы бер даирәләргә тыныс йәшәргә ирек бирмәй. Вәлиди - ысын шәхес, шуға күрә уның тормош юлында ла, эшмәкәрлегендә лә бәйләнерлек бер сәбәп тә юҡ. Бына шундай шәхестәр республика, ил, кешелек үҫешен ҡырҡа үҙгәртә ала ла инде...

# ТҮГЕЛБЕҘ...

## белəбеҙ

ғүмере бәхетһеҙ үтә инде уның.

Өфөлә бер ғаиләлә әбей ҙә бабай: "Бәхетлебеҙ, Аллаға шөкөр, хөкүмәт пенсияһын өйгә килтереп тора, ашарға, йоҡлап йөрөргә урын бар, балалар үҙаллы йәшәй, беҙгә башҡа ни кәрәк тағы?.." тинеләр. Улар, ысынлап та, бәхетле, сөнки уларҙың самаһы бар, бәхетһеҙ итә торған нәфсене йыраҡта ҡалдырғандар.

**К. Ҡотлобаева:** Мейенең берәмек күләмгә тура килгән миҡдары, мейе ҡабығы майҙаны буйынса ни хәтле өҫтөнлөктәребеҙ булһа ла, биологик программабыҙ хайуандарҙан өҫтөнлөк бирә алмай. Быға урмандамы, кеше йәмғиәтендә булһынмы, "Маугли" хәлендә ҡалған балаларҙың яҙмышы дәлил. Ата-әсәһе эткә тәрбиәләргә биреп ҡуйған, балалар йортонда ҡараңғы ситлеккә бикләп ҡуйылған балалар хаҡында ла йөрәк өшөткөс хәлдәр ишетелеп тора. Беҙҙең тәбиғәткә хайуани сифаттар һис тә ят түгел. Ҡайҙалыр китеп барыуың да алға барыуҙы аңлатмай әле, бәлки, нәк 180 градусҡа кирегә йүнәлгәнһеңдер. Һәр үҫештең дә ыңғайға булмауы бар, бәлки, тыйылған ғәмәлдә оҫтараһың, маһирлашаһыңдыр. Әммә урынлы, хаҡлы икәнен белеп тә, кеше кәңәшенең нәк киреһен эшләге килә. Алға һөйрәһәләр ҙә мал кеүек ҡарышаһың. Шундай мәлдәрҙә, әсәйемдең тәнҡит тәрбиәһе беҙҙе ыҡҡа килтерә алмаһа, оләсәйемдең кинәйәле һүҙе, мәҡәле, әйтеме, Ҡоһоро бер төшмәһә, бер төшөрөн, әллә нисә быуынына етеүе мөмкин икәнлеген дәлилләгән миҫалдар тормошта булып ҡына тора. Бала ғына инем. Оләсәйем өҫтәлгә баҫтырҙы ла, тәҙрә аша кәкерәйеп кенә китеп барған бер әбейҙе күрһәтте."Үҙ әсәһен балаларынан рәнйеттереп, урамда һорандырып йәшәткәйне. Хәҙер үҙе шул көндә", тине.

Ә бәхет хаҡы бер ҡасан да арзан булмағандыр ул. Бер нәмә лә буштан бирелмәй. Бала саҡтың тағы бер хәтирәһе: атайым, ағайым, апайымдар мәктәпкә китеп күп тә үтмәй, әсәйемдең әхирәте килә. Хәбәрен ҡоя-ҡоя ла, һүҙ араһында, һин, ирең булғас, бәхетлеһең шул, тип ҡыҫтыра. Ул киткәндең береһендә әсәйемдең үҙ алдына: "Ир менән йәшәргә лә елкә кәрәк шул",- тигәне күңелемә уйылды ла ҡалды. Ғаилә, бәхет ҡороуҙың, уны ҡоршап-нығытып тороуҙарҙарҙе яндырҙыҡ. Был шулай кәрәктер ҙә, бәлки, әммә ләкин глобалләшеү беҙҙең халыҡтар өсөн ҡапҡан ғына, ә беҙҙең етештереүселәрҙең юғары сифатлы, донъя стандарттарына яуап бирерҙәй сәнәғәт һәм фән потенциалы күпкә артта. Ләкин беҙ көслө асыштар алдында торабыҙ, технологиялар нык үҫешәсәк, тиҙҙән кешеләрҙе күп эштәрҙә машиналар, роботтар алмаштырасаҡ. Кешеләргә электрон чип-паспорт индерәсәктәр, ундағы мәғлүмәткә ҡарап, терминалдар кешене күҙәтеп, һәр аҙымын, ҡылығын яҙып торасаҡ. Яҡшығамы был, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ.

**М. Ишмөхәмәтов:** Беҙ кисектереп булмаҫлыҡ үҙгәрештәр алдында торабыҙ. Быны беҙ етәкселәребеҙҙең илебеҙҙе, ер һәм ил байлыҡтарын глобаль ҡаҙанға төшөрөргә ынтылыуынан күрәбеҙ. Был процесты бер нисек тә туҡтатып булмаясаҡ. Беҙ референдум үткәреп, барыбыҙ ҙа яңы тормош, яңы ҡоролош өсөн тауыш бирҙек, иҫкеһен хурлаunion, тапаныҡ, арттағы күпе

**К. Ҡотлобаева:** Илдең тәне лә, йәне лә сырхау. Күмәртәләп сыҡҡан закондар ҙа тотош илдә киткән метастазаға кәртә була алмай. Бер ил эсендә йәшәп, уртаҡ ҡаҙанда ҡайнап, үҙгәрештәрҙе айырым ғына үтеп булмаҫтыр инде. Шулай ҙа һәр милләттең һәр кешеһенән тора киләсәк. Башҡорт тәбиғәт балаһы булған. Шуға ла заманында ислам динен һайлаған, уны бер икеләнеүһеҙ ҡабул иткән. Хәҙер ҙә тик ислам ғына тәбиғилекте тергеҙер, шул асылыбыҙға ҡайтарыр.

**С. Әмиров:** Төрлө сәйәси ҡоролоштар - феодализм, капитализм, социализм, коммунизм кеүек яһалма күренештәрҙең аҙағы бер: күңел бушлығы тороп ҡала. Кеше был донъяға йәшәргә, рухи байлығын тулыландырырға тип килә, ә уны бында алдап-йолдап матди байлыҡ өсөн көрәшергә өндәйҙәр, ҡоторталар. Бөгөн ошо үрҙә һанап үтелгән "изм"дарҙың бөтәһе лә ялған икәнлеген аңлағас, әҙәм балаһы яйлап үҙ асылына ҡай-

***Глобалләшеү беҙҙең халыҡтар өсөн ҡапҡан ғына, ә беҙҙең етештереүселәрҙең юғары сифатлы, донъя стандарттарына яуап бирерҙәй сәнәғәт һәм фән потенциалы күпкә артта. Ләкин беҙ көслө асыштар алдында торабыҙ, технологиялар нык үҫешәсәк, тиҙҙән кешеләрҙе күп эштәрҙә машиналар, роботтар алмаштырасаҡ. Кешеләргә электрон чип-паспорт индерәсәктәр, ундағы мәғлүмәткә ҡарап, терминалдар кешене күҙәтеп, һәр аҙымын, ҡылығын яҙып торасаҡ. Яҡшығамы был, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ. Һис кисектергеһеҙ һәм тиҙ аңлап бөткөһөҙ ҙур үҙгәрештәр көтә беҙҙе. Беҙҙе баҫып алырға түгел, беҙ баҫып алынғанбыҙ инде. Әммә милләтебеҙҙе, үҙ телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, үҙенсәлегебеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу был осорҙа еңелдән булмаясаҡ.***

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Күрәҙәсегә барма, башыңа бәлә алма" тигән әйтемдең төрлө кешеләр тарафынан бирелгән аңлатмаларында тик яҡшыға, тик яҡтыға киләсәгеңде юрауҙың шулай уҡ гонаһлы булыуы хаҡында бер һүҙ ҙә әйтелмәй. Ошо ерҙә урынлы һорау тыуа: яҡшыға, яҡтыға юралған күрәҙәлек тә дин тарафынан тыйыламы икән? Был һорауға яуапты гәзитебеҙҙең алдағы йылдағы һандарында дин белгестәренән ишетербеҙ, Алла бойорһа.**

✓ ***Байлыҡ бары тик аҡсаға ғына ҡайтып ҡалмай. Ғөмүмән, байлыҡ баҫҡысында аҡса бишенсе урында ғына тора. Тәүге баҫҡысты һаулыҡ, сәләмәтлек биләй. Унан һуң ғаилә, туғандар һәм дуҫтар килә.***

*СОЛТАНГӘРӘЙСӘ*

## РОМАН ЯҘЫР ӨСӨН...

Был мәҙәк хәл тураһында миңә яҙыусы Раил Байбулатов һөйләгәйне. Икеһенең дә ауыр тупраҡтары еңел булһын, улар - шағир һәм ғалим Ғилемдар Рамазанов менән Мәскәү янындағы Переделкино ижад йортонда бергәләп ижад итергә барғандар. Раил ағай был саҡта үҙенең "Дала таңдары" романын, Ғилемдар ағай шиғырҙар яҙған.

Ижад йортоноң изге йолаһы буйынса улар ашханаға ла бергәләп йөрөгән. Ашарға ултырған һайын Ғилемдар ағай тәрилкәһендәге итен Раил ағайҙыҡына һала икән. Байбулатов был хәлгә уңайһыҙланыуын белдергәс, Рамазанов:

-Мин бит шиғыр яҙам, Раил туғаным, һин оло әҫәр - роман яҙаһың. Роман көс талап итә бит, - тигән аңлатма биргән.

## "ҺӘМ БАШҠАЛАР" АРАҺЫНДА

Яҙыусылар союзында эшләгән саҡ. Йәйҙең оҙон көнөндә бүлмәмә Мостай Кәрим килеп инде. Һаулыҡ һорашты ла:

- Мин һиңә, Әхмәр, бер генә һүҙ әйтергә килдем. Мин һаман да классиктар араһында йөрөйөм ул, - тине.

Башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәне ул, хушлашты ла, сығып китте. Оҙаҡ ваҡыт уйланып йөрөнөм: ысынлап та, был һүҙҙәре менән ул миңә нимә әйтергә теләне икән? Һуңынан ғына иҫемә төштө. Ошо хәлдән бер нисә көн алда мин радиоға интервью биргәйнем, шунда барлыҡ күренеклеләр рәтендә ағайҙың исемен әйтергә онотҡанмын икән дә.

Ошоға оҡшаш бер хәл яҙыусыларҙың сираттағы бер съезында булды. Бер яҙыусы докладсының сығышында ниндәй фамилияларҙың нисә тапҡыр телгә алыныуын һанап ултырған. Тик, үкенескә күрә, докладсы уның фамилияһын бер тапҡыр ҙа телгә алмаған. Съезд үткәс, ул докладсыға үҙенең дәғүәһен:

- Минең ике съезд араһында шунсама китабым сыҡты, ике тапҡыр журналдың лауреаты булдым, бер китабым уҡыусылар тарафынан "Йыл китабы" тип баһаланды. Һеҙ үҙ сығышығыҙҙа фәләндең фамилияһын 20, фәләндекен - 15, төгәндекен 10 тапҡыр телгә алдығыҙ, ә мине, исмаһам, исем өсөн булһа ла бер тапҡыр ҙа әйтмәнегеҙ, - тип белдергән.

- Һеҙ минең докладты бик иғтибарһыҙ тыңлағанһығыҙ, иптәш, - тип уға яуап биргән докладсы, яҙыусының үҙенә контрһөжүмгә күсеп, - мин һеҙҙең фамилияны барлығы 25 тапҡыр телгә алдым.

- Алдашмағыҙ, миңә ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ яҙған докладҡа тағы бер тапҡыр күҙ йүгертеп сығығыҙ. Мин был мәсьәләне был көйө ҡалдырмайым, кәрәкле урынға ялыу яҙам, - тип оторо ярһыған яҙыусы.

- Ышанмаһағыҙ, бына ҡарағыҙ, - тип докладсы телмәре яҙылған ҡағыҙҙы күрһәтергә тотонған, - минең докладта барлығы 25 тапҡыр "һәм башҡалар" тип әйтелә. Ана шул "һәм башҡалар" араһындағылар исемлегендә һеҙ беренсе урында тораһығыҙ...

Был мәсьәләнең аҙағы нисек бөткәндер, әммә "һин һәм башҡалар араһында" тигән лаҡабы тороп ҡалды.

## ШАҒИР ҠАТЫНЫ БУЛЫУ...

Бер саҡ шағирҙарҙың ҡатындары йыйылышып, бер-береһенә үҙҙәренең аһ-зарын еткереп ултырған икән. Был йәшерен йыйылышта шағирҙарға ҡатындары тарафынан шундайыраҡ дәғүәләр ҡуйылған:

- Беҙгә шағир ҡатыны булған өсөн "за вредность" түләүҙе юлларға кәрәк, әхирәткәйҙәрем, мәсьәләне Дәүләт Думаһына сығарырға кәрәк, - тигән бер өлкән шағир бисәһе;

- Уларҙан беҙҙең күргәнде дошманыбыҙға күрергә яҙмаһын. "Ите - һиңә, һөйәге - миңә" тигән һымаҡ, беҙ бит уларҙың халыҡ күрмәгән насар яҡтарын ғына күрәбеҙ. Ана, минеке, яңы шиғыр яҙһа, һиңә, тип алдаша, ә үҙенең итенә һөйәркәләре, шиғриәтен яратыусылары хужа. Миңә ҡаҡ һөйәккә ҡалғас ҡына ҡайтып йығыла, - тигән урта йәштәрҙәге шағир бисәһе.

- Минеке лә, ана, "халҡым ҡосағында йәшәйем", тип алдашып яҙа. Кем ҡосағында йәшәгәнен бик яҡшы беләм. Төнәгөн иртәнсәк кенә ҡайтып инде лә, үҙенең төндә йоҡларға ҡайтмағанын нисек аңлата, байғош: "Һуңғы ваҡыт ижад итергә илһам килмәй башланы, шуға күрә һине һағынып өсөн ҡайтманым", - ти. Үҙен әрләргә иткәйнем, бер һүҙ ҙә әйттермәй үбергә тотонмаһынмы, - тип уларға ҡушылған йәш шағир бисәһе.

- Эй, әхирәткәйҙәрем, нисек кенә булһа ла, түҙәбеҙ инде, яҙмышыбыҙ шулай булғас, ҡайҙа барабыҙ. Әммә шуны ла онотмайыҡ: бар ҡатындар ҙа шағир ҡатыны була алмай, шағир ҡатыны булыу - ул профессия, - тип әхирәттәренең ауыҙын шапылдатып япҡан шағир Рәмил Йәнбәктең һөйөклө ҡатыны Зилә ханым...

## ҺӨЙЛӘШЕП ТУЙМАҒАНДАР

"Ағиҙел" журналының баш мөхәррир урынбаҫары Рәмил Йәнбәк менән яуаплы сәркәтип Гөлназ Ҡотоева редакцияла икеһе бер бүлмәлә ултыра. Бер мәл бухгалтерия ҡыҙҙары уларҙы эҙләп таба алмаған. Баҡтиһәң, "Ашҡаҙар" радиоһында тура эфирҙа үҙенең программаһын алып барыусы Гөлназ бүлмәләш коллегаһын тапшырыуға ҡунаҡҡа саҡырған икән. Радионы асып ебәрһәләр, улар тура эфирҙа әҙәбиәт һәм журнал хаҡында әңгәмәләшеп ултыра, имеш. Ошо саҡ журналдың баш мөхәррире Әмир Әминев тарихҡа инеп ҡалырлыҡ һүҙ әйткән:

- Һуң, уларҙың бер бүлмәлә йылдар буйы ултырып та һөйләшер һүҙҙәре бөтмәнеме икән ни?

## ИҒЛАН

Башҡорт әҙәбиәтендәге иң ҡыҫҡа "Башкирский девственник" романы авторы Айҙар Хөсәйенов ошо әҫәрен башҡортсаға ауҙарыр өсөн махсус тәржемәсе эҙләй. Тағы ла шуныһы: тәржемәсенең нескә заттан кейәүҙә булмағаны мотлаҡ шарт. Ә ни өсөн романының шулай ҡыҫҡа икәнен Айҙар шулай аңлатыр, моғайын: "Хәҙер тиҙлек, мәғлүмәт заманы, дуҫтар. Кешенең хәҙер оҙон роман уҡып ултырырға ваҡыты юҡ. Икенсенән, ул ҡыҙҙың ҡасан оҙон романымды тәржемә итеп бөткәнен көтөп ултырырға минең дә ваҡытым юҡ. Ҡартайып барыла..."

Тик был иғланды уҡыусылар бер нәмәне генә аңлай алманы: Айҙарға тәржемәсе кәрәкме, әллә кәләшме?

*ӘЙҘӘГЕҘ...*



## БАЙ БУЛАЙЫҠ!

**Аҡса - аҡҡан һыу кеүек һәм ҡулда ниндәй сумма булыуына ҡарамаҫтан, күҙ асып йомғансы бармаҡ араһынан ағып бөтә. Аҡсаға эйә булыу кешенең эштә, ғөмүмән, тормошта түккән энергияһына һәм уны табыу, булдырыу һәләтенә, шулай уҡ уны тотона белеү оҫталығына ла бәйле.**

Күптәр аҡса менән мөғәмәлә итә белмәй, сөнки быға мәктәптә лә, башҡа уҡыу йорттарында ла өйрәтмәйҙәр, ә өйрәтергә кәрәк ине. Был йәһәттән ғаиләнең әһәмиәте бик ҙур. Әгәр ҙә атаәсә аҡса табыу һәм, иң мөһиме, уны яйлы тотона белеү серен белһә һәм балаларына өйрәтһә, улар киләсәктә аҡса менән эш итеүҙең юлын яҡшы аңлаясаҡ.

Мин үҙем аҡсаны дөрөҫ тотона белеү серҙәренә селтәрле бизнесҡа килгәс кенә төшөндөм. Тәүге тапҡыр билдәле иҡтисад консультанты, бизнесмен, күп китаптар авторы, төрлө семинар-тренингтар ойоштороусы Бодо Шеферҙың сығышын тыңлағанда үҙемдең ни тиклем дә аҡса тотона белмәүемде аңлап, илағаным иҫтә. Мин генә түгел, ҙур залға йыйылғандарҙың күбеһе ошо хәлде кисерә ине. Был осрашыуҙан һуң мин аҡсаға булған ҡарашымды ҡырҡа үҙгәрттем. Хәҙер мин килемемдең 10 процентын мохтаждарға ярҙам итеүгә йүнәлтәм, 50 процентын һаҡлауға һәм арттырыуға һалам, ә ҡалған 40 процентына йәшәйем. Нәҡ ошо 40 процент эсенә ашау-эсеү, кейенеү, ял итеү сығымдары инә. Өс улымды ла шулай өйрәтәм. Өлкән улым аҡсаны дөрөҫ тотоноу серҙәренә төшөндө һәм әлеге ваҡытта финанс яҡтан аяғында ныҡлы баҫып тора. Ә Мәскәүҙә йәшәүсе улдарым әлегә был хәҡиҡәтте аңлап етмәй һәм аҡсаларының күп өлөшөн көндәлек ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтә. Ләкин минең, ағаларының өлгөһөндә улар ҙа аҡса тотоноу оҫталығына өлгәшер, тип ышанам.

Шулай ҙа, күптәр уйлағанса, байлыҡ бары тик аҡсаға ғына ҡайтып ҡалмай. Ғөмүмән, байлыҡ баҫҡысында аҡса бишенсе урында ғына тора. Тәүге баҫҡысты һаулыҡ, сәләмәтлек биләй. Унан һуң ғаилә, туғандар һәм дуҫтар килә. Өсөнсө урынды тирә-яҡтағылар менән һәйбәт мөғәмәләлә була белеү, аралашыу оҫталығы биләй. Дүртенселә - кешенең үҙ-үҙе менән ҡәнәғәт булып йәшәүе һәм бары тик бишенсе урында ғына аҡса килә. Әгәр ҙә тормошта тәүге дүрт ҡиммәттәр булмаһа, аҡсаның бер файҙаһы ла юҡ. Аҡса - ике яҡлы. Уны керәндил миҫалында ҡарарға була. Керәндилдең беҙгә күренгән тышҡы яғы һәм күренмәгән эске яғы бар. Бына шул тышҡы яғы матди байлыҡ, аҡса, ә эске яғында рухи ҡиммәттәр "йәшеренгән". Күптәр керәндилдең тышҡы яғын ғына күрә һәм төп байлыҡ аҡса, тип уйлай, ә ысын байлыҡты, йәғни керәндилдең эсен күрмәй. Мин үҙем аҡсаның ҡәҙерен белһәм дә, һанлаһам да, керәндил эсендәге байлыҡты юғарыраҡ ҡуям һәм тормошомдо улар нигеҙендә ҡорам.

**Фирҙәүес ӘЙҮПОВА,**
**селтәрле бизнес менән шөғөлләнеүсе.**



## БӘХЕТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Был тормошта күп нәмә үҙеңдән, ныҡышмалылығыңдан тора. Аллаһы Тәғәлә кешегә минут һайын шундай мөмкинлектәр бирә, ә беҙ уларҙы йә йоҡлап, йә битараф булып, йә ниндәйҙер ҡәҙимге донъяуи мәшәҡәттәргә күмелеп, йә бар нәмәгә зарланып, күрмәй ҡалабыҙ. Иртәгә, фатир алғас, балалар үҫкәс, бәхетле буласаҡмын, тип яңылышабыҙ, ә бөгөн бәхетле булыуыбыҙҙы күрмәйбеҙ ҙә.**

Минеңсә, бәхет ул төрлө мәлдәрҙән тора. Мин бәләкәй саҡта алты йәшемә тиклем һуҡыр булдым. Ул саҡта ла үҙемде бәхетһеҙ тоймай инем, малайҙар менән ҡыуышып, йүгереп йөрөр инем. Ә күҙем асылып, төҫтәрҙе күрә башлағас, бәхетемдән күккә ашҡандай булдым. Уҡырға ингәс, театрҙа эшләй башлағас, ғаилә ҡорғас, балалар тыуғас - тормоштоң һәр этабында бәхетте үҙенсә тойғанмын. Бөгөн балаларымдың мине аңлауы, ҡәҙер итеүе, ейәндәр һөйә алыуым, тамашасымдың иғтибары менән бәхетлемен. Үҙемде Аллаһы Тәғәләнең яратҡан балаһы итеп тоям.

Ә бит минең дә тормошомда иҫ киткес ауыр мәлдәр булды. Сибайҙан Өфөгә күсеп килгәс, бер тапҡыр шулай геүләп илап ҡайттым. Эшләгән коллективым, донъям тороп ҡалды, бында эшем бармай, яратмайҙар кеүек, театрҙа ремонт эштәре барыу сәбәпле, эшебеҙ тотҡарланып тора, йәшәгән ятағыбыҙҙа хатта энәбеҙ ҙә юҡ. Ҡыҙым бәләкәй ине әле, уға скрипкала уйнарға ҡуштым да, ике сәғәт буйы иланым. Шунда балам миңә: "Әсәкәү, сабыр булайыҡ, тағы насарыраҡ булыуы ихтимал ине бит", - тине. Ошонан һуң мин яңырыу кисерҙем. Әҙәмдең ғүмерендә гел генә ҡара булып тормай, тәбиғәттә лә бит ҡара төн артынан яҡты көн, сәңгел һыуыҡлы ҡыш артынан сыуаҡ яҙ килә. Аҡ эргәһендә ҡара булмаһа, беҙ аҡтың матурлығын да тоймаҫ инек түгелме һуң? Матур, бәхетле мәлдәрҙе күңелгә тултыра белергә лә кәрәк. Бер ваҡытта ла ҡош һайрауын да, әйтелгән яҡшы һүҙҙе лә бушҡа ғына ебәрергә ярамай.

Аҡланда сәскәләр төрлө булған кеүек, әҙәмдәр ҙә төрлө була, кемдеңдер һиңә оҡшамаған ҡылыҡ ҡылыуы, һүҙ әйтеүен дә лайыҡлы күтәрә белергә кәрәк.

Ҡатын-ҡыҙҙар, үҙебеҙҙе яратып бармайбыҙ, үҙ-үҙебеҙҙе әрләйбеҙ, бығаярты энергиябыҙ, ярты ижади көсөбөҙ, ярты һаулығыбыҙ китә. Мең ҡабат хата ҡылһаң да, үкенеүҙән файҙа юҡ, алға ҡарап йәшәргә кәрәк. Ҡулыбыҙҙан килгәнсә яҡшылыҡ ҡылайыҡ, бәхетле булыуыбыҙҙың ҡәҙерен беләйек, сөнки тормош шул тиклем матур!

**Рәмилә СӘЛИМГӘРӘЕВА,**
**Башҡортостандың халыҡ артисы.**



# ҠУПШЫ БУЛАЙЫҠ!

**Матур, ҡупшы булырға ынтылыу - һәр гүзәл заттың тәбиғәтенә һалынған. Үкенескә күрә, һуңғы йылдарҙа төрлө ҡитғаларҙан килгән модаға эйәргән булып, зауыҡ тураһында онотоп киттек шикелле. Етмәһә, ул "мода"ны ла йышыраҡ баҙар һатыусылары билдәләй. Шуға ла, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең әсәйөләсәйҙәребеҙҙе хәтергә төшөрәйек тә, халҡыбыҙға ғына хас зауыҡ менән кейенәйек, тип әйткем килә һеҙгә.**

Һөнәре буйынса уҡытыусы булған әсәйемдә мин гел матур, килешле кейемдәрҙә күрә инем. Шулай уҡ өләсәйем минең өсөн һәр яҡтан өлгө булды. Магазинға барыр булһа, өйҙә кейеп йөрөгән кейемдәрен матур күлдәк-камзулдарына алыштыра һалып алыр ине. Өләсәйемдән ҡалған тағы бер һабаҡ - ирен алдында бер ҡасан да бысраҡ, күрмәлекһеҙ кейемдә йөрөмә. Салбар, ҡыҫҡа итәк тә ҡатын-ҡыҙҙы бер нисек тә йәмләй алмай.

Ҡул эштәрен белеү ҡатын-ҡыҙ өсөн оло бер һөнәр, күп кенә әйберҙәрҙе мин шулай уҡ үҙем бәйләп кейәм, һатып алғанға ҡарағанда, күпкә зауыҡлыраҡ була. Аяҡ кейемемә ныҡ иғтибарлымын, үксәһе тапалып бөткән туфлиҙар бер кемде лә йәмләмәй. Башҡорт ҡыҙы шулай уҡ оҙон сәсле лә булырға тейеш. Тәрбиәле сәстәр - гүзәл затҡа ҡупшылыҡ һәм күркәмлек өҫтәп тора. Өләсәйем битенә бер ҡасан да магазиндан алынған крем һөртмәне. Ҡайһы саҡта битенә яңы ғына үткәрелгән йәш ҡаймаҡты һөртөп ебәргәнен, беҙҙе лә сақырып алып, һөрттөргәнен хәтерләйем. Мин үҙем дә кремдар ҡулланмайым, сөнки улар битте боҙоп, тәбиғи матурлығын юҡҡа сығара, тип иҫәпләйем. Көмөш биҙәүестәр яратам, улар мине яман күҙҙәрҙән һаҡлай кеүек. Боронғолар бушҡа ғына "Алҡа биткә пәрҙә, беләҙек ҡулға пәрҙә" тимәгәндәр.

Бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙҙан төрлө яҡлы, әүҙем булыуын талап итә. Холҡобоҙҙо, йөҙ үҙенсәлектәрен, нисек атлап йөрөүебеҙҙе, эске донъябыҙҙы, шулай уҡ йәшәү рәүешебеҙҙе иҫәпкә алып, ҡупшы булайыҡсы, гүзәл ханымдар!

**Әнүзә ЙОМАҒОЛОВА,**
**уҡытыусы.**

ИЖАДХАНА

# БУРАНБАЙҘЫҢ...

## тағы бер моңло балаһы



**Бер мәл урта йәштәрҙәге ике кешенең әңгәмәһен тыңлап торорға тура килде. Улар бик тәмләп халҡыбыҙҙың бөгөнгө йыр сәнғәте тураһында әңгәмә ҡорғайны. Һөйләшә торғас, был ағайҙарҙың фекер ебе бер моң эйәһенә барып төртөлдө һәм улар йырсының киң билдәле йыры тураһында шундай һығымта яһаны: "Был йыр махсус рәүештә бары тик ошо йырсы өсөн генә ижад ителгәндәй тойола. Башҡа йырсылар ул йырҙы уның һымаҡ итеп башҡара алмай..." Был диалогта һүҙ Рауил Бикбайҙың "Әсәй, мине таңдан уят әле" шиғырына ижад ителгән йырҙы башҡарыусы йәш егет - Юнир Һағынбаев тураһында барҙы. Баймаҡ районы Буранбай ауылы егете Юнир бөгөн Башҡорт дәүләт филармонияһында эшләй, шулай уҡ Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында йыр түңәрәге лә алып бара. Йыр менән бер рәттән, әүҙем рәүештә балаларға ҡурай серҙәрен дә төшөндөрә. Ул - халыҡ-ара конкурстар лауреаты, шулай уҡ "Гәлсәр һандуғас", "Башҡорт йыры", "Ирәндек моңдары" конкурстарында ла уңышлы сығыш яһап, үҙен үҙенсәлекле тауышлы, моңло, талантлы йырсы итеп танытҡан. Ә күптән түгел булып үткән "Башҡорт йыры - 2012" конкурсында ул төп бүләккә - Гран-приға лайыҡ булды. Юнир Һағынбаев менән әңгәмәбеҙҙә тетрәнеү, ләззәтләнеү һәм рухланыу тигән өс хәл-торошто берләштереүсе "башҡорт моңо" темаһын йүнәлешебеҙҙә билдәләгән маяҡ итеп алдыҡ. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.**

### Ҡурай һәм башҡорт йыры

Өфө сәнғәт училищеһының Сибай филиалында ҡурайсылар әҙерләү бүлегендә уҡығанда вокал түңәрәгенә лә йөрөнөм. Юғары профессиональ уҡытыусылар ҡулында шөғөлләндем. Ғөмүмән, Сибай сәнғәт колледжында бик көслө педагогтар уҡытыуы һәр кемгә мәғлүмдер. Марсель Ҡотоевтарҙы тәрбиәләгән Камил Вәлиевтар кимәлендәге уҡытыусылар эшләй был уҡыу йортонда.

Студент саҡтан уҡ төрлө конкурстарҙа әүҙем ҡатнашып, үҙемде һынап ҡараным, аҡрын ғына аҙымдар менән үҙ үремде яуларға тырыштым. Конкурстарға, сәхнәгә һәр саҡ халыҡ йырҙарын алып сыҡтым. Композитор әҫәрҙәренән иһә бары үҙемдеке генә булыр йырҙарҙы башҡарырға тырыштым. Фәрит Яҡшығоловтың "Йәшел яулыҡ", "Онотма әле мине, ауылым", Әминә Бикташеваның "Әсәй, мине таңда уят әле" тигән йырҙар шундайҙарҙан.

Ҡурайҙы икенсе ҡанатым итеп тоям, шуға ла ҡурай ҙа ҡулдан төшкәне юҡ. Әҙһәм Исҡужин исемендәге ҡурайсылар конкурсында бер-нисә йыл рәттән ҡатнаштым, тәүге урындар ҙа алғаным булды. Былтыр иһә Октябрьский ҡалаһында үткән республика ҡурайсылар конкурсында икенсе урын яуланым.

Туғыҙ йыл ҡурай буйынса белем алдым, әле лә үҙемдең оҫталығымды камиллаштырыу буйынса эшләйем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп кенә йырсылар үҙҙәренең икенсе һөнәре булған ҡурайҙа уйнауҙы икенсе, өсөнсө планға күсерҙе, ҡайһылары уны бөтөнләй "онотто". Ә мин һәр ваҡыт ҡурайымды үҙем менән йөрөтәм, ҡайҙа ғына сығыш яһарға тура килһә лә, иң беренсе - ҡурайҙа уйнайым, ҡурайым моңон йыр менән дауам итәм. Уйлай башлаһаң, ҡурайҙа уйнауым минә ныҡ ярҙам итә. Ни тиһәң дә, ҡурайҙа уйнаһаң, көйҙө отоп алыуы ла, йырлауы ла еңелерәк. Ҡурай уйнау тынды ла иркенәйтә, үпкәләрҙе лә сафландыра. Тын юлдары киңәйгәс, тын алыу яҡшырғас, был, үҙ сиратында, тәндең кислород менән байытылыуын тәьмин итә. Тәне саф һауаға тулышҡан булғас, ҡурайсы арымай, ҡағиҙә буларaҡ, улар эске энергияһы ташып торған уңышлы кешеләр.

Йырлар алдынан ҡурайҙы бик хәтәр итеп һыҙҙыртам да, шул көслө ҡурай аһәңен файҙаланып, үҙем дә хисләнеп, әҫәрләнеп, йыр башлайым. Киреһенсә, ҡурайҙы һуҙпан генә уйнаһаң, йырлау ҙа һүлпән, ялыҡтырғыс тойолоуы мөмкин. Шуға, күп ҡурайсылар йырсылар, шулай уҡ бейеүселәргә ҡушылып уйнаһа, ул йырсы, йә бейеүсе йырламаҫ ерҙән йырлай, бейемәҫ ерҙән дәртләнеп, уртаға төшөп, бейеп китә. Мин үҙем дә йырлағанда ла, ҡурайҙа уйнағанда ла, көсөмдө лә, хисемде лә, тынымды ла, йөрәгемде лә тыймайым. Тамашасы "Был ысын итеп уйнай" тип әйтерлек булһын, тигән эске ынтылыш менән дәртләндерәм үҙемде. Шуға күрә, ике төрҙә - ҡурайҙа ла, йырҙа ла ҙур киңәнес кисерәм. Ижад ихласлыҡты үҙ итә. Үҙемде ҡурайсы булараҡ та, йырсы булараҡ та иркен тоям, был ике төрҙә лә үҙем теләгән хистәр ташҡынының иң юғары нөктәһенә барып етәмдер, тип уйлайым.

### Йөрәгемде ҡуҙғытҡаны...

Башҡорт халыҡ йырҙарының бик аҙ ғына өлөшө сығарылған әле сәхнәгә, ҡайһы бер йырҙарҙы тамашасы бөтөнләй ишеткәне юҡ. Күп йырҙарыбыҙ юғалып ҡалған, күптәре архивтарҙа һәм халыҡ хәтерендә һаҡлана. Бына шул әле бер ҡасан да ишетелмәгән, киң аудиторияға тыңлатылмаған йырҙарыбыҙҙы эҙләү, табыу, һаҡлау эшен Юлай Ғәйнетдинов бына нисә тиҫтә йылдар бер үҙе тиерлек атҡарып килә. Ысын мәғәнәһендә илһөйәр, үҙ халҡының рухи байлығына мөкиббән хеҙмәт итеүсе фиҙаҡәр кеше ул Юлай ағай. Бөгөнгө көндә халҡыбыҙға тап уның һымаҡ хеҙмәт итеүселәр күберәк талап ителә, тип уйлайым. Юлай Ишбулды улы ярҙам итә миңә халыҡ йырҙарын өйрәнергә. Әле "Хисам", "Йәмәлекәй тауы", "Ямантау", "Ирәмәле", "Әйләнеп тә аҡҡан ағын һыу", "Ишмырҙа" кеүек һирәк башҡарыла торған йырҙарҙы йырлайым. Халыҡ йырҙары һәр саҡ йөрәгемде ҡуҙғыта, башҡарғанда йырға бөтөн мономдо, көсөмдө, аһәңемде һалам. Башҡорт моңон шунһыҙ башҡарып булмай.

### Ҡолағына "айыу баҫҡан"...

Ундай кешеләрҙең моңон үҫтерен булмайҙыр ул, тип уйлайым. Беҙҙең гимназияла күп балалар йыр, ҡурай түңәрәгенә яҙылырға теләй. Әммә һәр береһенең дә ундай таланты юҡ. Күңелдәре төшһә лә, иплэп кенә әйтеп, аңлатырға тырышам, ҡырҡа һуҡмайым, тынысландырам. Уларҙың мотлаҡ икенсе бер таланты бар икәнлеген төшөндөрәм.

Ҡурайсыларҙың күптәре моңдо тойоп уйнай. Мин үҙем дә шундайҙарҙан. Моңдо тоя белеү бала саҡтан һалына. Атаһы гармунда уйнаһа, йә иһә, әсәһе, туғандары йырлаһа, уларҙы тыңлап үҫкән балала моңдо тойоу һәләте барлыҡҡа килә. Ауыл балалары был яҡтан бик бәхетле - улар милли моң әсендә ҡайнап үҫә. Беҙҙең бала саҡта ла шулай булды. 3-сө синыфтан ҡурай уйнай башлауыма ла мине уратып алған мөхит йоғонто яһағандыр. Ғөмүмән, Баймаҡ районының Буранбай ауылы был йәһәттән бик уникаль төбәк. "Башҡорт йыры" конкурсында ла ошо ауылдан сыҡҡан йырсылар - гел беренселәр рәтендә, призлы урындар ҙа уларға эләгә. Мин үҙемде улар араһында булыуым менән бәхетле тоям.

### Моң - күңелде нескәртә

Моңдо психологик инструмент итеп ҡарағанда, уның тәьҫире иҫ киткес. Ул моңһоуландыра ла, шатландыра ла, илата ла, дәртләндерә лә. Моң - аңлап бөтөп булмай торған фәлсәфә ул. Мәҫәлән, кәләш алыуымдың өсөнсө көнөндә, беҙҙе ауыр ҡайғыға һалып, өләсәйем мәрхүмә булып ҡуйҙы. Был хәлде бөтәбеҙ ҙә бик ауыр кисерҙек. Әле лә юҡһыныуыбыҙҙың, һағышыбыҙҙың сиге юҡ. Күп тә үтмәй, кәләшемдең өләсәһе, минең оло ҡәйнәм, 75 йәшлек юбилейын үткәрҙе. "Өләсәй доғаһы" тигән йыр йырлауымды һоранылар мәжлестә. Минең өсөн был йыр таныш түгел ине, икенсе бүлмәлә уның һүҙҙәрен уҡып, йырлап ҡарайым - йырлап булмай, өләсәйҙең арҡамдан һөйгән саҡтары күҙ алдыма килә лә, күҙҙәргә йәш килеп тығыла. Илап ебәрҙем. Шул саҡ мин шиғыр менән моңдоң ҡушылыу көсөн үҙемдә кисерҙем. Шағирҙар ҙа бит буштан-буш, һүҙ юҡта - һүҙ, йыр юҡта йыр булһын тип яҙышмай, һәр кем үҙе ижад иткән әҫәргә күңел кисерештәрен, уй-һағышын ҡушып үрә. Ә йырсылар уларға үҙҙәренең хисен өҫтәп, тыңлаусы күңеленә тәьҫир итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, Буранбай ауылы ижадсыларына Аллаһы Тәғәлә таланттан да, дәрттән дә башҡаларға ҡарағанда күберәк өлөш сығарған һымаҡ тойола. Был, әлбиттә, ижади, йырлы-моңло мөхит йоғонтоһо. Йәштәребеҙгә, балаларыбыҙға ошондай мөхит булдыраһы ине һәр төбәктә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙЫЛҠЫ ИТЕ...
## омега кислоталарына бай

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары эксперттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-ендә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарарланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Ғалимдар йөрәк ауырыуы булған 608 кешене тикшереп, омега-3 майлы кислоталарының кешене ҡартайыуҙан һаҡлауын билдәләгән. Бындай кислоталар йөрәк өйәнәгенән һуң тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бирә, ҡартая барған һайын хәтер насарайыуын тотҡарлай, күҙ ауырыуҙарын булдырмай. Майлы кислоталарға бай рацион эсәк яман шеше сире барлыҡҡа килеүҙе 40 процентҡа кәметә. Бындай йәшлек эликсирын һәр магазинда ла һатып алып була. Америка ғалимдары фекеренсә, һөмбаш, макрель һәм сардина балыҡтары майлы кислоталарға бай. Шулай уҡ йылҡы ите, ҡаҙылыҡ кеүек милли аштарыбыҙ ҙа организм өсөн бик файҙалы был майлы кислоталарға бай.

■ Кешенең тәбиғәте менән оптимист булыуын АҠШ-тың Канзас штаты университеты асыҡлаған. Был тикшеренеүҙә донъяның 140 илендә йәшәүсе халыҡ ҡатнаша. Яуап биреүселәрҙең 95 проценты тик ыңғай ваҡиғалар көтөп йәшәй һәм был, ғалимдар фекеренсә, "универсаль оптимизм теорияһы"н тағы ла бер раҫлай. Был теория буйынса, һәр кеше алдағы көндәргә ышаныс менән ҡарай.

■ Белгестәр раҫлауынса, бер минут көлөү бер сәғәт спорт менән шөғөлләнеүгә тиң. Был ваҡытта яурын, күкрәк, ҡорһаҡ мускулдарына көсөргәнеш төшә, шуға көүҙәгеҙ матур булһын, тиһәгеҙ, йышыраҡ көлөгөҙ. Көлөү йөрәк өйәнәгенән дә һаҡлай икән. Табиптар белдереүенсә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусы кешеләрҙең 40 проценты ошо уҡ йәштәге һау кешеләргә ҡарағанда аҙыраҡ йылмайған һәм көлгән. "Беҙ көлөү йөрәкте нисек һаҡлай икәнен белмәйбеҙ, әммә нервы-психик көсөргәнеш ҡан тамырҙарын нормала тотоусы эндотелийҙың боҙолоуы менән бәйле икәнен яҡшы аңлайбыҙ. Нервылар ҡаҡшауы һәм пессимизм организмда май йыйылыуға, артерияларға холестерин ултырыуға, ә улар үҙ сиратында йөрәк өйәнәгенә килтерә", - ти белгестәр.

■ Күнел һалып эшләнгән эш иң негатив факторҙы - хроник стресты булдырмай икән. Быны 2600 кеше ҡатнашлығында үткән тикшеренеүҙәр күрһәткән. Техас штаты ғалимдары фекеренсә, етмәһә, ижади ҡарашлы кешеләр, ҡағиҙә булараҡ, яҡшыраҡ йоҡлай һәм дөрөҫөрәк туҡлана. Аҡыл талап ителгән, ҡатмарлы мәсьәләләр хәл итергә тура килгән һөнәр эйәләре ауыр физик йөкһө уйлау талап ителмәгән ерҙә эшләүселәргә ҡарағанда үҙҙәрен йәшерәк тоя, уларҙың һаулығы ла нығыраҡ була.

ЙОНДОҘНАМӘ

# ХУШ, АЖДАҺА! ҺАУМЫ, ЙЫЛАН!




### Көнсығыш календары буйынса...

**Тыуасаҡ яңы йыл хужаһы - бер яҡлап, изгелекле лә, икенсе яҡлап, хәүефле һәм имәнесле лә Йылан тупһабыҙға табан шыуыша. Төрлө халыҡтарҙа йыланға ҡарата мөнәсәбәт төрлөсә. Тибет йондоҙлого буйынса был иң серле һәм ҡапма-ҡаршылыҡлы билдә иҫәпләнһә, Ҡытай фәлсәфәһе уның зирәклеген, аҡылын, хәйләкәр, ләкин ышаныслы сифаттарын маҡтай.**

Көнсығыш йолаһы буйынса Йылан йылы уңышлы, айырыуса бизнес һәм финанстар өлкәһендә даланлы булырға оҡшай. Йылдың ҡаршылыҡлы буласағы фаразлана, ниндәйҙер мөһим үҙгәрештәр көтөләүе ҡуҙаллана. Яҙмыш бороолоштары көтөлмәгән үҙгәрештәргә дусар булыуы ихтимал. Йыландың иҫ киткес һығылмалығы уға бөтә булған ҡаршылыҡтар аша ла үтә алырға, хатта өмөтһөҙ тойолған хәлдәрҙән дә сығыу юлын табырға мөмкинлек бирәсәк. Был билдә алдан күрә белеү, интуиция, уйлап эш итеү һәм ғәжәйеп һығылмалылығы менән айырылып тора. Ҡыҫҡаһы, ҡатмарлы хәлдәрҙә Йыланға ҡарап эш итергә өйрәнегеҙ һәм тыуасаҡ йыл һеҙҙе һәр йәһәттән дә байытасаҡ ҡына. 2013 йылда ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан ҡасыу хәйерле булыр, сөнки Йылан үҙен мөйөшкә ҡыуалауҙы яратмай. Ул тыныс күренһә лә, һәр саҡ һәр нәмәгә әҙер һәм һиҙгер; фәлсәфәүи аҡылы уға хәлдәрҙең төпкөлөнә ҡарарға ярҙам итә.

Киләһе йыл үҙ тормоштарын планлаштырып йәшәргә яратыусыларға уңыш юлдаш буласаҡ: Йыландың ашыҡмайынса, ентекле эш итеү сифаты дөрөҫ һығымталар яһарға һәм уйланылған ҡарарҙар ҡабул итергә мөмкинлек бирәсәк. 2013 йыл никахҡа инеүселәр өсөн бик уңайлы, ләкин был эшкә бөтөн яуаплылыҡ менән ҡарарға кәрәк, сөнки Йылан һәр нәмәнең ваҡ-төйәгенә тиклем уйланылған булыуын ярата.

Яңы йылды тыныс һәм уңайлы шарттарҙа ғаилә менән бергә ҡаршыларға кәңәш ителә. Кешенең иң ҡәҙерле һәм ҡиммәтле нәмәһе - ғаилә. Һаҡсығыҙ һәм тылсымсығыҙ булып, ҡалас шикелле йомарланып, ғаиләгеҙ усағы янында ятһын әйҙә Йылан йыл буйы.

Тибет йондоҙлого буйынса, Йылан йылының символы - Һыу. Шуға күрә Яңы йыл ҡаршылағанда асыҡ зәңгәрҙән алып күкһел, күктән башлап ҡара төҫтәргә тиклем төрлө гаммалар уңышлы булыр, тигән һынамыш әйтелә. Һыу ағышын һәм тулҡын сағылышын хәтерләткән тәрҙәге ялтырауыҡ туҡымаларҙан күлдәк, блузка тектерергә мөмкин. Биҙәүестәр һәм аксессуарҙар сифатында йылан символикаһын һайлағыҙ. Йылан һыны төшөрөлгән һәр төрлө беләҙектәр һәм йөҙөктәр Яңы йыл кисендә Һеҙҙең күңелегеҙгә ятышлы талисман булыр. Тик шуны иҫтә тотоғоҙ: йылан тиреһе файҙаланып тегелгән аяҡ, өҫ кейеме кеймәгеҙ һәм аксессуарҙар менән файҙаланмағыҙ. Зиннәтле металл һәм таштарға килгәндә, Йылан уларға бер ҙә битараф түгел. Айырыуса көмөш, баҡыр, таштарҙан - сапфир, лазурит, турмалин, циркон, опал, змеевик, йәшмә уның күңеленә яҡын.

Байрам өҫтәле хаҡында ла алдан ҡайғыртыу кәрәк. Йылан йыртҡыстар сафына ҡарай, шуға күрә табыныгыҙ түрендә ит, ҡош һәм кролик ите, балыҡ, диңгеҙ ризыҡтары, колбаса, тауыҡ һәм бүҙәнә йомортҡалары йәки уларҙан әҙерләнгән аш-һыу өҫтөнлөк итһен.

### Терпе - йорт һаҡсыһы

**Беҙ күнеккән Көнсығыш йондоҙлого фаразлауҙарынан тыш, боронғо славян системаһына күҙ һалыу ҙа ҡыҙыҡлы ғына мәғлүмәттәр бирә. Был йондоҙлоҡ күҙаллауынса, киләһе йыл хужаһының Терпе булыуы көтөлә.**

Терпе - иҫ китмәле һөймәлекле, аҡыллы һәм изгелекле йән эйәһе. Борон славян халҡы уларҙы кәртә-ҡураһы, йорто янында сысҡандарҙан, йыландарҙан һәм ен-шайтандарҙан һаҡланыу сараһы булараҡ йәшәткән. Терпене үлтереү йәки йорт янынан ҡыуып ебәреү оло гонаһ һаналған. Ошонда бер һорау тыуа: Көнсығыш йондоҙлого хужаһы Йылан менән Терпе киләһе йыл нисек һыйышырҙар икән һуң? Терпе бит йыланға һунар итергә әүәҫ. Йылан, әлбиттә, терпенән шөрләй һәм уның биләмәһенә башын да тыҡмаясаҡ. Терпе лә йорт-ҡура, һөтлө туҫтаҡ янынан алыҫ урманға сығып китмәҫ, сөнки улар тыныс, ҙур, тату ғаилә булып йәшәүҙе өҫтөн күрә. Был, тимәк, киләһе йылда һәммәбеҙ өсөн дә төп тормош ҡиммәте, донъябыҙ үҙәге - ғаилә буласаҡ, тигәнде аңлата.

### Ер йөҙө таҙарыныр

**Ҡыҙыҡ, ниндәй генә ырымһынамыш һәм календарҙар юҡ был донъяла! 32 йыллыҡ зороастрий календары буйынса, тыуасаҡ йылдың 21 мартында таң һарыһынан Ҡоҙғон йылы башланып китәсәк икән.**

Зороастрий ырым-йолалары буйынса, бөркөттәр һәм грифондар менән бер рәттән, ҡоҙғондар ер һәм һыуҙарҙың бысраныуына юл ҡуймай, һәр төрлө йоғошло ауырыуҙар һәм эпидемия таралыуын сикләүсе "донъяны таҙартыусылар" булып иҫәпләнә. Ҡоҙғон йылы - ул һайлау йылы, тетрәнеү һәм һынауҙарһыҙ ғына үтеп китмәйәсәк йыл менән яманға бүленеш йылы. Шулай булғас, тигән һығымтаға киләһе ошо йүнәлештә эшләүсе астролог Павел Глоба, донъяла һуғыштар һәм революциялар, экологик проблемалар, яңы вирустар таралыуы ихтимал: Ер йөҙө таҙарыныу стадияһын үтәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

ЙЫЛАН ЙЫЛЫНДА...



# ИЖАДСЫҒА НИ ҠИММӘТ?
## Ижад емешенең баһаланыуы ҡиммәт!

**Үтеп киткән 2012 йыл "Ағиҙел"журналы өсөн дә, шәхсән үҙем өсөн дә насар булманы, тип иҫәпләйем. Ҙурҙан ҡупҡанда, өлгәшелгәндәр менән ҡәнәғәт ҡалырға, булмағанын хәстәрләргә ынтылырға кәрәк.**

Журналыбыҙ ай һайын ваҡытында сығып килде, әҙиптәребеҙҙең иң һәйбәт тип табылған әҫәрҙәрен һайлап-һайлап уҡыусылар иғтибарына ваҡытында еткерә барҙыҡ. Баҫманы алдырып уҡыған дуҫтарыбыҙ быны белә. Әлбиттә, тираж кәмеүе эсте бошора. Шул уҡ ваҡытта кәмеү сәбәптәрен, аҙылмайһығыҙ, тип халыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырыу - иң өҫтә яткан һылтау. Был хәлдең объектив һәм субъектив сәбәптәре күп, һәм ул йәмғиәтебеҙҙең мәҙәни кимәленә, хәле-халәтенә, әҙерлегенә бәйле. Йәмғиәттәге мөһим социаль, мәҙәни, милли, көнкүреш проблемаларҙы хәл итмәй тороп, "Ағиҙел"дең генә түгел, республиканың башҡа баҫмаларының да юғары тиражын тәьмин итеп булмаясаҡ. Был йәһәттән "домино" принцибы күҙ алдына килеп баҫа: тәүҙә торғаны ауһа, уның тәьсирендә башҡалары ла бер-бер артлы йығыла... Үҙемә килгәндә, ижадтағы иң ҙур шатлығым шул: рус телендә "Кытай-город" тигән исем менән сыҡҡан китабым Рәсәйҙең Ҙур әҙәби премияһы менән баһаланды. Мәскәү һынлы Мәскәүҙең милли яҙыусы әҫәренә иғтибар итеүе (Мәскәү күҙ йәштәренә ышанмай, тиҙәрме әле?) бик йыш булмай. Үҙемә генә түгел, ғөмүмән, башҡорт әҙәбиәтенә лә маҡтаулы баһа, тип ҡарайым мин быны. Премия мине ҡанатландырҙы, яңы әҫәрҙәргә тотонорға һәм мөмкин икән, уларҙы руссаға аударып, үҙәк журналдарға ла ебәрергә кәрәк, тигән ниәт уятты. Әйткәндәй, быны башҡа яҙыусылар ҙа эшләй алыр ине. Киләһе йылға оло өмөт менән бағам. Журналдың барыбер ҙә үҙ уҡыусылары булыр, тигән ышанысым бар. Икмәк менән генә тук була алмай кеше. Уға әҙәбиәт тә, сәнғәт тә, театр ҙа, китап та кәрәк. Шуларһыҙ кеше бөтөн, камил һаналмай. Бигерәк тә бөгөнгө заманда.

**Әмир ӘМИНЕВ,**
**яҙыусы,"Ағиҙел" журналының баш мөхәррире.**

*ӘЙҘӘ, ИМАНЛЫ БУЛАЙЫҠ!*

# МОСОЛМАНЛЫҠ - АЛЛАҺЫ БҮЛӘГЕ

**Нимә ул иман? Бер яҡтан, ул тойғо ағзалары менән һиҙеп һәм һүҙ менән аңлатып булмаған, бер ниндәй шөбһәһеҙ хәҡиҡәткә инаныу, ышаныу. Икенсе яҡтан, иман Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡолдарына мәңгелек бәхеткә өлгәшеү өсөн бирелгән оло ниғмәт.**



Ислам ғалимдары иманды ялҡын менән сағыштыра. Әгәр уға даими рәүештә яғыулыҡ өҫтәп, тышҡы йоғонтоларҙан һаҡлап торһаң, ул ҡыҙыуыраҡ, яҡтыраҡ яна башлай. Шул уҡ ваҡытта ялҡындан ситләшһәң, уны ҡарамаһаң, яғыулыҡ өҫтәмәһәң, ул һүнәсәк һәм тирә-яҡты ҡараңғылыҡ сорнап аласаҡ. Эйе, иманды һаҡлаған яғыулыҡ - ул изге эштәр, ғибәҙәттәр. Ерәнес эштәр иһә, иманды кәметә, юҡҡа сығарыуы ла мөмкин.

Кеше дингә төрлөсә килә. Берәүҙәр ниндәйҙер тетрәндергес ваҡиғанан һуң тормош хаҡында уйлана башлай. Икенселәргә олатай-өләсәйҙәренең дини кешеләр булыуы этәргес көс була. Өсөнсөләргә динде тотҡан мосолмандар менән аралашыу, улар мөхитенә яҡын булыу ҙур йоғонто яһай. Үҙемә килгәндә, Аллаға бәләкәйҙән ышана инем. Уға ышаныу һүҙҙәрҙә генә ҡалмаҫҡа тейеш, эштәр, ғибәҙәттәр менән нығынырға тейешлеген дә аңланым. Ислам тураһында белемем бик аҙ ине, шуға күрә лә ата-бабаларымдың диненә ҡайтыу өсөн күп уйланырға, аралашырға, бәхәсләшергә тура килде. Ғөмүмән, мосолмандар, христиандар, шулай уҡ бар диндәрҙе инҡар итеүселәр, йәғни атеистар бер-береһе менән татыу йәшәгән мөхиттә тыуыуымдан, белем алыуымдан, йәшәүемдән үндым, тип әйтә алам. Башҡа динде тотоусылар менән дә байтаҡ аралаштым. Күҙәтергә, баһаларға мөмкинлегем булды. Диндәрҙең фани һәм баҡый донъяға, кешеләргә, йәмғиәткә, бар тере һәм тере булмаған йәндәргә, әйберҙәргә мөнәсәбәтен сағыштырҙым. Бар ошо уйланыуҙарым, сағыштырыуҙарым, анализлауым мине ислам диненә ҡайтарҙы. Тәүҙә аң менән ҡабул итһәм, ислам динен тотҡан йәштәштәрем менән аралашыу, дини китаптар уҡыу был тәғлимәтте йөрәгемә лә индерҙе һәм исламға ҡарата тағы ла көслөрәк мөхәббәт уятты, ҡараштарымды нығытты. Мосолман булыуым менән ғорурланам, ләкин ҡупырайып йөрөмәйем. Шул уҡ ваҡытта Ислам принциптарынан ситләшмәйем, дин тотҡанымды ла йәшермәйем, ләкин үҙ ҡараштарымды бер кемгә лә көсләп таҡмайым. Йөрәгемдә иман нуры ҡабындырғаны өсөн Аллаһы Тәғәләгә мең рәхмәтлемен.

Мосолман булыу - ислам дине вәкиле булыуға ирек биргән, Конституцияның выждан ирке буйынса статьяһында нығытылған шәхси хоҡуғыбыҙ ғына түгел. Мосолман булыуыбыҙ сикһеҙ бәхет менән тулы йәннәт баҡсалары вәғәҙә иткән Аллаһы Тәғәләнең бүләге ул. Бәлки, беҙ үҙебеҙ, мосолмандар, был бүләктең ысын ҡиммәтенең бәләкәй генә өлөшөн аңлайбыҙҙыр. Ләкин ошо бәләкәй генә өлөш тә юлыбыҙҙың дөрөҫ булыуына, исламдың гүзәллегенә һәм дин ярҙамында күпме бысраҡлыҡтарҙан ситләшеүебеҙгә ишара яһай.

Күңел тыныслығы, ике донъя бәхете алырға теләгән һәр кем Аллаһы Тәғәләгә табан ҡыйыу аҙым эшләргә тейеш. Кешенең тырышлыҡтарын күреп, Раббыбыҙ уларҙы үҙенә яҡынайтып, күңелдәренә иман нуры һаласаҡ. Хәҡиҡәтте эҙләүселәргә Аллаһы Тәғәлә күп пәрҙәләрҙе аса һәм иң мөһим ниғмәт - иман бирә. Динебеҙҙе өйрәнәйек, күңелдәребеҙҙән йәһилиәт ҡалдыҡтарын алып ташлайыҡ, иманлы, тәүфиҡлы булайыҡ. Шулай итеп кенә беҙ эскелек, наркоманлыҡ, вәхшилек, әхлаҡһыҙлыҡ кеүек социаль проблемаларҙы еңәсәкбеҙ. Шулай итеп кенә үҙебеҙҙең киләсәк тормошобоҙҙо ҡотҡарасаҡбыҙ.

**Тимур РӘХМӘТУЛЛИН, "Динамо" спорт-комплексының матбуғат хеҙмәте етәксеһе.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Яҙмыш һулышы: уны нисек танырға?

**Ни өсөн һүҙ ыңғайы был мәсьәләгә туҡталырға булдым һуң? Сөнки кешенең йәшәйеше уның эшмәкәрлегенең ниндәйҙер бер яғы менән генә бәйләнмәгән. Ә уның был тормошта көн һайын осраған төрлө өлкәләрен үҙенә ала.**

Кейем төҫө, ҡырыныу ысулы, йоҡо бүлмәһендә карауат торған урын, ир менән ҡатындың буй кимәле, етәкселек ғәҙәттәре, биләгән вазифаһы - барыһы ла беҙҙең сәләмәтлегебеҙгә йоғонто яһай. Ул ғына ла түгел, һәр кемебеҙҙең артынан күҙгә күренмәгән, әммә ҡәтғи һәм һис тайпылышһыҙ тормош үҙәне буйлап алып барған "ҡойроҡ" һуҙыла. Ул элекке тормошобоҙҙа туплаған ғәҙәттәр, теләктәр һәм һәләттәрҙең сағылышы. Халыҡтар мифологияһында, уларҙың йолаларында һәм ырым-ышаныуҙарында йәшәйештең бындай шәхси яғы яҙмыш тигән атама алған.

Өлкәнәйә килә кеше яҙмыш һулышын тойорға һәләтле. Минең тормошомда ул шулай сағыла: ниндәйҙер әйберҙе ҡыҫҡарта башлаһам, таҡтамы ул, таҫмамы, кейем йәки икенсе берәй нәмәме, ул теләгәндән ҡыҫҡараҡ килеп сыға. Ҡыҫҡартыу процесына ни тиклем күберәк иғтибар бүләм - һөҙөмтә шул тиклем насарыраҡ. Яҙмыштың шундай сағылышы тураһында уйланып, был тормошта нисек булырға икәнлеген аңларға тырыштым. Бынан 10 йыл элек, ниһайәт, аңланым: был тормошта миңә, бәлки, ул тиклем үк һаҡсыл булырға кәрәкмәйҙер. Мин ғаиләмдең именлеген сығымдарҙы ҡыҫҡартып яҡшыртырға тырышҡайным. Яҙмыш, был һинең юлың түгел, тине. Шунан һуң тормоштоң ошо яғына иғтибар итмәйенсә, аҡса эшләү ысулдарына күберәк иғтибар итә башланым. Һөҙөмтәлә билдәле иҡтисади азатлыҡҡа эйә булдым.

Туғандарымдың береһе даими рәүештә үҙенә гел һыуыҡ бина тура килеүенә зарлана. Ҡатыны менән ул төрлө ҡалаларҙа алтымы, етеме фатирҙа йәшәне, ахырҙа, барыбер фатирҙары һыуыҡ булды. Хатта ул йылы булғанда ла, яҙмыш уларҙы унан сығарып, һыуыҡ фатирға күсерҙе. Ул ғына ла түгел, һыуыҡ уны эшендә лә эҙәрлекләй. Бер ваҡыт туғаныма йылы кабинет тура килә, ләкин күпмелер ваҡыттан һуң йылытыу системаһында үҙгәрештәр була һәм ул ҡабат һыуыҡ бүлмәлә ултырып ҡала. Яҙмыш уға асыҡ итеп аңлата: һиңә һыуыҡтар булмаған ерҙә йәшәргә кәрәк, әммә ул яҙмыш ҡушыуына күҙ йома.

Коллегаларымдың береһе, Башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусыһы, кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлау мөмкинлеге булмауы хаҡында һөйләне. Нисек кенә тырышмаһын, эште бер нисек тә аҙағына еткерә алмай ҙа ҡуя икән. Йә ғилми етәксеһе үлеп китә, йә советты ябалар, йә тағы нимәләр - һөҙөмтәлә коллегам пенсияға дәрәжәһеҙ генә китә. Һуңынан яҙмыштың уның ғаиләһе менән нисек шаярыуын белдем: уларға гелән өйҙөң мөйөшөндәге фатир эләгә икән. Уйымда ғына ошо ике ваҡиғаны бәйләп, мин ни өсөн коллегам дәрәжә ала алмауын аңланым: был тормошта уға гелән ситтә булырға яҙған. Әммә ул яҙмыштың ишараһын аңламаған: уға бары тик мөйөштәге фатирҙар булмаған өйҙә йәшәргә кәрәк булған. Шәхси йорт тап шундайҙарҙан. Әгәр яҙмыш ҡушыуын ваҡытында аңлаһа, ул ҡуйған маҡсатына өлгәшер ине. Әйткәндәй, тормош уны барыбер ҙә Өфөнө ҡалдырырға мәжбүр итте. Бөгөн ул үҙенең шәхси йортонда йәшәй һәм бик бәхетле.

Беҙҙең күпселек тормош уңышһыҙлыҡтарыбыҙ, фажиғәләребеҙ һәм һәләкәттәребеҙ бары тик яҙмыш һулышын тойорға һәләтһеҙ булыуыбыҙҙан килеп сыға. Ә ул беҙҙең йөрәгебеҙгә шаҡый ҙа шаҡый. Ләкин йөрәгебеҙ һаңғырау, тоймаусан. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел, сөнки ул бит май менән ҡапланған. Һимергән йөрәк - физик ауырыуҙарҙың ғына түгел, рухи бысраҡлыҡтың да сығанағы. Бынан тыш, ул күңелдең эске тауышын һәм рухтың шыбырлауын да ишетергә һәләтле түгел. Әгәр беҙ үҙебеҙҙең иң яҡшы сифаттарыбыҙҙы, йәшәйеш ҡанундарын аңлауҙың иң нескә инструменттарын юғалтҡанбыҙ икән, тулы ҡанлы тормош менән йәшәй алабыҙмы һуң? Әлбиттә, юҡ. Был тороштан сығыу юлы бар. Ул - ит ашауҙан баш тартыу. Исмаһам, һөтимәрҙәр итенән булһа ла. Әгәр ошо аҙымға барырға ҡарар итһәгеҙ, тормошоғоҙҙа ҙур үҙгәрештәр буласағына инанһағыҙ ҙа була. Матди кимәлдә түгел, ә рухи кимәлдә.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы.**

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

**16.** Көн дауамында юмор хисен һаҡларға тырышығыҙ. Был киҫкен мәлдәрҙә көсөргәнеште алып ташларға ярҙам итә, ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа матур атмосфера тыуҙыра. Күптән түгел шундай мәғлүмәт ишеттем: Көньяҡ Американың таурипан ҡәбиләһе аборигендары төн уртаһында уянып, бер-береһенә көләмәс һөйләй, шаяра икән. Хатта беҙ ҡырағай тип һанаған аборигендар ҙа йоҡо ваҡытында көлөү мохтажлығын кисерә һәм әҙерәк шаяртып алғас, ҡабат татлы йоҡоға тала.

**17.** Үҙ ваҡытығыҙҙың юғары тәртипле хужаһы булығыҙ. Аҙнала 168 сәғәт. Ошо ваҡыт эсендә көндәлек эштәрҙе башҡарырға ла ваҡыт табылырға тейеш. Көн тәртибен үтәүҙә ныҡлы булығыҙ. Һәр иртән көнөгөҙҙө планлаштырыу өсөн бер нисә минут бүлегеҙ. Өҫтөнлөклө мәсьәләләрҙе аныҡ планлаштырығыҙ һәм иғтибарығыҙҙы бигүк мөһим булмаған, ләкин кисекмәҫтән хәл итеүҙе талап иткән нәмәләргә түгел, ә бигүк мөһим булып күренмәгән, әммә ныҡ мөһим мәсьәләләрҙә туплағыҙ (фокус ҡуйығыҙ). Тап шундай эштәр бик тиҙ шәхси һәм һөнәри үҫешкә килтерә. Мөһим, тип, шунда уҡ хәл итеүҙе талап итмәгән, әммә киләсәктә оҙайлы, ныҡлы өҫтөнлөктәр биргән нәмәләр үҙенә стратегик планлаштырыу, кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу, һөнәри белем алыу кеүек күнекмәләрҙе үҙ эсенә ала. Бер ваҡытта ла мөһимлеге аҙ булған эштәргә мөһим эштәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарырға юл ҡуймағыҙ.

**18.** Һәр саҡ ыңғай, иғтибарын бер маҡсатҡа туплаған, уларҙан үҙеңә файҙалы нимәләр алып булған кешеләр менән генә аралашығыҙ. Мыжыҡтар, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүселәр һеҙҙең ҡәҙерле ваҡытығыҙҙы ғына аласаҡ. Үҙен даими камиллашыуға бағышлаған кешеләр менән аралашып, һеҙ һәр саҡ үҙегеҙ менә торған бейеклеккә барғанда юлдаштар осратасаҡһығыҙ.

**19.** Замананың бөйөк физиктарының береһе Стивен Хокинг, беҙ йөҙҙәрсә миллиард галактиканың ситендә урынлашҡан иң ябай яҡтыртҡыстың бәләкәй генә планетаһында йәшәйбеҙ, тип белдергән. Ысынлап та, ошо мәғлүмәт күҙлегенән ҡарағанда, һеҙҙең проблемаларығыҙ шул тиклем үк мөһимме? Беҙ Ер планетаһы өҫтөндә бик аҙ йөрөйбөҙ. Ни өсөн тәжрибә туплау өсөн ошо мөмкинлекте файҙаланмаҫҡа? Ни өсөн үҙебеҙҙе донъяла ниндәй ҙә булһа эҙ ҡалдырыуға бағышламаҫҡа? Хәҙер ултырығыҙ ҙа тормошта нимәгеҙ бар, шуларҙың исемлеген яҙығыҙ. Үҙегеҙҙең сәләмәтлегегеҙҙән йәки ғаиләгеҙҙән - беҙ ғәҙәти, шулай булырға тейешле, тип ҡараған нәмәләрҙән башлағыҙ. Ниндәй илдә йәшәүегеҙ, ниндәй аҙыҡ ашауығыҙ һ.б. тураһында 50 пункттан да кәм булмаған исемлек яҙмайынса туҡтамағыҙ. Был исемлекте бер нисә көн дауамында көнөнә бер тапҡыр булһа ла уҡып, һеҙ илһам килеүен тойорһоғоҙ, үҙегеҙҙең ни тиклем бай һәм бөйөк икәнлегегеҙҙе аңларһығыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 31 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 "Доброе утро"
10.00 Новости
10.15 "Девчата"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Иван Царевич и Серый Волк"
13.35 "Золушка"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Любовь и голуби". Комедия (12+)
17.00 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия
18.30 "Ирония судьбы, или с легким паром!" Комедия
21.40 Проводы Старого года
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В. В. Путина
00.00 Новогодняя ночь на Первом
02.30 "Дискотека 80-х"

### РОССИЯ 1

06.00 "История любви, или новогодний розыгрыш". Мелодрама
07.30 "Трое из Простоквашино", "Каникулы в Простоквашино", "Зима в Простоквашино". Мультфильмы
08.20 "Чародеи". Мюзикл
11.00 "Лучшие песни-2012". Праздничный концерт
12.40 "Карнавальная ночь". Музыкальная комедия
14.00 "Вести"
14.20 "Короли смеха"
16.55 "Москва слезам не верит". Мелодрама
19.25 "Джентльмены удачи". Комедия
20.55 "Красная шапочка". Музыкальная комедия
22.30 "Новогодний парад звезд"
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В. В. Путина
00.00 "Новогодний голубой огонек-2013"
04.05 Большая новогодняя дискотека"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 Йәшмә- күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
08.05 Төрки донъя- төрөк телендә йырҙар
08.35 Музыкаль фильм "Ҡыҙыҡ мәжлес"
09.15 Һеҙ яратҡан йырҙар
11.00 Нәфис фильм "Яңы йыл мажаралары"
12.00 Һеҙ яратҡан йырҙар - Планеталар парады
13.40 Һандуғастар төйәге
14.00 Ретро концерт
14.40 Нәфис фильм "Ер менән күк араһы"
16.10 Йәшмә - күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
17.00 Нәфис фильм "Уңыш джентльмендары"
18.40 Концерт "Ҡурай дуҫтарын йыя"
22.30 Нәфис фильм "Рәхмәт"
00.10 Һеҙ яратҡан йырҙар
02.10 Наза - 2011

### БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Новогодний привет!" Концерт**
**08.00 "Фильм детям "Близзард"**
**09.30 "Замандаштар" (6+)**
**10.00 "Алтын тирмэ"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.30 "Сулпылар-2012"**
**13.00 "Итоги года" (на башк. яз.)**
**14.00 "Иван Васильевич меняет профессию" (на башк. яз.) (12+)**
**15.30 "Новогодний "Дарман"**
**18.30 "Итоги года" (на русск. яз.)**
**19.30 "Болей за хоккей". Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд**
**19.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Россия - Канада**
**22.30 "Башкорт йыры-2012". Гала-концерт"**
**23.50 Новогоднее поздравление Президента Республики Башкортостан Р. З. Хамитова**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В. В. Путина**
**00.00 "Башкорт йыры-2012". Продолжение**
**02.15 "Первая ночь на БСТ" (16+)**

## 1 ЯНВАРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 "Дискотека 80-х"
07.00 "Иван Царевич и Серый Волк"
08.25 "Девчата"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Любовь и голуби". Комедия (12+)
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия
13.40 "Ирония судьбы, или с легким паром!" Комедия
16.50 "Ирония судьбы. Продолжение". Комедия
18.40 "Две звезды". Большой новогодний концерт
20.45 "Аватар". Фантастика (16+)
23.20 "Красная звезда" представляет "20 лучших песен года" (16+)
01.25 "Зуд седьмого года". Комедия (12+)
03.10 "Здравствуй, дедушка мороз!" Комедия
04.30 "Миссия Дарвина" (12+)

### РОССИЯ 1

05.10 "Лучшие песни"
06.55 "Не только о любви". Концерт Николая Баскова
08.35 "Карнавальная ночь"
09.55 "Москва слезам не верит". Мелодрама
12.30 "Джентльмены удачи". Комедия
14.00 "Вести"
14.10 "Песня года". Часть первая
16.30 "Юмор года". Фестиваль (12+)
18.05 "Елки". Комедия (12+)
19.35 "Елки-2". Комедия (12+)
21.20 "Первый Новогодний вечер"
22.45 "Клуши". Комедия (12+)
00.30 "Стиляги". Мюзикл (12+)
02.50 "Летучая мышь". Музыкальный фильм
05.10 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 Йәшмә - күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
08.00 Төрки донъя - төрөк телендә йырҙар
08.15 Музыкаль фильм "Алмас Әмиров менән сәйәхәт"
09.10 Һеҙ яратҡан йырҙар - Юлдаш йыры
11.10 Илһам - милли мызыка ҡоралдары яңғырауы
11.30 Нәфис фильм "Шайба. Йондоҙҙар менән хоккей"
12.10 Һандуғастар төйәге "Яңы йыл"
13.00 Дарман 2012 "Яңы йыл сығарылышы"
17.00 Нәфис фильм "Еңмеш"
17.30 Музыкаль фильм "Ваҡыт арбаһы"
18.50 Яңы йыл клиптары
22.00 90-сы йылғы дискотека (2011)
19.00 Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00 "Белые мгновения". Концерт**
**08.00 "Герцог Дюк"**
**09.30 "Кондэлек". Хайбуллинский район (6+)**
**10.00 "Салям" (12+)**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.30 "Зеркальце"**
**11.45 "Бауырхак"**
**12.00 "Сладкая сказка"**
**12.30 "Городок АЮЯ"**
**12.45 "Шатлык йыры"**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт**
**13.30 "Дарю песню"**
**14.30 "Позывной "Барс"**
**14.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция. Швейцария - Чехия**
**17.30 "История башкирского войска"**
**18.00 "Еду я в дервню"**
**18.30 "Следопыт"**
**18.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция. Швеция - Финляндия**
**21.30 "Байык-2012". Гала-концерт**

## 2 ЯНВАРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Малыш-каратист"
08.30 "Берегите мужчин"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Ледниковый период"
11.40 "Ералаш"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "После школы" (12+)
14.05 "Однолюбы". Сериал (16+)
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым
18.00 Новости (с субтитрами)
18.10 "Угадай мелодию"
18.40 "Поле чудес"
19.55 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.15 "Zолушка". Комедия (16+)
22.55 "Легенды Ретро FM"
01.15 "Царство небесное". Историческая драма (12+)
03.35 "Посмотри, кто говорит". Комедия (12+)
05.05 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

06.05 "Девушка с гитарой"
07.40 "Доярка из Хацапетовки"
09.50 "Самогонщики", "Пес Барбос и необычный кросс"
10.25 "Елки" (12+)
12.05 "Елки-2" (12+)
14.00 "Вести"
14.10 "Песня года". Часть вторая
16.50 "Юмор года". Фестиваль (12+)
18.45 "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". Комедия
20.00 "Вести"
20.20 "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". Комедия. Продолжение
20.55 "Второй Новогодний вечер"
22.35 "Новогодняя жена". Мелодрама (12+)
00.30 "На море!" Комедия (12+)
02.20 "Новогодняя засада". Комедия (12+)
04.00 "Стреляй немедленно!" Комедия (12+)
05.40 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 Йәшмә - күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.40 Таныш көйҙәр, таныш тауыштар - ретро
08.45 Төрки донъя- төрөк телендә йырҙар
09.00 Музыкаль фильм "Ҡышҡы кистә көҙгә әкиәт"
10.15 Йәштәр тауышы - йәш йырсыларҙың клиптары, йырҙары
11.00 Нәфис фильм "Таныш түгел таныштар - 1"
12.35 Төрки донъя- төрөк телендә йырҙар
12.00 Нәфис фильм "Йондоҙ"
14.00 Йәштәр тауышы - йәш йырсыларҙың клиптары, йырҙары
14.30 Концерт "Дарман 2011"
17.00 Нәфис фильм "Шуриктың мажаралары"
19.00 Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00 "Хочется верить в чудеса". Концерт**
**08.00 "Знакомые незнакомцы-1". Фильм-концерт (12+)**
**09.30 "Кондэлек". УГБГ № 20 им. Ф. Мустафиной (6+)**
**10.00 "Салям" (12+)**
**11.00 "Болей за хоккей"**
**11.15 "Звездная "Гора новостей"**
**11.20 "Цирк в 13 метров"**
**11.35 "Сулпылар-2012"**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт**
**13.30 "Дарю песню". Концерт по заявкам**
**14.30 "Следопыт"**
**14.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция**
**17.30 "История башкирского войска"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30 "Позывной "Барс"**
**18.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция**
**21.30 "Юлдаш йыры-2012". Гала-концерт**
**00.00 "Смелая музыка" (16+)**

## 3 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Малыш-каратист-2" (12+)
06.00 Новости
07.55 "Принцесса на бобах" (12+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Ледниковый период: глобальное потепление"
10.50 "Ералаш"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "После школы" (12+)
14.05 "Однолюбы" (16+)
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.10 "Угадай мелодию"
18.40 "Поле чудес"
19.55 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.15 "1+1". Комедия (16+)
23.15 "Перевозчик". Приключения (16+)
00.55 "Маленькая мисс счастье". Комедия (16+)
02.40 "Посмотри, кто еще говорит"
04.05 "Эрагон" (12+)

### РОССИЯ 1

06.20 "Живите в радости"
07.40 "Самогонщики", "Пес Барбос и необычный кросс"
08.15 "Высший пилотаж". Приключенческая мелодрама (12+)
11.00 "Вести"
11.15 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.35 "Высший пилотаж". Продолжение (12+)
12.20 Праздничный концерт
13.35 "Маша и Медведь"
14.00 "Вести"
14.10 "Операция "Ы" и другие приключения Шурика"
16.00 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (12+)
17.50 "Варенька". Мелодрама (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.20 "Варенька. Испытание любви". Мелодрама (12+)
00.00 "Укрощение строптивого". Комедия (16+)
01.40 "Четыре таксиста и собака". Комедия
03.35 "Горячая десятка" (12+)
04.35 "Космический Джэм" (16+)
05.55 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 Йәшмә - күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.30 Һандуғастар төйәге
09.15 Музыкаль фильм "Әлфиәнең наҙлы иртәһе"
10.20 Моң илсеһе - клипы.поздравл.
11.00 Нәфис фильм "Таныш түгел таныштар - 2"
13.00 Концерт "Башҡорт йыры. Яңы йыл сығарылышы"
15.10 Таныш көйҙәр, таныш тауыштар- ретро
16.00 Музыкаль фильм "Сәйәхәт"
17.00 Нәфис фильм "Кавказ тотҡонбикәһе"
Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00 Мультфильмы (на башк. яз.)**
**07.30 "Знакомые незнакомцы-2". Фильм-концерт (12+)**
**09.30 "Кондэлек". Гафурийский район (6+)**
**10.00 "Салям" (12+)**
**11.00 "Болей за хоккей"**
**11.15 "Звездная "Гора новостей"**
**11.20 "Фокусник"**
**11.35 "Борон заман илендә"**
**12,15 "Итоговый "Семяр"**
**12.45 "Йырлы кэрэз"**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт**
**13.30 "Дарю песню"**
**14.30 "Позывной "Барс"**
**14.45, 18.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция**
**17.30 "История башкирского войска"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**21.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Витязь" (Чехов) - "Салават Юлаев" (Уфа)**
**00.00 "Смелая музыка" (16+)**

## 4 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Малыш-каратист-3" (12+)
08.35 "Моя мама - невеста"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Ледниковый период 3: эра динозавров"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "После школы" (12+)
14.05 "Однолюбы" (16+)
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.10 "Угадай мелодию"
18.40 "Поле чудес"
19.55 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.15 "Случайные знакомые". Комедия (16+)
22.55 "Перевозчик-2". Боевик (16+)
00.30 "Гудзонский ястреб". Боевик (16+)
02.15 "Уж кто бы говорил-2". Комедия
03.30 "Дельго"
04.50 "24 часа" (16+)
05.30 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

06.35 "Старики-разбойники"
08.20 "Высший пилотаж" . Приключенческая мелодрама (12+)
11.00 "Вести"
11.15 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.35 "Высший пилотаж". Продолжение (12+)
12.30 Праздничный концерт
13.35 "Маша и Медведь"
14.00 "Вести"
14.10 "Дед Мороз всегда звонит... трижды". Комедия (12+)
16.10 Праздничный концерт
17.55 "Любви целительная сила". Мелодрама (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.20 "Варенька. Наперекор судьбе". Мелодрама (12+)
00.05 "Блеф". Комедия (16+)
01.50 "Четыре таксиста и собака-2". Комедия
04.20 "Дерево Джошуа" (16+)

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 Йәшмә - күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.45 Һеҙ яратҡан йырҙар
08.30 Музыкаль фильм "Эш түбәтәйҙә"
09.25 Төрки донъя - төрөк телендә йырҙар
09.40 Наза - донъя халыҡтары бейеүҙәре
10.00 Һандуғастар төйәге
10.30 Илһам - милли музыка ҡоралдары яңғырауы
11.00 Нәфис фильм "Таныш түгел таныштар - 3"
12.40 Һеҙ яратҡан йырҙар
13.00 Концерт "Гәлсәр һандуғас - 2009"
15.00 Моңло аҙан - Мөнәжәттәр
15.30 Музыкаль фильм "Кышты кем урлаған?"
16.30 Таныш көйҙәр, таныш тауыштар - ретро
17.00 Нәфис фильм "Сүллектең аҡ ҡояшы"
Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 Мультфильмы (на башк. яз.)**
**07.45 "Знакомые незнакомцы-3". Фильм-концерт (12+)**
**09.30 "Кондэлек". Учалинский район (6+)**
**10.00 "Салям" (12+)**
**11.00 "Болей за хоккей"**
**11.15 "Звездная "Гора новостей"**
**11.20 "Созвездие талантов"**
**12.15 "Волшебный хвостик"**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт**
**13.30 "Дарю песню"**
**14.30 БГАТД им. М. Гафури представляет..." (12+)**
**16.30 "Алтын тирмэ"**
**17.30 "История башкирского войска"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**21.45 "Обладатель "ТЭИ-регион-2011". "Парад планет-2010" (12+)**
**23.30 "Кубок мира по киберхоккею"**

## 5 ЯНВАРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Летучая мышь"
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Умницы и умники" (12+)
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Теперь я знаю, что такое любовь". Фильм о жизни и творческой деятельности Сергея Жигунова
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "После школы". Сериал (12+)
14.05 "Однолюбы" (16+)
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.10 "Угадай мелодию"
18.40 "Новогодний смех" на Первом
19.55 "Поле чудес". Новогодний выпуск
21.00 "Время"
21.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+)
22.50 "О чем еще говорят мужчины". Комедия (16+)
00.40 "Казанова". Комедия (16+)
02.35 "Нет такого бизнеса, как шоу-бизнес" (12+)
04.20 "24 часа" (16+)

### РОССИЯ 1

06.15 "Опасно для жизни". Сатирическая комедия
08.00 "Субботник"
08.40 "Высший пилотаж" (12+)
11.00 "Вести"
11.15 "Высший пилотаж". Продолжение (12+)
12.25 "Рождественская "Песенка года"
13.45 "Маша и Медведь"
14.00 "Вести"
14.10 "Семь верст до небес". Драма (12+)
16.10 "Шоу "Десять миллионов" с Максимым Галкиным"
17.10 Большой бенефис Игоря Маменко и Сергея Дроботенко (12+)
20.00 "Вести"
20.20 "Варенька. И в горе, и в радости". Мелодрама (12+)
00.00 "Безумно влюбленный". Комедия (16+)
01.50 "Полет фантазии". Комедия (12+)
03.40 "Смертельная битва" (16+)
05.20 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 Йәшмә - күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.45 Илһам - милли музыка ҡоралдары яңғырауы
08.00 Төрки донъя
08.20 Спектакль - "Рәйсә + Фәйзи"
11.30 Күстәнәс- сит телдәрҙәге йырҙар
12.00 Кәмит "Декомерон"
13.00 Һеҙ яратҡан йырҙар
13.20 Нәфис фильм "Сәк-сәк"
15.00 Һандуғастар төйәге
15.15 Концерт - Гөлсөм Бикбулатова
17.00 Нәфис фильм " Операция "Ы""
21.00 Музыкаль спектакль "Өс егет"
Блокты ҡабатлау

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Мультфильмы (на башк. яз.)**
**07.45 "Машина времени". Фильм-концерт (12+)**
**09.30 "Кондэлек". Кармаскалинский район (6+)**
**10.00 "Салям" (12+)**
**11.00 "Болей за хоккей"**
**11.15 "Звездная "Гора новостей"**
**11.20 "Президентская елка-2012"**
**12.00 "Карйондоз"**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт**
**13.30 "Дарю песню"**
**14.30 "Позывной "Барс"**
**14.45, 18.45 Чемпионат мира по хоккею среди молодежных команд. Прямая трансляция**
**17.30 "История башкирского войска"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**21.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа)**
**00.00 "Смелая музыка" (16+)**

## 6 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Летучая мышь"
07.45 "Армейский магазин" (16+)
08.15 "Дисней-клуб"
08.40 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" (12+)
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "После школы" (12+)
13.15 "Ералаш"
13.45 "Один дома"
15.45 "Один дома-2"
18.00 - Новости (с субтитрами)
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым
19.00 "Минута славы" шагает по стране"
21.00 "Время"
21.20 "Мой парень - ангел". Комедия
22.55 "Безымянная звезда"
01.00 Рождество Христово. Прямая трансляция из Храма Христа Спасителя
03.00 "Святые XX века"
03.50 "Кадриль". Комедия (12+)
05.10 "Соловки. Место силы"

### РОССИЯ 1

06.05 "Дождь в чужом городе". Мелодрама
08.40 "Высший пилотаж" (12+)
11.00 "Вести"
11.15 "Высший пилотаж". Продолжение (12+)
12.25 "Рождественская "Песенка года"
13.45 "Маша и Медведь"
14.00 "Вести"
14.10 "Однажды в Новый год". Мелодрама (12+)
16.00 "Кривое зеркало" (12+)
18.05 "Дела семейные". Мелодрама (12+)
20.00 "Вести"
20.20 "Варенька. И в горе, и в радости". Мелодрама (12+)
22.55 "Остров". Драма (16+)
01.00 "Рождество Христово"
03.00 "Дирижер". Драма (12+)
04.35 "Чудо" (16+)

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны
07.05 Йәшмә - күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы
07.45 Илһам- милли музыка ҡоралдарының яңғырауы
08.00 Һандуғастар төйәге
08.20 Төрки донъя - төрөк телендә йырҙар
08.45 Наза - донъя халыҡтары бейеүҙәре
09.20 Концерт "Ҡышҡы романс"
10.10 Нәфис фильм "Ваҡыт арбаһы"
11.30 Таныш көйҙәр, таныш тауыштар - ретро
12.00 Концерт "Бүреләр" төркөмө
12.30 Һеҙҙең өсөн- күңелле йырҙар
12.45 Нәфис фильм "Ҡышты кем урлаған?"
14.00 Йырҙарыбыҙ һеҙҙең өсөн башкорт йыры сборник
19.00 Ҡотлауҙар
22.00 Концерт - Рәил Өмөтбаев

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 Мультфильм**
**07.30 "Между небом и землей". Фильм-концерт (12+)**
**09.30 "Кондэлек" (6+)**
**10.00 "Салям" (12+)**
**11.00 "Зеркальце"**
**11.15 "Звездная "Гора новостей"**
**12.05 "Байтус. Новогодний маскарад" (6+)**
**13.00 "Зимние мелодии". Концерт**
**13.30 "Дарю песню"**
**14.30 "Итоги года" (на башк. яз.) (16+)**
**15.30 "Тэмле"**
**16.00 "Специальный репортаж" (16+)**
**16.15 "Историческая среда" (12+)**
**16.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Сокол" (Красноярск)**
**19.30 "Следопыт"**
**19.45 "Охота на радость". 10-летию РОО "Спортклуб "Рада" посвящается" (16+)**
**20.15 "Спортивные итоги года"**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Итоги года" (на русск. яз.)**
**22.30 "Парад планет-2011" (12+)**
**00.00 "Смелая музыка" (16+)**

*ИҒЛАН*

## ТӨБӘК ҺАУЛЫҠ ҮҘӘГЕ

**Өфө, Баймаҡ, Дәүләкән һәм Сибай** ҡалаларында асыласаҡ филалдарҙа медицина хеҙмәткәрҙәре, бухгалтерҙар, экономистар, юристар, дистрибьюторҙар, инженер-техник хеҙмәткәрҙәр һәм башҡаларға **эш тәҡдим итә**.

**8-960-383-98-84** телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# РӘХМӘТ УҠЫ ҺӘР БЕР КИЛГӘН ЙЫЛҒА...

**Горизонталь буйынса:** 2. Урта быуат Көнбайыш Европа ҡалаларындағы бер һөнәр кешеләрен берләштергән ойошма. 4. Эстрада йондоҙо Аллегрова бала сағында йәки Күмертауға ҡараған ауыл. 5. Берәй маҡсат менән башҡарылған эш. 8. Ишек төбөндәге кеше, бесәй йөрөй торған урын. 10. Тел, һүҙ ярҙамында художестволы образдар тыуҙыра торған сәнғәт төрө һәм шуға ҡараған әҙәрҙәр. 11. Ҡолаҡ (...)ен ашау. 12. Бик ныҡ ҡыуанғанда (...) менгәндәй булалар. 14. Кәрлә жираф. 16. "Ҡалын һандал (...)тән ҡурҡмаҫ". 19. "Бер йомортҡанан ике (...) сыҡмай". 22. Япон, ҡытай таксиһы. 23. Был елдең айыу, йәйәүле, һепертмә, торнатүш, һырғаҡ тигән төрҙәре була. 24. "Кеше (...)е менән ҡуян тотма, кеше ҡулы менән ут тотма". 25. Һилал нимә ул? 27. Байҙар власы. 31. Тәрбиәнең "балаһы". 33. "Ишек асыҡ булһа ла, (...)һеҙ инмә". 36. АҠШ-тың президенттары араһындағы Хөсәйен малайы. 37. Башҡортостандың "ер аҫтында байлыҡ тулы" ҡалаһы. 39. Автомашиналарҙың, мотоциклдарҙың марафоны. 41. Юл буйында ят тора, бүркен кейгән ҡарт тора. 44. Ҡытайҙа барлыҡҡа килгән өҫтәл уйыны. 45. Боронғо Мысырҙағы ҡояш аллаһы, уны Тур Хейердал үҙенең данлыҡлы кәмәһенә ҡушҡан. 47. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһындағы Фирҙәүес. 48. Иртән - дүрт аяҡ, төш - ике аяҡ, кис - өс аяҡ. 50. "Буранда бүре ҡоторор, (...)да тиле ҡоторор". 53. Аша һалып ике осо ҡағыла торған кәкре тимер. 55. Был уйында "кәзә һуғып" була. 57. Йырсы-бейеүселәрҙең эш урыны. 59. Тыуған илгә булған һағыш тойғоһо. 62. Шайтанды "өркөтә" торған ылыҫлы ҡыуаҡ. 63. "Үҙ илеңдә ҡарлуғас булһаң да, кеше илендә (...) булырһың". 65. Әйткән һүҙҙең аңға һеңерлек, күңелгә ятырлыҡ тәьҫире. 66. Был бөжәктең мейеһе башында түгел, ә бөтә тәнендә урынлашҡан, шунлыҡтан башһыҙ байтаҡ йәшәй ала. 67. "Яҡшы (...) - ярты бәхет". 69. Был ашлыҡты кеше беренсе булып үҫтерә башлаған. 71. Ишек, ҡапҡа кеүек асмалы нәмәләрҙең арт ягын ҡуҙғалырлыҡ итеп беркетеп торған тимер. 72. Алйот түрәләрҙең түрҙәге аяҡ кейеме. 73. Рәсәй флотының музейға әйләнгән крейсеры. 74. Үрелгән кәртә. 76. Никах ваҡытында егет яғынан ҡыҙ яғына бирелә торған мал. 77. Дөрөҫлөгө шикһеҙ булған ҡағыҙә.



**Вертикаль буйынса:** 1. Камчатка, Исландиялағы ҡайнар шишмә-фонтан. 2. Клоундың, эквилибристың эш урыны. 3. Мәккәлә булып ҡайтҡан мосолман. 5. Нитрат газы. 6. Сәғәт уҡтары сәйәхәт иткән "майҙан". 7. Өс йәшкә тиклемге балалар йөрөгән баҡса. 8. Ҡапыл таралып, малды, кешене күпләп ҡырған йоғошло ауырыу. 9. Ҡыҙыл ыуылдырыҡ биргән эре балыҡ. 11. Ҡырмыҫҡа ояһы. 13. "Тинтәк суҡмар йыйыр, (...) ҡатын йыйыр". 14. Г.Х.Андерсендың әкиәт геройы (...) Лукойе. 15. Бер бармаҡ киңлегендәге боронғо үлсәү берәмеге. 16. Тауар төрө. 17. Йылҡының маңлай сәсе. 18. Резина эсәк. 19. Рәсәйҙең һөргөнлө төбәге. 20. Донъялағы иң популяр ҡурсаҡ. 21. "Шымсы (...) ҡағырға оҫта булыр". 24. Кем йәки нимәнеңдер уң йәки һул яғы. 26. Уҡ атыу өсөн бөгөп кереш тартҡан ҡорал, ян. 28. Ат ярыштыра торған урын. 29. Көн күргәндә: "Бешәм", - ти, / Ел килгәндә: "төшәм", - ти. 30. Самурайҙың ритуаль үлеме. 31. Индеецтарҙың тирмәһе. 32. Был сәскәнән болгарҙар ҡайнатма яһайҙар. 34. Һунар иткәндә, айыу тиҙ генә өңөнән килеп сыға алмаһын өсөн өң ауыҙына тыға торған ботаҡлы-ботаҡлы ағас. 35. Икәү булғанда баштары ҡаҙанға һыймаған мал. 37. Кәтүк. 38. "Тауҙай тән биргәнсе, бармаҡтай (...) бир". 40. Һауыттың һыйыш күләме. 42. Адольф Гитлер менән бергә донъянан киткән Ева. 43. Тормош ауырлығын (...) бабай тиҙәр. 44. Йәне юҡ, ҡаны юҡ, үҙе илай, үҙе йырлай. 46. Хамса балығының икенсе атамаһы. 48. Рәсәй республикаһы. 49. Сәй ҡалдығы. 51. Артист тарафынан сәхнәлә кәүҙәләндерелгән образ. 52. Алжирҙың күршеһе. 54. Генерал салбарының таҫмаһы. 56. Кемдең йәки ниҙеңдер кәүҙәләнеше булған һүрәт, шәүлә. 57. Йыл миҙгелдәренә һәм тәбиғәт шарттарының үҙгәреүенә бәйле күренештәрҙе өйрәнеүсе ғалим. 58. Кеше араһында таралған яҡшы исем, абруй. 59. Күрәҙә борсағы. 60. Осар сыскан. 61. Малтыуарҙың ҡолағына һалынған тамға. 64. Ҡара икмәк ашлығы. 68. Кәләш итеп әйттергән ҡыҙ. 70. Өйҙәге балыҡтар "умартаһы". 75. Бер ерҙә йәшәгән халыҡ.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**51-се һандағы кроссворд яуаптары:**
**Горизонталь буйынса:** 1. Пантера. 3. Ҡамсығорт. 6. Думбыра. 11. Хәтер. 12. Араҡы. 13. Муйын. 14. Тәҡәт. 15. Юлтаева. 18. Әмәкәсова. 21. Самауыр. 26. Аккорд. 28. Аталғы. 31. Шаһиев. 33. Юлтаев. 34. Артыш. Маймыл. 36. Акинак. 37. Гүр. 39. Игенсе. 42. Талпан. 45. Хәсәнов. 47. Абонемент. 50. Ҡайнаға. 55. Друид. 56. Рауза. 57. Танго. 58. Аңҡау. 59. Ветеран. 60. Бакирова. 61. Бакиров.
**Вертикаль буйынса:** 1. Парвеню. 2. Рәхимов. 4. Агроном. 5. Реактив. 7. Умыртҡа. 8. "Аҫылйәр". 9. Стейк. 10. Сауҡа. 16. Трюк. 17. Етәр. 19. Касса. 20. Сәғәт. 22. Март. 23. Урал. 24. Баймырҙин. 25. Йыһаншин. 27. Дүшәмбе. 28. Адвокат. 30. Көтөү. 32. Вал. 33. Юша. 37. Галин. 38. Режим. 40. Енес. 41. Саян. 43. Ағай. 44. Проза. 45. Хәлилов. 46. Ондатра. 48. Бәддоға. 49. Нирвана. 50. Алабуға. 52. Асаинов. 53. Турне. 54. Суҫҡа.

ХОККЕЙ

# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ", ЧЕМПИОН БУЛ!

**"Салауат Юлаев" хоккей командаһы өсөн декабрь айы оло еңеүҙәр ҙә, ҙур еңелеүҙәр ҙә алып килде. Айҙың тәүге яртыһы Өфө уйынсылары өсөн уңышлы булһа, икенсе яртыһы хаҡында ошоно уҡ әйтеп булмай. Түбәнге Каманың "Торпедо"һын, Хабаровскиҙың "Амур"ын һәм Новокузнецкиҙың "Металлург"ын ҡыйратһа ла, юлаевсыларға Братиславаның "Слован", Праганың "Лев" һәм Мәскәүҙең "ЦСКА" командаларын еңеүгә көсө етмәне.**

Әлеге ваҡытта "Салауат Юлаев" бөтәһе 37 уйындан һуң 58 мәрәй менән Чернышев дивизионының һәм Көнсығыш конференцияһының 5-се урынын биләй. Ә дөйөм турнир таблицаһында иһә Өфө командаһы 9-сы урында.

Һуңғы уйындан һуң Башҡортостан командаһының баш тренеры алмашынды. Әлегә тиклем был вазифаны башҡарыусы Венер Сафин менән килешеүҙе өҙөп, клуб етәкселеге баш тренер вазифаһына ваҡытлыса Владимир Юрзинов-кесене тәғәйенләне. Тренерлыҡ штабына шулай уҡ Василий Чижов та индерелде.

2013 йылды беҙҙең хоккейсылар Чехов ҡалаһының "Витязь" командаһы менән осрашыуҙан башлаясаҡ. Киләһе йылда юлаевсылар көйәрмәндәренең ышанысын аҡлар һәм һөҙөмтәле уйын күрһәтер, тип ышанайыҡ. Ләкин баш тренерҙы ғына алмаштырыу уңышлы уйындар вәғәҙә итмәй, әлбиттә. Бында тренерҙар штабына ла, уйынсыларҙың үҙҙәренә лә берҙәм булып, еңеүгә ынтылырға һәм бар көстәрен, оҫталыҡтарын һалырға кәрәктер.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙ - **Дүртөйлө ҡалаһынан** Вероника Зарипова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Үтәгән ауылынан Закира Искәндәрова, Иҫке Муса ауылынан Факиһа Өмөтбаева, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Хәлиҙә Ғәҙелшина, Үрге Иҙрис ауылынан Рәмзиә Мостафина, Юлай Мостафин, **Күмертау ҡалаһынан** Нурия Хәлилова, Лилиә Батыршина, **Сибай ҡалаһынан** Алһыу Теләүҡабулова, **Өфө ҡалаһынан** Нәзирә Насырова, Мөхтәр Һөйөшев, Илһам Яхин, Шәүрә Шәкүрова, Нажиә Ғабдрахманова, Әлфиә Мырҙағәлина, Гәүһәр Батталова, Илһам Яхин, **Туймазы ҡалаһынан** Нәжибә Нәғимова, Рәсимә Ғарифйәнова, **Ишембай районы** Әхмәр ауылынан Гөлнур Солтанморатова, **Ейәнсура районы** Ишҡол ауылынан Нурвил Ҡыуатов, **Архангел районы** Архангел ауылы Айгөл Яппарова, **Әбйәлил районы** Буранғол ауылынан Вәсилә Килдейәрова, **Йылайыр районы** Ҡаҙырша ауылынан Усман Тәүелбаев, **Балтас районы** Штанды ауылынан Айһылыу Хаҡова, **Шаран районынан** Гөлсирә Ғәлимова, Рәмилә Халиҡова, **Бүздәк районы** Бүздәк ауылынан Нәфисә Хөснитдинова, Гөлнара Сәләхова, Шарбаш ауылынан Лиза Атнағолова, Ташлыкүл ауылынан Регина Хәкимова, Урҙайбаш ауылынан Гүзәл Ураҙбаева, **Ауырғазы районы** Үрге Ләкәнде ауылынан Рәсимә Йәғәфәрова, Иҫке Ибрай ауылынан Фәүзиә Шәйәхмәтова, Төрөмбәт ауылынан Ғәфүрә Юлмөхәмәтова, Мораҙым ауылынан Шамил Хәбибуллин, **Туймазы районы** Әгертамаҡ ауылынан Розалия Сәғитова, **Миәкә районы** Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Эльвира Суфиянова, **Ғафури районы** Кесе Үтәш ауылынан Әлфиә Рафиҡова, **Красноусол ҡасабаһынан** Зөһрә Абдуллина, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Гөлмизан Таштимерова, **Балаҡатай районы** Айҙаҡай ауылынан Нуриза Шархиева, Түбәнге Үтәш ауылынан Нурия Йомағолова, **Федоровка районы** Иҫке Сытырман ауылынан Фирҙәүес Солтанғолова, **Әлшәй районы** Раевка ауылынан С. Шәрипова, **Дәүләкән ҡалаһынан** А. Юлыева, **Күгәрсен районы** Аҙнағол ауылынан Владик Ҡыҙрасов, **Яңауыл ҡалаһынан** Г. Миңлейәрова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Һеҙгә ныҡлы һаулыҡ, күңел тыныслығы, бәрәкәтле тормош теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3, 6, 7 ғинуар 11.00, 14.00 "Үҙ йөрәгеңде тыңла!"** (Г.Андерсен), әкиәт
**4, 5 ғинуар 11.00, 14.00 "Алтын асҡыс"** (А.Толстой), музыкаль мажара
**5 ғинуар 19.00 "Хыялый"** (С.Әбүзәр), лирик комедия
**6 ғинуар 19.00 "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф.Бүләков), музыкаль комедия
**7 ғинуар 19.00 "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

### Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2, 3, 4, 5 ғинуар 11.00, 13.00, 15.00 "Урал батыр и три богатыря"** ғаилә өсөн Яңы йыл мюзиклы

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 декабрь - 8 ғинуар "По щучьему велению"** Яңы йыл әкиәте. Башлана **11.00, 14.00, 17.00.**

ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ

# АҪЫЛ ҺҮҘГӘ...

## аҫыл баһа кәрәк

**Гәзитебеҙҙең 2012 йылдағы һуңғы 52-се һанын ҡулығыҙға алаһығыҙ. Был юлы ла һеҙ үҙегеҙ теләгәнгә - рухты уятыр фекергә, йөрәкте ҡуҙғытыр аҡыллы һүҙгә, аң асыҡлығына өлгәштерер мәғлүмәткә юлығырһығыҙ, тип ышанабыҙ һәм үтеп барған йылда гәзитебеҙ биттәрен алтын фекере менән күтәрмәләгән, баҫмабыҙға матур йөкмәткө өҫтәгән, тормош һәм хеҙмәт тәжрибәһе менән уртаҡлашҡан авторҙарҙы билдәләп, йыл лауреаттарын иғлан итмәксебеҙ.**



**Эльза Мөхәмәҙиева**, Белорет районының "Йайыҡ" гәзите хәбәрсеһе - Белорет һәм Учалы районының матур ғаиләләре, тормошкөнкүреш йолалары, социаль хәлторош тураһындағы яҙмалары өсөн.



**Зәкирйән Әминев**, Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре - тарихка арналған материалдары өсөн.



**Илдар Ғәбитов**, иҡтисад фәндәре кандидаты - һандан һанға баҫылған "Баш эшләтмәк", "Баш ҡатырғыстар"ы өсөн.



**Зәйтүнә Әйле**, "Киске Өфө" гәзите журналисы- гәзиттең һәр һанында баҫылған баш ҡала мәғлүмәттәре, аналитик материалдары өсөн.



**Артур Батыршин**, "Киске Өфө"-гәзитенең верстка буйынса инженеры - гәзиттең йҙ йөҙөн булдырыу йүнәлешендәге ижади эше өсөн.

### С. Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы

Белеүегеҙсә, баҫмабыҙҙа күп йылдар күренекле башҡорт яҙыусыһы, хикәйә оҫтаһы Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы бара. Был бәйге барышында күп яңы исемдәр асылды, өмөтлө хикәйәселәр барлыҡҡа килеүенә шаһит булынды. Конкурс киләһе йылда ла дауам итәсәк. Шулай итеп, быйылғы лауреаттар:



**Таңһылыу Баһаүетдинова**, Бөрйән районы "Таң" гәзите хәбәрсеһе - 51-се һанда баҫылған "Аҡбәкәл" хикәйәһе өсөн.



**Иҙрис Ноғоманов**, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылында йәшәй - гәзиттең 42-45 һандарында баҫылған "Ҡаҙаҡкар" хикәйәте өсөн.

### Авторҙарыбыҙға рәхмәт

Республикабыҙҙың төрлө райондарынан, ҡалаларынан гәзитебеҙгә яҙышып торған авторҙарыбыҙға - Айһылыу Ғарифуллина, Урал Мостафин, Әғләм Шәрипов, Нурия Ҡунысбаева, Хәлил Һөйөндөков, Мәүлит Ямалетдин, Риф Мифтахов, Гүзәл Иҫәнгилдина, Радик Өмөтҡужин, Әнүәрә Хәйбуллина-Монасипова, Фәүзиә Яхина (Усманова), Флора Бикембәтова, Азат Ярмуллин, Рәшит Шәкүр, Тимер Ниәтшин, Мөҙәрис Багаев, Лена Абдрахманова, Фәрзәнә Аҡбулатова, Көнһылыу Ҡотлобаева, Самат Бикбирҙин, Рәүеф Бикташев, Ҡасим Янбаев, Ғайса Ишмөхәмәтов, Сәриә Ғарипова, Юлай Ғәйнетдинов, Заһир Дәүләтбирҙин, Мәхмүт Хужин, Миләүшә Ҡаһарманова, Спартак Ильясов, Фәриғә Кусәковаларға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Ошо исемлектең артабан да дауам итеүен, төрлө тарафтарҙан рухты сәмде, ғәмде күтәрер фекерҙәр килеп, гәзитебеҙ биттәренә күсеүен теләйбеҙ.

**Лауреаттарыбыҙҙы, енеүселәребеҙҙе, барлыҡ авторҙарыбыҙҙы Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ. Күңелдәрегеҙгә рух, ҡот, тәнегеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, ижад ҡомары теләйбеҙ.**

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН

# БАШҠОРТ ЙЫРЫ...

## "фанера аҫтында" йырланмай шул...

**Рәсәйҙең шоу бизнес донъяһында ниндәй генә титулдәрәжәләр юҡ: примадонна, поп-король, музыка короле, "байрам кешеһе", йондоҙ һ.б. Уларҙың концерттарына халыҡ ағылып йөрөй, ул концерттарға алдан күплән билет алып, шуны арттырып һатып, миллионер булып китеүселәр ҙә бар, тиҙәр. Әммә шундай дәрәжәле эстрада әһелдәре берәр Халыҡ-ара профессиональ конкурста ҡатнаша ҡалһа, "яланғаслығынан" оятҡа ҡала. Бәҡтиһән, бизнес менән ысын сәнғәт араһында ер менән күк араһындағылай айырма бар икән. Ишетеүемсә, үткән аҙнала Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында үткән "Башҡорт йыры" конкурсында ла (был конкурстағы төп талап - тере тауышҡа йырлау) сәхнәгә "яланғас", йәғни "фанераһыҙ" сығып, оятҡа ҡалыусылар булған икән. Оятҡа ҡалыу шунан ғибәрәт: тамашасы йүнләп ҡул сапмағын да ҡуйған. Бик ғәҙел баһа был.**

Фанераға йәғни фонограммаға йырлауҙың нигеҙендә тамашасаны алдау, йырлаған булып ҡыланыу ята. Был һәр бер диндә ҡаралған иман, әхлаҡ принциптарына ла ҡаршы килә. Шуға күрә Ҡытайҙа, Белоруссияла һәм Төркмәнстанда фонограммаға йырлау закон тарафынан тыйылған. Ҡытайҙа, мәҫәлән, фонограммаға бер йыр башҡарған өсөн 1240 доллар штраф түләтәләр. Америкала ла фанера аҫтында йырлау закон тарафынан тыйылмаһа ла, әгәр ҙә йырсы был юлға баҫһа, уны һыҙғырып туктаталар, аҙаҡтан журналистар уны башҡаса сәхнәгә сыҡмаҫлыҡ хәлгә еткереп мәсхәрә итәләр.

2006 йылда Мәскәү ҡала Думаһы депутаттары йырсыларҙы, композиторҙарҙы һәм продюсерҙарҙы саҡырып, фанера аҫтында йырлауға ҡаршы закон ҡабул итергә йыйыныуҙары тураһында хәбәр итә һәм проекты бергәләп тикшерергә әҙер булыуҙарын белдерә. Әммә сәнғәт әһелдәре был законға ҡаршы сыға. Закон проектында концерт афишаһында фонограмма ҡулланыуға бәйле иҫкәрмәнең зарурлығы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Шулай уҡ фонограмма ҡулланылған концерттың билет хаҡы, ниндәй генә йондоҙ сығыш яһауға ҡарамаҫтан, 100 һумдан да артмаҫҡа тейеш, тип билдәләнә. Мәскәү ҡала Думаһы тарафынан закондың ҡабул ителмәүендә йырсы Алексей Чумаковтың сығышы ла роль уйнай:"Бындай закон кәрәк, әммә файҙаһы булырмы? Сөнки тәмәке ҡабының тышына ла "тартыу һаулыҡҡа зарарлы" тип яҙылған, әммә барыһы ла тарта. Йырсының тере тауыш менән сығыш яһау мәсьәләһенә килгәндә, бында бик күп ҡатмарлыҡтар бар..." - ти йырсы. Фонограммаға йырлауҙан арыныр өсөн иң тәүҙә пиратлыҡтан ҡотолоу зарурлығын билдәләй продюсер Валерий Белоцерковский: "Беҙ ҡара ш уйылдырыҡ етештерәбеҙ, ә эрәбеҙгәзә кеше уны крахмалдан яһай һәм шундай уҡ банкаға һалып һата".

Шулай ҙа фанера аҫтында йырлауҙы, йәғни халыҡты алдауҙы бер ниндәй ҙә ҡатмарлыҡтар һәм пиратлыҡ менән аҡлап булмайҙыр. Улары - һылтау ғына. "Башҡорт йыры" конкурсында ошо хәҡиҡәт асылған да инде. Ә бына тере тауыш менән башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы Юнир Һағынбаевты, Ғаяз Ғәйетбаевты, Марсель Ҡотоевты, Иҙел Аралбаевты, Заһир Иҫәнсуринды, Рөстәм Шаһыбаловты тамашасы дәррәү ҡул сабыуы менән алҡышлаған, тип ишеттем. Фанера аҫтында йырланмай шул башҡорт йыры!

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ** ишетеп ҡалды.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# СИТТЕ МАҠТА...

## илеңдә тор

Ирле бисә - сирле бисә, ирһеҙ бисә - бауһыҙ уймаҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ғорурлыҡ - хаталарыңдың битлеге ул.

**(Йәһүд мәҡәле).**

Асыулы сағыңда бер ниндәй ҙә ҡарар ҡылма.

**(Сенека).**

Белемең булмаһа ла, намыҫың булһын.

**(Немец халыҡ мәҡәле).**

Кеше йыш ҡына, бәхет унан алыҫта, тип уйлай, ә бәхет тыныс ҡына аҙымдар менән уның эргәһенә килеп торған була.

**(Джованни Боккаччо).**

Кеше ни тиклем бөйөк булған һайын, шул тиклем игтибарлыраҡ һәм һынамсылыраҡ.

**(Альфред Теннисон).**

Мин тыңлайым -мин онотам, мин күрәм -мин иҫтә ҡалдырам, мин эшләйем - мин аңлайым.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Аҡыл һығылмалығы матурлыҡты алыштыра.

**(Стендаль).**

Беҙ бер ваҡытта ла ул тиклем бәхетле лә, ул тиклем бәхетһеҙ ҙә булмайбыҙ.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Китаптан уҡып ҡына белемгә эйә булыу - ул нигеҙ түгел, ә биҙәүес кенә.

**(Мишель де Монтень).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Һыу баҫа башлағас, бер кеше өйөнөң башына менеп ултыра ла, Хоҙайҙан уны ҡотҡарыуын үтенеп, укына башлай. Уға кәмә менән бер кеше йөҙөп килә һәм ултырырға саҡыра. "Юҡ, - ти кеше, укыныуын дауам итеп, - мине Хоҙай ҡотҡарасаҡ". Бер аҙҙан тағы бер кеше кәмәлә йөҙөп килә. "Хоҙай ҡотҡарасаҡ мине", тип, уның ярҙамынан да баш тарта өй башында ултырыусы. Ул шулай өсөнсө кәмәсенең ярҙамын да кире ҡаға һәм... батып үлә. Теге донъяла Алла ҡаршыһына барып баҫкас, батып үлеүсе Уға "Мин һине саҡырҙым, һин мине ҡотҡарманың", тип, үпкәһен белдерә. "Мин һинә өс тапҡыр ярҙам ҡулы һуҙҙым, ә һин өсөһөнән дә баш тарттың", ти Аллаһы Тәғәлә".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИКОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 5144